ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Ҡиске Өфө

7-13 декабрь (аҡъюлай) 2019
№49 (883)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреккле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Балаң тәмәке тартһа...**



3

**Дала улдары - ҡыпсаҡтар беҙ!**



7

**Боронғо Өфөбөҙгә...**



асыҡ һауалағы музей-тәҙрә аша баҡ! 8-9

**Һин янмаһаң, мин янмаһам...**



10

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм йәмәғәт! Арзанға яҙылып ҡалығыҙ!***
***Республикабыҙҙың һәр район-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 2 декабрҙән 12 декабргә тиклем иғлан ителгән ун көнлөктә 2020 йылдың беренсе яртыһына ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә ташламалы хаҡҡа - 611 һум 70 тингә яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәләге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине.***
***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ғаиләлә өсөнсө бала тыуғандан һуң атайҙар капиталы булдырырға тәкдим итәләр. Нисек уйлайһығыҙ, был күп балалы ғаиләләр һанын арттырырға ярҙам итерме?

***Даян СОЛТАНҒУЖИН, Аҡъяр район дауаханаһы табибы, йәмәғәт эшмәкәре:*** Был тәкдимде бик урынлы һәм хуплауға лайыҡ тип уйлайым. Һуңғы ун йылда Рәсәйҙә халыҡ һаны кәмеүгә табан бара. Шуға күрә ил етәкселеге "Милли проект" сиктәрендә ошо хәлде яҡшыртыуға йүнәлеш алып, демография мәсьәләләренә матди ярҙам сараларын йәнләндерә төштө. Айырыуса бала тапҡан әсәләргә, шулай уҡ күп балалы ғаиләләргә матди ярҙам кимәле Рәсәй күләмендә лә, шул уҡ ваҡытта төбәк властары тарафынан да арттырылды. Мәҫәлән, әле яңыраҡ ҡына Башҡортостан парламенты депутаттары күп балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы тураһында законға үҙгәрештәр ҡабул итте һәм һигеҙ һәм унан да күберәк бала тәрбиәләгән ғаиләләргә 600 мең күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү алырға тейешле категориялар исемлеген киңәйтте. Әсәлек капиталы суммаһы ла арта бара. Әлеге ваҡытта ғаиләлә тыуған икенсе бала өсөн уның суммаһы 453 һум булһа, киләһе йыл 470-кә етергә тейеш.

Был йүнәлештә тағы бер яңылыҡ ишетеп ҡыуандыҡ: өсөнсө бала өсөн тағы бер тапҡыр Әсәлек капиталы бүлергә тигән тәкдим ҡарала һәм ул атайҙарға тапшырыласаҡ. Бер яҡтан, был ғаилә тәрбиәһендә атайҙар ролен һәм абруйын күтәрергә ярҙам итеп, уларҙың яуаплылығын арттырыуға булышлыҡ итер, моғайын, икенсенән, ғаиләләрҙе өсөнсө һәм унан күберәк бала табырға дәртләндерер ине. Әлбиттә, атайлыҡ капиталын түләүҙең дә үҙ тәртиптәре булдырыласаҡ: ғаиләләге бөтә балалар ҙа бер үк ата-әсәнән һәм бер үк ғаиләлә тыуып, тәрбиәләнергә, ә ата-әсә законлы никахта булырға тейеш. Бынан тыш, атайҙарҙың әхлаҡ кимәле, ғаиләлә генә түгел, йәмғәтселек мөхитендә тотҡан абруйы, ғаиләһе өсөн яуаплылығы, файҙалы эш менән мәшғүллеге лә иҫәпкә алыныр, тигән фекерҙәмен, юғиһә, эскелеккә бирелеп, эшләмәй ятҡан атайҙар ҙа бар бит, үкенескә. Ғаиләлә балалар һанын арттырыу менән генә түгел, уларҙың сәләмәт мөхиттә тәрбиә алыуына ла иғтибар ҙур булырға тейеш, йәғни һан ғына түгел, сифат та булһын, тип әйтергә теләүем. Ғаиләлә атайҙар капиталын тотоноу мөмкинлектәре лә бер аҙ киңәйтелһен ине. Мәҫәлән, фермер хужалығы йә башҡа төрлө эшҡыуарлыҡ ойоштороу, машина һатып алыу өсөн дә бик ярап ҡалыр ине. Әйткәндәй, ошо көндәрҙә РФ Хөкүмәте Әсәлек капиталын баҡса участкаһында йорт төҙөргә рөхсәт иткән закон проектын Дәүләт Думаһы ҡарауына индерҙе. Әлбиттә, балаларҙың киләсәген ҡайғыртыу, уларға уҡыу, белем алыу, торлаҡ төҙөү йә һатып алыу кеүек мәсьәләләр беренсе сиратта хәл ителергә тейештәр.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

## ЯҠШЫ ЭШТӘРҘЕ ЛӘ...
### күрә beләйек

**Бөгөнгө көндә интернетта ла, ваҡытлы матбуғатта ла негатив хәбәрҙәр күп урын биләй. Ләкин тирә-яғыбыҙға күҙ һалһаҡ, матур эштәр башҡарылыуын да, яҡшы хәбәрҙәрҙең дә етерлек булыуын күрәбеҙ. Спорт, мәғариф, мәҙәниәт һәм башҡа өлкәләрҙә милләттәштәребеҙ һәм республикала йәшәүсе башҡа милләт вәкилдәре ҙур уңыштарға өлгәшә. Әлеге яҙмамда үҙемдең күҙгә салынған яҡшылыҡтар менән бүлешеп үтергә уйлайым.**

Мин йәшәгән Первомайск ауылы Нуриман районының иң төпкөлөндә урынлашҡан биләмәләрҙең береһе. Ләкин район үҙәгенән ситтә булһаҡ та, беҙҙә лә тормош гөрләй. Мәҫәлән, ауылыбыҙҙың үҙәк урамына асфальт түшәлде. Ауылды һыу менән тәьмин итеү эштәре әүҙем башҡарыла, урамдар яҡтыртылды, сүп-сар йыйыу өсөн махсус майҙансыҡ булдырылып, контейнерҙар ҡуйылды. Башҡа төбәктәрҙә балалар баҡсаһы, мәктәптәр ябылыуы хаҡында хәбәрҙәр килеп етеп тора. Беҙҙә иһә иҫке мәктәп урынына яңыһын төҙөй башланылар.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

## ӨЛГӨЛӨ ҒАИЛӘЛӘР...
### ошолай була

**Ошо көндәрҙә Өфөнөң йәшәк ҡашы булырҙай татыу ғаиләләре араһында "Йәш ғаилә-2019" ҡала конкурсы үтте. Ҡала хакимиәтенең йәштәр эштәре буйынса комитеты тарафынан 21-се тапҡыр ойошторолған конкурста һәр райондан һайлап алынған иң күркәм ете ғаилә ҡатнашты.**



*Совет районынан Ливиза һәм Наил Нәбиуллиндар ғаиләһе.*

12+

***✔ Атайҙар капиталы булдырыу, ысынлап та, бер яҡтан, дәүләт, йәмғәтселек һәм ғаиләһе алдында атайҙарға үҙҙәренең баһаһын, дәрәжәләрен һәм күңелдәрен күтәреп ебәрерлек бер мөһим сара буласаҡ, тип уйлайым.***



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ЯҠШЫ ЭШТӘРҘЕ ЛӘ...

## күрә беләйек

(Башы 1-се биттә).

Оҙаҡламай 20 урынлыҡ балалар баҡсаһы һәм 60 уҡыусыға иҫәпләнгән мәктәп үҙ ишеген асыр, тип өмөтләнәбеҙ. Бәлки, кемдер бераү "Былар барыһы ла хөкүмәттең иненә һалынған, бурыс итеп ҡуйылған эштәре һәм улар уны башҡарырға тейеш!" тиер. Бәхәсләшмәйем, дөрөҫлөк бар, ләкин һуңғы йылдарҙа хөкүмәттең дә төрлөсә эшләгәненә шаһит булынды бит. Ә инде илдең башҡа төбәктәрендәге төпкөл ауыл түгел, ә хатта район үҙәктәренең, бәләкәй ҡалаларҙың ниндәй торошта булыуын күреп ҡайтҡандан һуң... беҙҙә хәлдәр арыу икән, тип ҡыуандым. Артабан да яҡшыға ынтылып туҡтамаҫ, тәҙәләш эштәре әүҙем барыр, ауылдарҙа йәштәр төпләнеп ҡалып, балалар үҫтереп матур йәшәрҙәр, тип ышанам.

Республикабыҙ йылға һәм күлдәргә бай. Был, бер яҡтан, һәйбәт, икенсенән, күп ауылдар йылға аша сығыу өсөн тейешле кимәлдә эшләнгән күперҙәрҙең булмауынан ыҙа сигә. Белорет районында Нура исемле йылға аға. Отнурок ауылында йәшәүселәр һәм унда ҡунаҡҡа барыусылар ошо йылғаны алты урында үтә һәм ауыр йөк машиналары өс күперҙә эштән сығарҙы инде. Күперҙәрҙең әллә ҡасан тәҙәлгән булыуы ла үҙ ролен уйнағандыр, әлбиттә. Бер күпер 2017 йылда уҡ рәтләнһә, Отнурок яғындағы күперҙәр быйыл, ниһайәт, сафҡа индерелде. Хәҙер ауыл халҡы рәхәтләнеп еңел машиналарҙа ҡалаға сыға, был күперҙән мәктәп автобусы йөрөй, "Тиҙ ярҙам" елеп килеп етә. Шулай уҡ яҡшы яңылыҡ һәм ул тарафта йәшәүселәрҙең көнкүрешен еңеләйткән эшмәкәрлек.

Республикала һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә лә эштәр әүҙемләшә һымаҡ. Быға тиклем күп ауылдарҙа фельдшер-акушерлыҡ пункттарын яптылар, хәҙер бына асалар, тип ишетелеп тора. Күптән түгел Бөрйән районында фельдшер-акушерлыҡ пункты асылыуы, Йылайыр районы Анновка ауылында ла ошондай уҡ пункт төҙәлә башлауы хаҡында уҡыныҡ. Алыҫта урынлашҡан медицина пунктына йәки район үҙәгенә барыу сирле кеше өсөн ниндәй михнәт икәнен барыһы ла аңлай, шуға күрә әлеге медицина пункттары асылыуы урынлы һәм кәрәкле.

Беҙ - ауыл хужалығы бар яҡлап та үҫешһен өсөн бөтә тәбиғи мөмкинлектәре булған төбәк. Оҙаҡ йылдар республиканың ауыл хужалығы, бөтә илдәгесә, ауыр хәлдә булды. Әлеге мәлдә ошо өлкәлә башҡарылған эштәр бермә-бер артты. Райондарҙың ауыл хужалығы предприятиелары ла, шәхси фермерҙар ҙа әүҙемләште. Айырыуса фермерҙарҙы билдәләп үткем килә, улар элекке колхоз-совхоз ерҙәрен тергеҙә, емерелеп бөткән торған фермаларҙы рәтләп, мал-тыуар үрсетә, ҡый баҫып яткан баҫыуҙарҙы эшкәртә. Еңел булмаған эштәрендә тик уңыштар ғына теләргә ҡала ундай фиҙәкәрҙәргә. Шулай уҡ дәүләт тә уларҙы үҙ ярҙамынан ташламайынса, ҡеүәтләп торһа ине.

Бына шулай, туғандар, күңелле хәбәрҙәрҙе лә берберебеҙгә еткереп торайыҡ, ауырлыҡтарға бирешмәйек, матур йәшәйек.

**Даян АРЫҪЛАНОВ.**
**Нуриман районы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ғаиләлә өсөнсө бала тыуғандан һуң атайҙар капиталы булдырырға тәкдим итәләр. Нисек уйлайһығыҙ, был күп балалы ғаиләләр һанын арттырырға ярҙам итерме?



(Башы 1-се биттә).

***Айгөл БАЙРАМҒОЛОВА, Баймаҡ районы Тимәс ауыл хакимиәте башлығы:*** Беҙҙең хакимиәт биләмәһе бик ҙур: ул туғыҙ ауылды берләштерә. Шуға күрә үҙебеҙҙең урындағы демография торошона әллә ни зарланырлыҡ түгел: 7 мең 430 кеше йәшәй беҙҙә. Балалы, шулай уҡ күп балалы ғаиләләр байтаҡ. Тимәстең йылға арьяғы өлөшө - элекке леспромхоз зонаһында икенсе мәктәп төҙәлдә, шулай уҡ икенсе балалар баҡсаһы асылды. Былар үҙҙәре үк ауылдарҙа балаларҙың күп булыуы хаҡында һөйләп тора. Балалар баҡсаһына хатта сират торалар, сөнки әсәйҙәр ферма бүлексәләрендә, малсылыҡта эшләй. Урындағы психоневрология интернатында 270 кешегә эш урыны булдырылған. Ауыл биләмәләрендә 5 балалы ғаиләләр байтаҡ. Яңыраҡ ҡына өс кешe баш ҡалабыҙ Өфөгә барып, "Әсәлек даны" миҙалына лайыҡ булып ҡайтты, сиратта тағы ла шундай биш һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән 17 әсә бар.

Күп балалы ғаиләләр хаҡында һөйләгәндә, балалар тәрбиәһендә атайҙар өлөшө хаҡында ла әйтеп китеү мотлаҡ, сөнки беҙҙәге бындай ғаиләләрҙә атайҙар хаҡлы абруй ҡаҙанған, ғаиләләрен матди яҡтан тәьмин итеүгә яуаплы ҡарайҙар, бөтәһе лә эш менән мәшғүл - шуныһы мөмкин дә түгел. Ошо көндәрҙә ғаиләлә тыуған өсөнсө бала өсөн атайҙар капиталы булдырыла тигән хәбәр ысынға сыҡһа, бик һәйбәт сара булыр ине, тип уйлайым. Элек был ярҙам атайҙарға әсә менән берәй хәл килеп тыуған осраҡта ғына (вафат булһа йә әсәлек хоҡуғынан мәхрүм ителһә) бирелә ине. Әлеге тәкдим буйынса иһә, ысынлап та, ғаилә башлығы булараҡ, бала ҡарауҙа, аҫрауҙа һәм тәрбиәләүҙә атайҙар төп урынды биләй: улар мал таба, ғаилә бюджетын ҡайғырта, шул уҡ ваҡытта балаларҙың эш һөйөүсән, тәртипле булып үҫеүенә лә ныҡ йоғонто яһай. Шуға күрә атайлыҡ капиталы уларға исемләп тә бирелергә тейеш. Аҡсаны ғаилә мәнфәғәтендә тотоноу мәсьәләһе лә бергә хәл ителергә тейеш. Өсөнсө балаға атайҙар капиталы булдырыу, һис һүҙһеҙ, күп балалы ғаиләләрҙең матди хәлен яҡшыртыуҙа бик ҙур ярҙам буласаҡ. Ҙур ғаиләнең ихтыяждары һәм сығымдары ла ҙур. Хәҙер күп уҡыу йортҡарына инеү түләүле. Әгәр торлаҡ мәсьәләһе борсомай икән, аҡсаны балаларҙың уҡыуына тотоноу мөмкинлеге хаҡында ла оноторға ярамай, сөнки юғары белемгә эйә булыу балаға киләсәктә тормошта үҙ урынын тиҙерәк табырға, өлгөргән шәхес булып үҫешергә ярҙам итәсәк.

***Тәнзилә БАЙГИЛДИНА, хеҙмәт ветераны:*** Ғаиләлә тыуған өсөнсө балаға Әсәлек капиталы кеүек уҡ бер тапҡыр түләнә торған ғаилә капиталы булдырырға кәрәклеге һәм уны атайҙар капиталы тип атарға тәкдим итеүҙәрен ишеткәс, бик шатландыҡ, сөнки өс балам да ғаиләле, берәр-икешәр балалары бар, ләкин өсөнсөһөн табырға нишләптер йөрьәт итмәйҙәр. Исмаһам, тап ана шулар кеүек башҡа бик күп ғаиләләрҙе лә матди яҡтан дәртләндереп ебәрергә ярҙам итер ине, тип уйлаған булам үҙемсә. Атайҙар капиталы тип улар исеменә бирергә йыйыныуҙары ла һәйбәт ниәт, сөнки бала тыуыуҙа һәм, гөмүмән, уларҙы үҫтереп, кеше итеүҙә атайҙың роле лә баһалап бөткөһөҙ. Ә беҙҙә бөтөн маҡтау-хөрмәт билдәләренә тик әсәй генә лайыҡ тигән һымағыраҡ ҡараш йәшәй. Миҙалды ла улар ала, хөрмәт-һөйөү һүҙҙәре лә уларға, аҡсаһы ла уларға, тигәндәй. Хәйер, Әсәлек капиталын, әлбиттә, уны үҙ исеменә алған әсә үҙе өсөн тотонмай ҙа бит, шулай ҙа...

Әле Мәскәүҙә РФ Йәмәғәт палатаһының ғаилә мәсьәләләре буйынса комиссияһы рәйесе урынбаҫары С.Рыбальченконың был тәкдимен Президент В.Путин да яҡлап сыҡты, тип уҡыным. Тимәк, мәсьәләгә етди ҡараш бар, был проектты ике-өс йылдан көсөнә инер, тип фаразлаһалар ҙа айырым төбәктәрҙә уны киләһе йыл уҡ башлап, һынап ҡарарға уйҙары бар икән. Атайҙар капиталы булдырыу, ысынлап та, бер яҡтан, дәүләт, йәмғәтселек һәм ғаиләһе алдында атайҙарға үҙҙәренең баһаһын, дәрәжәләрен һәм күңелдәрен күтәреп ебәрерлек бер мөһим сара буласаҡ, тип уйлайым. Икенсенән, иш янына - ҡуш, тигәндәй, ғаилә бюджетына һиҙелерлек файҙа килтерәсәк ул. Дөрөҫ, атайҙар капиталы ла ҡулаҡса килеш бирелмәй; уны алыу һәм маҡсатлы йүнәлештәр буйынса ғаилә мәнфәғәтендә тотоноу шарттары ла шул уҡ Әсәлек капиталы кеүек буласаҡ, тиҙәр. Һәр хәлдә, булһын ғына, барҙың урыны табылыр. Әйткәндәй, әле бына Дәүләт Думаһында дүрт һәм унан күберәк балалы ғаиләләргә ғаилә капиталы булдырыу тураһында депутат Ирина Яроваяның проекты ҡарала. Депутат фекеренсә, балаларҙың атай-әсәйле булып, етеш тормошта үҫеүе күп йәһәттән баланың бәхетле яҙмышын тәьмин итә. Унан килеп, бындай ҙур һәм татыу ғаилә башлыҡтарының никах ептәре лә ныҡлы, ышаныслы була. Бының менән килешмәй мөмкин түгел: юҡ талаштыра, бар яраштыра, тигән бит халҡыбыҙ аҡылы ла.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостанда властар Тораҡ пункттар эстетикаһы йылы тип иғлан ителгән 2020 йылда тормошҡа ашырылырға тейешле маҡсаттар исемлеген төҙөнө. Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә вице-премьер һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Борис Беляев дүрт төп йүнәлеште иғлан итте: газондар яһау, тротуарҙарҙы төҙөкләндереү, урамдарҙы яҡтыртыуҙы монтажлау, ҡоймалар ҡуйыу, дөйөм алғанда, ҡасабаларҙың тышҡы йөҙөн берҙәм стандартҡа килтереү.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Дәүләт хеҙмәт инспекцияһына һәм Хеҙмәт министрлығына Башҡортостан вахтасыларын Владивостокка ебәргән "Өфөнефтемаш" компанияһын тикшерергә ҡушты. Эшселәр ҡайта алмай, уларҙың билетҡа ла аҡсаһы юҡ. Радий Хәбиров ошондай ғәҙелһеҙлеккә юл ҡуйған предприятие етәкселәренең закон сиктәрендә яуаплылыҡҡа тарттырылыуын шәхсән күҙәтәсәген белдерҙе.

✔Башҡортостан Республикаһының "Ағиҙел" башҡорт художество кәсептәре предприятиеһы етәксеһе итеп Гүзәл Кәримова тәғәйенләнде. Бынан алда ул "Орнамент" халыҡ художество кәсептәрен һаҡлау һәм үҫтереү автономлы коммерцияға ҡарамаған ойошманың башҡарма директоры вазифаһын биләне. Предприятиеның генераль директоры "Башинформ" агентлығы хәбәрсеһенә компанияның эшмәкәрлеге тураһында һөйләне, шулай уҡ киләсәккә пландары менән уртаҡлашты.

✔Художестволы гимнастика буйынса атҡаҙанған спорт мастеры, Рәсәй һәм халыҡ-ара ярыштар еңеүсеһе, ике тапҡыр Европа чемпионы, телевидение алып барыусыһы Ләйсән Үтәшева 5 декабрҙә Өфөгә килде. Танылған яҡташыбыҙ Халыҡтар дуҫлығы проспектында урынлашҡан Спорт әҙерлеге үҙәгендә Башҡортостандың художестволы гимнастика буйынса чемпионатын асыуҙа ҡатнаша, оҫталыҡ дәрестәре үткәрә.

✔Башҡортостанда яңы visitrb туристик порталы эшләй башланы. Ресурста туристик маршруттар, шифаханалар, милли аш-һыу, сувенирҙар, шулай уҡ Башҡортостандың баш ҡалаһының иҫтәлекле урындары тураһында мәғлүмәт тупланған. Айырым ҡушымтала республиканың сәйәхәттәр ойоштороған туроператорҙары хаҡында мәғлүмәттәр баҫылған.

*✓ Ғаиләһенә көн дә ниндәйҙер ваҡыт бүлгән, кистәрен ваҡытында өйҙә булыуҙы талап иткән, аралашҡан дуҫ-иштәрен белгән, ул йәки ҡыҙының тормошонда ниндәйҙер роль уйнаған атай-әсәйҙең балаһы тәмәкегә ылыҡмаясаҡ та.*

УЙЛЫҒА - УЙ

**Рәсәйҙә балиғ булмаған балалары тәмәке тартҡан өсөн ата-әсәләргә штраф һала башлауҙары ихтимал. Ошоно күҙ уңында тотҡан закон проекттары бер нисә тапҡыр Дәүләт Думаһына ҡарауға индерелһә лә, элек ул Хөкүмәттә хуплау тапмаған һәм проект авторҙарына ҡайтарылған булған. Әле был тәҡдимде Эске эштәр министрлығы индергән. Тәмәке тартҡан балаларҙың ата-әсәһенә һалынған штраф күләме аныҡланмай. Фәҡәт проектҡа ярашлы тәүҙә иҫкәртеү яһау, шунан һуң штраф, был да ярҙам итмәгәндә, бер нисә тәүлеккә ҡулға алыу тураһында һүҙ бара.**

# БАЛАҢ ТӘМӘКЕ ТАРТҺА...

Балала тәмәке тартыу теләге ҡайҙан килеп сыға? Табиптар һәм психологтар иҫәпләүенсә, ысынында был организм, аң теләгән теләк тә түгел икән. Ябай ҡыҙыҡһыныу ғына. Бына ошонан ғына башлана икән баланың тәмәкегә ылығыуы. Ололарҙа күрә лә, тәмәке тартыу "круто", тәмәке нимәгәлер ярҙам итә, тәмәке һине үҙаллы, ҙур кеше итеп күрһәтә тип уйлай бала. Малайҙар, ғәҙәттә, 8-10, ҡыҙҙар 12-13 йәштәрҙә тәмәке тәмләп ҡарай. Хатта беренсе тапҡырында башы әйләнеп, ҡоҫоп ҡуйғанда ла ҡайһы бер балалар шаярыуын дауам итә. Бишенсе тартылған сигарет уларҙы үҙ тоҙағына эләктерә лә инде. Бишенсе-алтынсы тапҡырҙан һуң баланың тартҡыһы килә башлай. Артабан инде улын йә ҡыҙын был насар ғәҙәттән ҡотолдороу ата-әсәгә ауырға төшәсәк.

Һәр бала (бәлки, һәр үк түгелдер ҙә) үҙ ваҡытында тәмәке менән ҡыҙыҡһынып ала. Бындай хәлдәрҙе бөгөнгө ололар үҙҙәре лә хәтерләйҙер әле. Мәҫәлән, беҙҙең ғаиләлә тәмәке тартҡандар булманы, күрше-тирәлә лә. Шунлыҡтан, тәмәке тартҡан кешене лә күрмәй үҫтек. Бары телевизорҙа ғына боронғо урыҫ киноларындағы ирҙәрҙең өйҙә, мейес алдында йәки бүлмәлә тартҡанын ҡарап хайран була инек. Әсәйем шундуҡ: "Тьфү, йүнһеҙ урыҫ!" тип әрләмәй ҡалмай, шуғамылыр, был ғәҙәттең насар эш икәнен аңғара инек. Шулай ҙа тәмәке ҡыҙыҡһындыра бит! Магазинда апай-инәйҙәрҙең аҙыҡ-түлек алғанда айырым яулыҡтарына шул тәмле еҫле (махорка еҫе оҡшай ине) ҡаптарҙы тау итеп өйөп һалып бәйләгәнен ҡарап торам. Үҙебеҙгә лә алдыртҡым килә, тик кәрәге булмағас, алмайҙар. Минең ҡыҙыҡһынған сағым үҙемдән ике йәшкә оло ағайымдың да мауығыуы менән тура килә. Уға ике туған ағайым да ҡушылған. Быларҙың тартып ҡарарға теләүен мин дә хуплап, урам буйлап төпсәк эҙләшәм. Тик бер бөртөк төпсәк тә тапмайбыҙ. Ауылдың бар урамдарын, клуб, контора эргәләрен ҡарайбыҙ - юҡ. Ир-егеттәр шулай йәшереп кенә тартты микән? Ахырҙа мине магазинға ебәрҙеләр. Һатыусы "Кемгә?" тип һорай. "Атайыма", тием алдан өйрәтелгәнсә. "Атайың тартмай һинең, бындай йомошҡа әсәйең килһен", тип бора ла сығара апай. Ағайҙарым шулай ҙа тәмәкене таба, кемдекендер сәлдереп, тау башына менеп тартып ҡарайҙар. Береһе хәле бөтөп йығыла, икенсеһе ҡоҫоп ауырый, саҡ ҡайтып инәләр өйгә. Ә өйҙә үҙҙәренә туҡмаҡ эләгә өҫтәп. Тәмәке урлаған өсөн дә, магазинға барып йөрөгән өсөн дә (һатыусы ошаҡлаған) барыбыҙға ла өлөш сыға. Бындай хәлдәрҙең төрлө варианттары ғаиләләге туғыҙ баланың туғыҙы менән дә була, әммә уларҙың береһе лә тәмәкегә өйрәнмәй. Сөнки атай-әсәй тартмай. Был бик мөһим фактор. Ғаиләлә тәмәкенең йәки башҡа насар ғәҙәттең инеше юҡ икән, уның (тартып ҡарауынын) ғүмере лә ҡыҫҡа булып ҡуя.

Ҡыҙым башланғыс синыфта уҡығанда бер әхирәтенә ҡунаҡҡа барып ҡайтты ла, күҙҙәрен шар итеп һөйләй: "Әсәй, Катяның әсәһе лә, өләсәһе лә балконда тәмәке тарталар". Бөгөн Катя 19 йәшлек ҡыҙ, һәм сигаретлы фотоларын интернетҡа ҡуйыуына ҡарағанда, шундай уҡ стажлы тәмәкесе лә. Уларҙың ғаиләһендә был ғәҙәти хәл итеп ҡабул ителгән икән, кем тыя ала уны, кем уға тәмәкенең йүнле нәмә түгеллеген аңлата йәки өйрәтә?

Йәғни, тәмәке кеүек тыйылған емешкә бала ынтылып ҡарарға мөмкин. Хатта атай-әсәй тарафынан профилактика алып барылғанда ла. Ул быны тиҫтерҙәренән айырылмайым тип тә, ҡыҙыҡһынып та, тәмләп ҡарағыһы килеп тә башҡарыуы бар. Был осраҡта атай-әсәй (ғөмүмән, баланың үҙ аҡылы менән йәшәй башлауына тиклем) айырыуса иғтибарлы булып, бәләне зыянһыҙыраҡ итеп үткәреп ебәреү юлдарын ҡарарға тейеш. Һөйләшеп-аңлашып, тартырға ынтылыуының сәбәптәрен асыҡлап, бала менән күберәк аралашып, аңлатыу эштәре алып барып һәм башҡалар. Тик быны тартҡан атай-әсәй башҡара алмай. Үҙең тартып та, балаға уны тыйыу мөмкин булмаған эш. 10 йәшендә ул өндәшә алмаҫ та, 13 йәшендә "Һин дә тартаһың бит" тиәсәк. Һәм ул хаҡлы буласаҡ.

Баланы тәмәкенән сикләүҙең иң ышаныслы юлы - спорт. Спорт менән тартыуҙың бергә була алмаҫын төшөндөрөп тороусылар бер атай-әсәй генә булмаясаҡ унда. Тренер ҙа шуны тылҡыясаҡ, бергә шөғөлләнгән иптәштәре лә сәләмәт тормош алып барыусылар була. Шунлыҡтан, спорттың ниндәй төрөн һайлаһағыҙ ҙа отасаҡһығыҙ, балағыҙ сәләмәт тә, шөғөллө лә буласаҡ.

Әинде балаһы тәмәке тартҡан өсөн атай-әсәйҙәргә штраф һалыуға килгәндә, фекерҙәр икегә бүленеп китә. Берәүҙәр, был закон тәмәке тартыусы балалар һанын кәметмәйәсәк, ә бары атай-әсәй менән бала араһында конфликт ҡына яһаясаҡ тиһә, икенселәр "Һалһындар әйҙә, балаларын ҡарарҙар аҙыраҡ", тип өҙә һуға. Үрҙәгене тағы ҡабатлағанда, урамда тәмәке тартып тороусы 10-15 йәшлектәр тап ана шул атай-әсәйе тарафынан "онотолған" балалар бит инде. Ғаиләһенә көн дә ниндәйҙер ваҡыт бүлгән, кистәрен ваҡытында өйҙә булыуҙы талап иткән, аралашҡан дуҫ-иштәрен белгән, ул йәки ҡыҙының тормошонда ниндәйҙер роль уйнаған атай-әсәйҙең балаһы тәмәкегә ылыҡмаясаҡ та. Сөнки уға тәмәкенән күпкә ҡыҙыҡ, файҙалы, фәһемле башҡа нәмәләр барлығын аңлатыусы, күрһәтеүсе бар.

Ә шулай ҙа Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодекста был ҡағиҙә 2021 йылда ғәмәлгә инергә мөмкин. Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығы һәм Бөтә Рәсәй йәмғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Рәсәйҙә үсмерҙәрҙең 15 проценты тарта, ә ун йыл элек был күрһәткес 12 процентҡа тиң булған икән. Ә инде Наркология буйынса милли үҙәк һәм Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Наркотиктар һәм енәйәтселек буйынса идаралығы делегацияһы үткәргән тикшереү бөтөнләй башҡа һандарҙы күрһәтә: ан-кета аша биргән яуаптарҙа 15-16 йәшлек мәктәп уҡыусылары араһында малайҙарҙың - 37 һәм ҡыҙҙарҙың 22 проценты көн һайын тартыуын таныған! Күрәһең, был тәңгәлдә хатта аныҡ һандар ҙа билдәле түгел. Өлкәнәйә башлағас, бындай үсмерҙәрҙең һаны тағы ла арта төшә: шул уҡ сығанаҡтар раҫлауынса, Рәсәйҙең юғары уҡыу йорттарындағы студенттар араһында тәмәке тартҡан егеттәр - 75, ә ҡыҙҙар 55 процентҡа етә.

Һәм шул уҡ ваҡытта, был закон ҡабул ителгән хәлдә лә, уның үтәлеше ҡатмарлыҡтар тыуҙырмай ҡалмаясаҡ. Оло кешегә тыйылған урында (мәктәп йәки дауахана эргәһендә, балалар майҙансығында, транспорт туҡталышында һәм башҡа ерҙә) тәмәке тартҡаны өсөн полицейскийҙар протокол төҙөй һәм штраф һалырға мөмкин. Балалар уйын биләмәһендә тартып торған өсөн балиғ булғандар 2-3 мең һум, ә ҡалған урындарҙа 500 һумдан алып мең ярым һумғаса штраф түләй. Бына ошолай тип яҙыла ҡағыҙҙа, ә ысынбарлыҡта нисек булыр икән?

Көн дә һаҡлыҡ банкы эргәһенән эшкә үтәм, банк хеҙмәткәрҙәре гөрләшеп тороп биналары алдында тәмәке тарта. Эргәлә поликлиника - табиптар борхота. Исмаһам, эш урындарында берәй бүлмә булдырһындар ине тәмәкеселәр өсөн, юғиһә, аҡ халаттағы ҡатын-ҡыҙҙың бөршәйеп көйрәтеп тороуын ҡарап тороу аяныс. Ә бәлиғ булмаған үсмерҙе ошондай шөғөл менән булышҡанында туҡтатып, полиция уның исем-шәрифен һәм атай-әсәйенең шәхесен асыҡларға тейеш. Әгәр ҙә бала быны әйтергә теләмәһә, уны һис тә мәжбүр итергә ярамай. Бала хоҡуғы тигән нәмә бар, шуға күрә хоҡуҡ һаҡсыларының "бәләһенән баш-аяҡ" тип, тартҡан баланы күрмәмешкә һалышыуы ла бик ихтимал.

Ҡайһы бер фекерҙәр буйынса, балаларҙың тәмәке тартыуына ҡаршы көрәштәге иң йоғонтоло ысул - тәмәкегә хаҡты күтәреү. Йәнәһе, бала уны килеп һатып ала алмаҫлыҡ булһын. Әле иң арзан ҡап 80 һум тора, быны, әлбиттә, уҡыусы ла, студент та һатып ала ала. Тик был ғына проблеманы хәл итә алмаясаҡ, минеңсә. Күрәһегеҙ - һорау асыҡ ҡала...

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**



## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Һаулыҡ һаҡлау министрлығы Башҡортостан ҡалалары һәм райондары буйлап табиптарҙың күсмә бригадалары эшен ойошторҙо: 9-13 декабрҙә - Ишембайҙа; 16-20 декабрҙә - Күмертау ҡалаһының үҙәк ҡала дауаханаһында; 23-27 декабрҙә - Мәләүез үҙәк район дауаханаһында эшләй. Ҡалған райондарға табиптар 2020 йылда килә.

✓6 декабрҙә "Янғантау" шифаханаһында Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышын үҫтереү буйынса II Төбәк-ара форум уҙа. Сәнәғәт министрлығы белдереүенә ярашлы, бөгөнгә сараның көн тәртибе пленар ултырышты, республика Башлығы ҡарамағындағы Инвестиция советы ултырыштарын, ауыл хужалығын, урман сәнәғәте тармағын һәм туризмды үҫтереү мәсьәләләре буйынса өс тематик түңәрәк өҫтәлде үҙ эсенә ала. Шулай уҡ ҡул ҡуйыу күҙалланған килешеүҙәр исемлеге төҙөлгән.

✓Федераль дәүләт статистика хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса территориаль органы (Башстат) 2019 йылдың сентябрендә иҡтисад секторҙарында хаҡтарҙың үҙгәреүе буйынса мәғлүмәттәрҙе баҫтырып сығарҙы. Аналитиктар минималь аҙыҡ-түлек йыйылмаһының хаҡын иҫәпләне. Баҡтиһәң, Башҡортостанда йәшәүсегә айлыҡ аҙыҡ-түлек запасы өсөн 3651,53 һум кәрәк. Ҡулланыусылар кәрзиненә тауарҙарҙың 33 төрө инә.

✓Өфөлә 2019 йылдың ғинуарынан ноябренә тиклем ВИЧ менән зарарланыуҙың 634 осрағы теркәлгән. Өфөлә 100 мең кешегә 633,9 вирус йөрөтөүсе тура килә. Баш ҡала зарарланыусылар һаны буйынса Башҡортостанда дүртенсе урынды биләй. Күңелһеҙ рейтингта беренсе урында - Күмертау, икенселә - Салауат, өсөнсөлә - Стәрлетамаҡ.

✓Рус география йәмғиәтенең шундай уҡ исемле проекты сиктәрендә Өфө үҙәгендә тәүге географфити барлыҡҡа килде. Ленин исемендәге скверҙа - Ленин һәм Коммунистик урамдары мөйөшөндә административ бинаның стенаһына өкө төшөрөлгән. Һүрәттең авторы - билдәле рәссам-граффитист Олег Кайбышев.

✓Башҡортостандың туғыҙ ҡалаһында иллюминацияға, дөйөм алғанда, 115 миллион һум тотонола. "Башҡортостан Республикаһының хужалыҡ идаралығы" дәүләт ҡаҙна учреждениеһы Өфөлә, Стәрлетамаҡта, Октябрьскийҙа, Салауатта, Ишембайҙа, Нефтекамала, Күмертауҙа, Сибайҙа һәм Ағиҙелдә Яңы йыл иллюминацияһы ҡуйыу өсөн контракт төҙөнө.

**✓ "Яңы йыл ғаилә уйындары - реаль эш, уны яҡшы ойошторорға һәм үткәрергә кәрәк. Был һәйбәт тәҡдим: мул табындан һуң йыйылып, спорт менән шөғөлләнергә, ваҡытты файҙалы үткәрергә", - тине Радий Хәбиров.**



ҺОРАУ - ЯУАП



# ПЕНСИЯ ХӘЛЕ НИ ХӘЛ?

**? Өҫтәмә һаҡланырмы?**

"Ауыл эшсәне булараҡ, пенсияма өҫтәмә түләнә башланы. Яңғыҙ йәшәүе ауыр, шуға күрә, әгәр мин ҡалала йәшәүсе ҡыҙым янына күсеп китһәм, өҫтәмәм һаҡланырмы?" - тип һорайҙар. Ҡартлыҡ буйынса страховкалы пенсияға 25 процент йә булмаһа инвалидлыҡ буйынса өҫтәмә алыу өсөн, мәғлүм булыуынса, ауыл хужалығында 30 йыл эш стажына эйә булыу һәм ауылда йәшәү мотлаҡ. Әгәр һеҙ ауылдан ҡалаға күсһәгеҙ, өҫтәмә түләнмәйәсәк. Шул уҡ ваҡытта бер ауыл биләмәһенән Рәсәй Федерацияһының башҡа берәй ауыл еренә күскән хәлдә өҫтәмә түләү һаҡлана.

**? Индексация беҙгә ҡағыламы?**

"Ауыл" өҫтәмәһе алам, дәүләтебеҙгә рәхмәт. Тик бына 2020 йылда вәғәҙә ителеүсе өҫтәмәләр беҙгә, ауыл ерендә эшләгән стаж өсөн өҫтәмә алыусыларға ла, ҡағыламы?"- тип тә һорайҙар. Килһә йылдың ғинуарында эшләмәгән бөтә пенсионерҙарҙың да страховкалы пенсиялары индексацияланасаҡ. Пенсияғыҙ әлеге генә түгел, ә уға ҡушып түләнгән "ауыл" өҫтәмәһе лә 6,6 процентҡа арттырыласаҡ, сөнки тәғәйенләнгән түләү 5334-тән 5686 һумға еткерелә. Һеҙҙемтәлә ауыл пенсионерҙарына өҫтәмә күләм 1333-тән 1421 һумға тиклем, ә инвалидтарҙың, мәҫәлән, III төркөмдәгеләрҙең 667 һумдан 711 һумға артасаҡ.

**? 2020 йыл хаҡлы ялға кемдәр китә?**

2019 йылда дөйөм тәғәйенләнгән пенсия йәше әкренләп арта барып, ун йылдан, 2028 йылда тамамланасаҡ. Һеҙҙемтәлә ҡатындар өсөн ул - 60, ирҙәр өсөн 65 йәш тәшкил итәсәк. Шул уҡ ваҡытта элекке закон нигеҙҙәре буйынса 2019-2020 йылдарҙа пенсияға сығырға тейешле кешеләр өсөн махсус ташлама булдырылды - уларға пенсия яңы пенсия йәшенән ярты йылға алдараҡ тәғәйенләнә. Был 1964-1965 йылғы ҡатындарға һәм 1959-1960 йылғы ирҙәргә ҡағыла. Ошо ташламаға ярашлы, 2020 йылдың тәүге яртыһында ҡатындар - 55,5, ә ирҙәр 60,5 йәштә хаҡлы ялға китә. Пенсия тәғәйенләү өсөн килһә йыл уларға 11 йылдан да кәм булмаған страховкалы стаж һәм 18,6 пенсия коэффициентына эйә булыу кәрәк.

**? Ташламалар кемгә?**

Пенсия алды йәшендәгеләр фатирға, торлаҡ йортона һәм 6 сутый баҡса еренә мөлкәт һалымын түләмәй, ләкин был ташлама менән файҙаланыу өсөн пенсия алды йәшен нисек раҫларға? Быныҡ бер ҡыйынлығы ла юк: һалым органдарына ғариза яҙырға ғына кәрәк һәм унда эшләүсе белгестәр мөрәжәғәт итеүсенең пенсия алды йәше статусын Рәсәй Пенсия фондына мөрәжәғәт итеп, үҙҙәре асыҡлаясаҡ. Тимәк, был йәһәттән ташлама менән файҙаланыуға хоҡуҡ биреүсе ниндәйҙер документ алыу кәрәкмәй.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҒАИЛӘ МЕНӘН - СПОРТҠА

**Яңы йыл каникулдары ваҡытында 2 ғинуарҙан 6-һына тиклем Башҡортостанда "Яңы йыл ғаилә уйындары - 2020" ойоштороласаҡ. Был хаҡта "Берҙәм Рәсәй"ҙең төбәк сәйәси советы президиумы ултырышында төбәк башҡарма комитеты етәксеһе Рөстәм Әхмәҙинуров һөйләне.**

"Районларҙа һәм ҡалаларҙа бөтә спорт кластары ла ата-әсәләре менән бергә ошо уйындарҙа ҡатнаша. Бәләкәйерәк балаларға - күңелле старттар, ә өсөнсө кластан башлап мини-футбол, баскетбол, волейбол, хоккей буйынса ярыштар уҙғарыла. Еңеүселәр 18 ғинуарҙа Өфөлә республика финалында осраша", - тине Рөстәм Әхмәҙинуров. Башҡортостан Башлығы, партияның төбәк бүлексәһе секретары Радий Хәбиров әйтеүенсә, был - һәйбәт акция, уға күберәк ҡатнашыусыларҙы йәлеп итергә кәрәк, иң мөһиме, улар мәжбүри булмаһын. "Ярыштарҙың программаһына мотлаҡ саңғыла шыуыуҙы индерергә кәрәк, был спорт төрө менән уҡыусылар ҙа, өлкәндәр ҙә ихлас шөғөлләнә. Яңы йыл ғаилә уйындары - реаль эш, уны яҡшы ойошторорға һәм үткәрергә кәрәк. Был һәйбәт тәҡдим: мул табындан һуң йыйылып, спорт менән шөғөлләнергә, ваҡытты файҙалы үткәрергә", - тине Радий Хәбиров.

# ЭСМӘЙ ГЕНӘ...

**Башҡортостан Башлығы, "Берҙәм Рәсәй"ҙең төбәк бүлексәһе секретары Радий Хәбиров партия ағзаларына Яңы йыл байрамдарында алкоголь һатыуға бәйле хәлдә контролгә алырға ҡушты.**

Яңы йыл каникулдарында исерткес эсемлектәр һатыуҙы сикләгән республика законы проекты Дәүләт Йыйылышында ҡарауҙа. "Берҙәм Рәсәй"ҙең төбәк сәйәси советы президиумы ултырышында Башҡортостан парламенты рәйесе урынбаҫары Рөстәм Ишмөхәмәтов депутаттар законды ағымдағы йылдың аҙағына тиклем ҡабул итергә ниәтләүҙәрен әйтте. Сикләүҙәр кафеларға һәм рестарандарға ҡағылмай, ә бына сауҙа нөктәләрендә хәмер һатыу тыйыла, тип билдәләне ул. Радий Хәбиров фекеренсә, "Берҙәм Рәсәй" партияһы ағзалары үҙҙәренең ягынан алған алкоголь һатыу урындарын контролдә тоторға тейеш.

"Шулай уҡ был закондың нисек эшләүен анализлау, күрелгән сараларҙан ыңғай һөҙөмтә бармы-юкмы икәнен аңлау мөһим. Хәйер, һабантуйҙар ойошторолған көндәрҙә хәмер һатыуҙы тыйғандан һуң, күмәк халыҡ ҡатнашлығындағы байрамдар барышында енәйәтселек бөтөнләй тиерлек кәмене, йәғни бында беҙ дөрөҫ эшләнек. Күмәк мәҙәни һәм спорт саралары рәүешендә альтернатива ла тәҡдим итергә кәрәк", - тине Радий Хәбиров.

# ҺӘЛӘКӘТТӘР КӘМЕЙ

**Башҡортостанда ағымдағы аҙнала федераль трассаларҙа урынлашҡан фотовидеотеркәү камералары йәнә эшләй башлай, тип хәбәр иттеләр республика хөкүмәтендәге "Транспорт сәғәте"ндә.**

Республикала федераль юлдарҙа 1 июлгә 59 камера ҡуйылды. Дөйөм алғанда, йыл аҙағына тиклем фотовидеотеркәү комплекстары һанын 289-ҙан 540-ҡа тиклем арттырыу күҙаллана. 2020 йылда тағы 459 камера һатып алына. Республика автоинспекцияһы мәғлүмәттәре буйынса, быйыл 2018 йылға ҡарағанда 100 меңгә генә күберәк протокол төҙөлгән, 462 миллион һум штраф түләтелгән. Водителдәрҙең 94 проценты штрафты 50 процент дисконт менән түләү мөмкинлеген файҙалана. Бынан тыш, водителдәр камераларҙың ҡайҙа урынлашҡанын белә, был уларға күҙәтеү алып барылған участкаларҙа үҙҙәрен дөрөҫ тоторға ярҙам итә. Уның ҡарауы, аварияләр, ҡорбандар һәм йәрәхәтләнеүселәр һанын кәметеүҙә ыңғай динамика бар. Әйтәйек, 10 айҙа юл фажиғәләрендә һәләк булғандар 82 кешегә, йәки 18,2 процентҡа кәмегән (2018 йылдың ғинуар-октябрендәге 450 урынына 368), йәрәхәтләнеүселәр 265-кә йәки 6 процентҡа тиерлек аҙыраҡ (4577 урынына 4312). Юл-транспорт ваҡиғаларының дөйөм һаны 6,3 процентҡа кәмегән, йәғни 229 осраҡҡа аҙыраҡ (3638 урынына 3409).

... ФӘҘЕТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БӘЙГЕ БАШЛАНДЫ

**Декабрь айының беренсе көндәрендә "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы-2020" һәм "Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2020" конкурстарына старт бирелде.**

Быйыл конкурстарҙа Өфөнөң ете районынан йөмғеһе 59 педагог һөнәри оҫталығын һынарға һәм тәжрибә уртаҡлашырға теләк белдерҙе.

"Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы" конкурсында 23 педагог, уның сиктәрендә үткәрелгән "Педагогик дебют" номинацияһында хеҙмәт юлын башлап торған 16 йәш кеше, урыҫ теле һәм әҙәбиәте буйынса 5 педагог ҡатнаша. Ҡатнашырға теләүселәр һаны аҙ булыу сәбәпле, быйыл татар теле һәм әҙәбиәте предметы уҡытыусылары араһында конкурс иғлан ителмәгән. "Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурсында быйыл 15 ҡатнашыусы һөнәри оҫталығын һынай. Әйткәндәй, ярыштың тәүге этабы - эссе яҙыу үткән. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары уны "Минең һөнәри хаталарым" темаһына яҙған.

Педагогтарҙың һөнәри конкурсты уңышлы үтеүенә ышаныс белдереп һәм ҡатнашыусыларҙы тәбрикләп, Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы урынбаҫары Алина Сәләймәнова: "Бөгөн баш ҡалабыҙҙа 11796 педагогия хеҙмәткәре тырышып эшләй, Өфө мәғарифы өлкәһендә етди үҙгәрештәр бара, яңы эш йүнәлештәре асыҡлана, перспективалы яңы проекттар тормошҡа ашырыла. Ошо тәжрибәне конкурстың ябылыу тантанаһына тиклем барыбыҙ ҙа мотлаҡ күрербеҙ, тип ышанам. Баһалама комиссияһы ағзаларына теләк рәүешендә артыҡ ныҡ талапсан булмағыҙ, тип мөрәжәғәт иткем килә. Беҙҙең уҡытыусыларҙың төп баһалаусылары - уҡыусылар, уларҙың өлгәш кимәле һәм педагогтарыбыҙға ҡарата иҫ киткес йылы мөнәсәбәте", - тип мөрәжәғәт итте.

Баш ҡала педагогтарының һөнәри конкурстарына йомғаҡ килһе йыл башында яһаласаҡ. Әлегә ҡатнашыусылар 17 декабргә тиклем "Дәрес", "Дәрестән тыш сара", "Оҫталыҡ дәресе", "Мәғариф проекты", "Түңәрәк өҫтәл" этаптарын үтергә әҙерләнә. Артабан баш ҡалабыҙ намыҫын республика һәм Рәсәй кимәлендә яҡларлыҡ үҙ һөнәренең оҫтаһы булған уҡытыусылар йылдағыса ярыш һөҙөмтәһендә асыҡланыр, тип көтәбеҙ.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓9 декабрҙән Өфө менән Ҡаҙан араһында тура тимер юл бәйләнеше тергеҙелә. Өфөнән пассажирҙар таҡ көндәрҙә Ульяновскиға тиклем 347Й "Өфө - Санкт-Петербург" поезының "Өфө - Ҡаҙан" вагондарына ултырып китә ала. Артабан маршрут 125Й "Һамар - Ҡаҙан" поезы составында дауам итә. Өфөнән көндөҙгө сәғәт 12 тула 3 минутта ҡуҙғала, Ҡаҙанға таңғы 7-се 20 минутҡа барып етә. Юлға 20 сәғәт 23 минут ваҡыт китә.

✓Өфө почтамтында Ҡыш бабайға хаттар өсөн яңы йыл почтаһы эшләй башланы. Яңы йыл байрамдары тамамланғансы махсус бизәлгән почта йәшнигенә теләк яҙылған хат төшөрөргә мөмкин. Хат тылсымлы адресатҡа барып етһен өсөн конверт тышына "162340, Рәсәй, Вологда өлкәһе, Бөйөк Устюг ҡалаһы, Ҡыш бабай почтаһы" тип яҙырға һәм марка йәбештерергә кәрәк.

✓Санкт-Петербургта Михайлов театры сәхнәһендә "Онегин" милли опера премияһы лауреаттарын бүләкләү тантанаһы уҙҙы. "Сәхнә оҫтаһы" номинацияһында еңеүселәрҙең береһе - Мефистофель ("Фауст", Ш. Гуно) һәм Лепорелло ("Дон Жуан", В.А. Моцарт) партиялары өсөн Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры солисы, художество етәксеһе, Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы Аскар Абраҙаҡов.

✓Рәсәй хөкүмәте 2020 йылда автомобилдәргә утилләштереү йыйымын арттырыуҙы хупланы. Килһе йылдың ғинуарынан моделдәргә яңыртыу һәм башҡа объектив сәбәптәр арҡаһында автомобилдәр ҡиммәтләнә, әммә утилләштереү йыйымының артыуы хаҡтарға өҫтәмә йоғонто яһай. Айырыуса енел автомобилдәр ҡыйбатлана - уртаса 110,7 процентҡа. Бер литрға тиклем двигателле машиналар - 46,1 процентҡа, 3,5 литрҙан ашыу двигателле машиналар -145 процентҡа. Файҙаланған автомобилдәргә (1-2 литрлы двигатель) утилләштереү йыйымы 112,4 процентҡа тиерлек арта.

✓Башҡортостанда беренсе тапҡыр башҡорт музыка мәҙәниәтен артабан үҫтереү маҡсаты менән "Йырау" төбәк-ара конкурсы үткәрелә. Проектты БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге һәм Башҡортостан Республикаһы Сәсәндәр үҙәге ойоштора. Халыҡ йырҙарын башҡарыусылар, этник музыка яҙыусылар үҙ талантларын 13 декабрь халыҡ ижады үҙәгенең Мәҙәниәт йортонда күрһәтә аласаҡ.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*КӨНАУАЗ*

**Йәйгеһен еләк-емеш бешеү менән район-ҡалаларҙа ғына түгел, хатта ауылдарҙа, трассалар үткән юл буйҙарында махсус эшләнгән урындарҙа еләк һатыусылар сауҙа башлай. Шулай итеп улар әҙ булһа ла ғаилә бюджетын тулыландырыуға өлөш индерә. Еләктәрҙән һуң йәшелсә-емеш, бәшмәк миҙгеле килә һәм яйлап ҡына ул көҙгө-ҡышҡы ҙур йәрминкәләргә барып тоташа. Унда инде ҙурыраҡ күләмле сауҙа башлана - ауыл халҡы үҫтергән йәшелсә-емешен, ит-балын һатып ҡалырға, ә ҡала кешеһе ҡышҡылыҡҡа запас тупларға тырыша. Ошо ике аралағы алыш-биреште юлға һалыу, урындағы етештереүселәргә ярҙам булдырыу һәм халыҡты сифатлы продукция менән тәьмин итеү маҡсатында республикала шәхси һәм крәстиән-фермер хужалыҡтарында етештерелгән продукцияны һатыу каналдарын киңәйтеүгә арыу ғына иғтибар бирелә. Быйыл да Башҡортостан район-ҡалаларында уларға барлығы 262 майҙансыҡта 18 меңдән ашыу урын бүленгән. Теләге булған шәхси хужалыҡ йәки кооперативтар, сауҙа өсөн талап ителгән документтары булғанда, йәрминкә үткән һәр ерҙә ҡатнаша ала.**

# ШАУЛАЙ-ГӨРЛӘЙ ЙӘРМИНКӘЛӘР



Әммә был йәрминкәләргә мотлаҡ урындағы етештереүселәр йәки фермерҙар, шәхси хужалыҡтар ғына килергә, ә аралашсылар, йәғни халыҡтан артҡан продукцияны йыйып, йәрминкәгә килтереп һатыусылар булмаҫҡа тейеш, тигәнде аңлатмай. Шәхси хужалығында барыһын да етештергән, әммә үҙенең сауҙа итергә ваҡыты ла, мөмкинлеге лә булмағандар өсөн бер нисә хужалыкты берләштергән кооперациялар отошло булһа, алыпһатарҙар (перекупщиктар) ҙа үҙҙәренсә мөһим бер роль уйнай. Уларһыҙ бәләкәй һәм урта ауыл хужалығы производствоһында үсеш булмаясаҡ. Әлбиттә, бал һәм умартасылыҡ продукциялары, һөнәрмәндәр әйберҙәре, ҡул эштәре кеүек продукцияны үҙең һатыу файҙалыраҡ һәм ятышлыраҡ, сөнки уларҙың сифаты юғары булғанда һатып алыусы үҙе үк эҙләп киләсәк һәм шулай үҙеңдең генә клиенттар базаһы тупланасаҡ. Бындай категория хатта баҙар хаҡтарының тирбәлеүенә лә булышлыҡ итә, сөнки уҙ тауарын һатҡас, һатыулашыусылар булғанда, хаҡты кәметә йә арттыра ала.

Әммә шәхсән үҙе йәрминкәләрҙә йөрөй алмаған тауарын алыпһатарҙар аша һатырға тырыша. Был хаҡта социаль селтәрҙәрҙә бына ниндәй фекерҙәр яҙалар: "Беҙҙең ауылда картуф та үҫтерәләр, күпләп ҡырын да, кәбеҫтәһен дә, әммә ҡайҙа тапшырырға белмәй аптырайалар. 30-лап тоҡ картуфын һата алмай кеше. Химия ҡушып үҫтерелгән картуф осһоҙҙор инде. Халыҡҡа ана шулай үҫтерелгән картуф, помидор, башҡа йәшелсәләрҙең зыянлы икәнен аңлатыу эше алып барырға кәрәктер, тип уйлайым". Тағы бер яҙма: "Ауылыбыҙҙа мал да үрсетәбеҙ, тик ул үҙен аҡламай. Ауылда тыныш, ерле халыҡ йәшәй, әммә малды ҡайҙалыр алып барып тапшырам тиһәң, юлы алыҫ, өсләтә арттырып түләргә тура килә. Шуға ситтән килгән алыпһатарҙар үлсәп тә тормай, ҡарап ҡына баһалап, 30 меңгә алам, тиһә, бирәбеҙ ҙә ебәрәбеҙ. Бигерәк тә уҡыу йылы алдынан шулайыраҡ хәлдәр була. Малды һуйып, баҙарға алып барып һатыр өсөн машина ялларға кәрәк. Йәй көнө алып барып еткергәнсе ите ҡыҙара, сифаты насарлана..." Шулай тип тә яҙалар: "Татарстандан алыпһатарҙар килеп, икешәр-өсәр башлап эре мал һатып ала. Кешеләр малдарын һатып, йөҙәр меңгәсә аҡса эшләп ҡала. Насар түгел дә инде. Шул уҡ ваҡытта берәү ике йыл буйы аҫыраған үгеҙен баҙарға алып барып һатып, байтаҡ аҡса эшләп сығыуына, уны жуликтар һағалап тороп, барлыҡ аҡсаһын һалдырып алып киткән. Уйлап ҡарағыҙ инде, өйҙән генә һатып ебәреү отошлоМо, әллә ғүмеренде хәүеф аҫтына ҡуйып, баҙар юлын тапаумы? Күптәрҙә сауҙагәрлек һәләте юҡ бит инде ул".

Әммә аралашсылар тураһында ла төрлө хәбәрҙәр йөрөй. Мәҫәлән, бынан бер нисә йыл элек алыпһатарҙарҙың Өфөгә ит һатырға килеүселәргә йәрминкәләрҙә, баҙарҙарҙа көтөп тороп, хужалары тауарын осһоҙ хаҡҡа бирергә ризалашмай, үҙҙәре һатырға бирмәгәс, уларға был эш менән булырға ҡамасаулап, баҙарҙан ҡыҫырыҡлап сығарыуҙары тураһында ла хәбәрҙәр йөрөнө. Бындай күренештәр әле лә һирәкләп булғылай тиҙәр. Был хәлдә, әлбиттә, хоҡуҡ һаҡлаусыларҙың, сауҙа предприятиелары етәкселәренең үҙ контролендә алыуы бик кәрәк.

Республика Хөкүмәте халыҡ етештергән тауарын осһоҙ хаҡҡа теләнә ҡайҙан килгән алыпһатарҙарға тотторо ебәрмәһен, алданып ҡалмаһын, етештергән тауарын һатып, үҙенә файҙа алһын өсөн ауыл хужалығы тауарҙарын ҡулланыусылар кооперативтары ойоштороуға йүнәлеш алды. Улар ауыл иҡтисадын йәнләндерергә, ауыл кооперацияһын үҫтерергә һәм яйлап сауҙа көштәләрендәге сит ил тауарҙарын урындағы етештереүсе булдырған продукция менән алыштырырға тейеш. Әлегә баймаҡтар кооперативтар һаны буйынса ла, дәүләт ярҙамы алыу буйынса ла лидерҙар рәтендә. Унда, мәҫәлән, 15 ҡулланыусылар кооперативы теркәлгән. Былтыр уларҙың дүртеһе дәүләт ярҙамын алһа, быйыл тәҡдим иткән проекттары буйынса алтыһы һайлау үткән. Күптән түгел генә Әхмәр ауылындағы "Ялантау" кооперативының мал һуйыу пункты асылған. Ул эргә-тирәләге ауылдарҙың ғына түгел, күрше Сибай ҡалаһы, Әбйәлил районы халҡына, йылҡы, эре һәм ваҡ малды һуйыу, итен һаҡлау һәм эшкәртеү, махсус тышлыҡтарға тултырыу кеүек хеҙмәттәр күрһәтәсәк. Тимәк, халыҡ сеймалын әллә ҡайҙа йәрминкәбаҙарҙарға алып барып йөрөмәйенсә, шунда ғына тапшыра аласаҡ.

(Дауамы 15-се биттә).

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ӘКИӘТ КЕНӘ ТИМӘГЕҘ...



**Декабрь етһә, күңел ниндәйҙер мөғжизә көтә, танауға мандарин еҫтәре килеп бәрелә. Инде хәҙер Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуҙың юҡлығына күптән инанылһа ла, барыбер ҙә балаларҙың ихлас ышанып хаттар яҙыуын, шыршы төбөндә ятҡан бүләктәрҙе алып ҡыуаныуын, атай-әсәйҙәренең күстәнәстәрен ҡосаҡлап йөрөүҙәрен күреп, ҡабат ошо хәстәрһеҙ бала саҡҡа ҡайтҡандай булаһың. Ә инде матур итеп биҙәлгән шыршы, төрлө төҫтәрҙә яныусы гирляндалар бөтөнләй әкиәт донъяһына алып инеп китә. Ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә лә баш ҡала халҡына нисек итеп әкиәт бүләк итеү тураһында һүҙ булды. Ошо йүнәлештә алып барылған эшмәкәрлек менән районлар хакимиәттәре башлыҡтары таныштырҙы.**

Орджоникидзе районында төп байрам урыны Серго Орджоникидзе исемендәге майҙан буласаҡ. Әле унда шыршы урынлаштырыла, майҙанды биҙәү һәм боҙ ҡаласыҡтары эскизы эшләнгән. Бынан тыш, Иҫке Турбаслы, Яңы Черкассы, Тимашево ҡасабаларында боҙ ҡаласыҡтары эшләнәсәк, район ихаталарында торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре 11 шыршы ҡуясаҡ. Районда барлығы 10 хоккей ҡумтаһы эшләйәсәк, уларҙың алтыһында боҙ туңдырылған һәм күнекмәләр башланған. Шулай уҡ "Төҙөүсе" стадионында һырғалаҡ асылған. Район хакимиәте башлығы Марат Ғәлиуллин билдәләп китеүенсә, ул Черниковкалағы ғына түгел, тотош ҡалалағы иң ҙур һырғалаҡ икән.

Дим районында ике үҙәк майҙанға шыршы ултыртыла, боҙ ҡаласыҡтары урынлаштырыла, предприятие-учреждениелар фасадтары байрамса биҙәлә. Калинин районында биш: "Моторостроитель" мәҙәниәт һарайы майҙанында, Шаҡшала ике урында, Инорста һәм Базилевкала боҙ ҡаласығы һәм байрам майҙансығы эшләнәсәк. Киров районында һырғалаҡтар, боҙ ҡаласыҡтары, хоккей ҡумталары, Ленин исемендәге сквер һәм паркты ижади биҙәүҙә лә индереп барлығы 46 байрам майҙансығы эшләүҙә ҡуҙалләйҙар. Ленин районында иһә Затон һәм Нижегородка биҫтәләрендә ике боҙ ҡаласығы эшләү планлаштырыла. Әлеге ваҡытта унда шыршы урынлаштырыла. Шулай уҡ 8 Март ҡасабаһында ла байрам майҙансығы буласаҡ. Октябрь районында "Кашҡаҙан" паркы территорияһында, Спорт һарайы майҙанында һәм Нуғай ҡасабаһында төҙөләш эштәре бара. Совет районы боҙ һарайын, ғәҙәттәгесә, Өфө балалар филармонияһы ҡаршыһында "һалаҫак".Баш ҡаланың төп шыршыһы Ленин майҙанында һәм "Торатау" конгресс-холы эргәһендәге Салауат Юлаев майҙанында һәм Совет майҙанында тораҫаҡ.

Быйыл баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары эштәре Париж, Истанбул, Мәскәү һәм башҡа ҡалаларҙы биҙәгән бөтә донъяға билдәле итальян яҡтылыҡ архитекторы һәм рәссам Валерио Фестизиң яңы йыл иллюминация инсталляциялары менән таныша аласаҡ. Республика Башлығы Радий Хәбиров белдереүенсә, Өфөгә һәм Стәрлетамаҡҡа иллюминацияны республиканың иң ҙур предприятиеларының береһе бүләк иткән. Италия белгестәре төркөмө "Уфагорсвет" муниципаль предприятиеһы менән берлектә эшләй. Итальян архитекторы эскиздары буйынса эшләнгән инсталляциялар Орджоникидзе исемендәге мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙанды, Ленин урамын, Ленин паркына инеү урынын биҙәйәсәк.

Әйткәндәй, Башҡортостандың 9 ҡалаһында иллюминациялар ҡуйыу өсөн быйыл дөйөм алғанда 115 миллион һум тотоноласаҡ.

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йәйәү йөрөгөҙ

❖ 1 сәғәт йөрөү һөт биҙе яман шешенән ҡотолорға ярҙам итә. Әлбиттә, шеш булмаҫтан алда йөрөү.

❖ Тиҙ-тиҙ атлап йөрөп, йөрәккә бәйле тайпылыштарҙан да һаҡланырға мөмкин.

❖ II төр (стадия) шәкәр ауырыуын булдырмаҫ өсөн көнөнә 2 мең аҙым атлау ҙа етә.

❖ 75 һәм унан да оло йәштәге кешеләр даими йәйәү йөрөһәләр, ғүмерҙәре оҙоная.

### Быуындар һыҙлай башлаһа

❖ 100-әр грамм петрушка тамыры, һарымһаҡ, 4 лимонды ҡабығы менән ит тартҡыстан үткәреп, ағас ҡалаҡ менән тотош бергә болғатырға, 2 литрлыҡ быяла һауытҡа һалырға, һауыт тулғансы ҡайнаған һыу өҫтәргә. Өҫтөн ябып, һыуытҡыста 8 көн тоторға. Көн дә иртә-кис ағас ҡалаҡ менән болғарға. 8 көндән һуң һөҙөргә, быяла һауыттарҙа һыуытҡыста һаҡларға. Ашауҙан 10 минут ҡала көнөнә 3 мәртәбә 1-шәр ҡалаҡ эсергә. Был дауа яҙ һәм көҙ файҙалыраҡ.

### Гөлйемеште лә онотмағыҙ

❖ Ҡан әйләнешен яйлау өсөн 20 грамм ваҡланған емешен термосҡа һалып, 1 стакан яңы ҡайнап сыҡҡан һыу өҫтәргә һәм көнөнә 3 мәртәбә ярты шар стакан эсергә.

❖ Аҙ ҡанлылыҡ булғанда, операцианан алда, унан һуң гөлйемеш ашағыҙ, көнөнә 2-3 мәртәбә 1/4, 1/2 стакан төнәтмәһен эсегеҙ.

❖ Кикергәндә, күңел болғанғанда, ҡоҫҡанда май айы гөлйемеше сәскәләренең таж япраҡтарын сәйнәү файҙалы. Ашҡаҙан ауыртҡанда уны сәй урынына бешереп, көнөнә 3-4 тапҡыр 1/2 стакан эсергә лә була.

### Нығ булам тиһәң

❖ Көнөнә 3 мәртәбә һөт ризығы аша, эс. Һөттә кальций күп, бөтә тәндә нығыта. Бигерәк тә балаларға һәм йөклө ҡатындарға кәрәк.

**Әнүзә ХӘБИБУЛЛИНА.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

**Беренсе булып ҡусҡарлы орнаментлы тамбурлы ҡайыуҙарға С.И. Руденко иғтибар итә. "Башҡорттар" монографияһының икенсе баҫмаһында "Сәнғәт һәм фольклор" бүлегендә ҡайылған һәм аппликация менән биҙәлгән туҡымаларға хас ҡусҡарҙан торған декор үрнәктәре бирелгән; орнаменттың ҡайһы бер элементтары күн, тимер һәм ағас әйбер һүрәттәрендә күрһәтелә.**

Бер нисә йылдан, 50-се йылдар аҙағы - 60-сы йылдар башында, башҡорттарҙың нағышын тикшергәндә Н.В. Бикбулатов ҡусҡарлы орнаменттарҙы ентекле өйрәнә. Маршрутына Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш райондары ингән 1958 йылғы этнографик экспедиция материалдары, шулай уҡ Рәсәй этнография музейы һәм башҡа музейҙар коллекцияһы тикшереүсегә ҡайылған ҡусҡарҙарҙың һынланыш теҙмәһен тулыһынса күҙ алдына килтерергә ярҙам итә; унда С.И. Руденко китабындағы график һүрәттәр ҙә ингән. Рәссам Г.М. Мөхәмәтшин ярҙамында үҙ эсенә ҡырҡҡа яҡын төр биҙәк үрнәген алған таблица төҙөлә. Ул "Башҡорттарҙың биҙәү-ғәмәли сәнғәте" (1964) китабында баҫыла. Артабанғы экспедициялар (1962, 1971, 1976, 1981, 1982, 1983) Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Этнография һәм антропология бүлеге фототекаһын яңы материалдар менән тулыландыра, көньяҡ-көнсығыш декоры тураһындағы төшөнсәне байыта. Хәҙер тупланған материалды дөйөмләштереп, уны бер төрлә системаға һалыу мөмкинлеге бар.

Үрҙә телгә алынғанса, ҡусҡар орнаменты нигеҙендә ябай ғына элемент - кәкерсәк (ҡускар) ята. Башҡорт нағышында ул артыҡ тәрән түгел, түңәрәктең яртыһын, йәки 3/4 өлөшөн тәшкил итә, ҡыя ултыртмала тора. Һүрәтте өтөр, дөрөсөрәге, һөңгө башы рәүешендәге йөрәккә оҡшаш фигура менән сағыштырырға була: тығыҙ урынлаштырылған ике кәкерсәк быны асыҡ күрһәтә.

Биҙәктәрҙең билдәле һыҙаттарын тотоп алырға һәм орнаменттар сериһын айырырға була. Орнаменттар теҙмәһе нигеҙендә ике, өс, дүрт ҡусҡарҙан торған комбинация ята. Төп фигура "горизонт һыҙығында" урынлаштырыла, һирәк осраҡта үҙәк вертикаль буйлап төшә; ул төҫ ярҙамында айырымлана. Унан биҙәк өҫкә йәки ситкә ҡарай, һирәк осраҡта аҫҡа табан оҙонайтыла. Катмарлы композиция эшләгән саҡта сигеүсе телә-гән бер урында туҡтай алған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

АФАРИН!

# ҺУПАЙЛЫНЫҢ БАШҠОРТ ЛИЦЕЙЫ



**Ошо аҙнала Өфө ҡалаһының Мөхәмәтғәли Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейы үҙенең 25 йыллыҡ юбилей кисәһен уҙғарҙы. Күркәм байрамда лицейҙың ветеран-педагогтары, уҡытыусылары, уның элекке һәм хәҙерге уҡыусылары, республика, баш ҡала мәғарифы етәкселегә вәкилдәре, ата-әсәләр һәм башҡа ҡунаҡтар ҡатнашты.**

Лицейҙың педагогик коллективына, уның директоры Шәмсулла Хәбибрахмановҡа, маһир уҡытыусыларына башҡорт милли мәғарифын үҫтереүҙәге емешле хеҙмәте өсөн БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайының, Мәғариф министрлығының, Өфө ҡалаһы һәм Октябрь районы хакимиәтенең, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының күп һанлы наградалары тапшырылды. Байрам кәйефенә ошо лицейҙы тамамлап сыҡҡан талантлы уҡыусыларҙың, әле уҡып йөрөүсе балаларҙың йыр-бейеүҙәре айырыуса хуш килде. Башҡортостандың Беренсе Президенты, "Урал" хәйриә фонды рәйесе Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың ҡотлау хаты уҡып ишеттерелгәс, зал көслө алҡыштарға күмелде.

Сирек быуат арауығында лицейҙы барлығы 1956 уҡыусы тамамлаған, әле бында 700-ҙән ашыу уҡыусы белем ала. Башҡорт лицейында уҡып сыҡҡан йәштәребеҙҙең 60-ҡа яҡын балаһы ата-әсәләренең туған мәктәбенә уҡырға килде - быны беҙ быуындар эстафетаһы башланғысы, тип атай алабыҙ. Әйткәндәй, тантана барышында лицейҙа уҡыған осорҙа танышып табышҡан парҙарҙың балалары менән бергә сәхнәгә сығыуы иҫ киткес матур күренештәрҙең береһе булғандыр.

Эйе, 1994 йылда Өфө ҡалаһында йәшәүсе башҡорттар өсөн милли мәктәп асылыуы яңыртылған Башҡортостан Республикаһының иң ҡатмарлы башланғыс осоронон гүзәл бер емеше булып тарихҡа инде. Милли мәктәптең төп бурысы - сифатлы белем биреү менән бер рәттән, башҡорт балаларын милли рухта тәрбиәләү, туған телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе һәм тарихыбыҙҙы төплө итеп өйрәтеү булды. Әйтергә кәрәк, лицейҙың педагогик коллективы үҙ иңенә йөкмәтелгән бурысты намыҫ менән үтәне. Бөгөн М.Исҡужин исемендәге 136-сы һанлы башҡорт лицейы республикала киң танылыу тапҡан инновацион уҡыу йорттарының береһе булып тора. Ул - Рәсәй, Башҡортостан кимәлендәге төрлө конкурстар лауреаты, уға тапшырылған бүләк-наградалар ҙа уғата күп, лицей уҡытыусыларының байтағы мәғариф системаһының маҡтаулы исемдәренә, башҡа төрлө наградаларына лайыҡ булды. Иң мөһиме, уны тамамлап сыҡҡан уҡыусыларҙың барыһы ла оло тормош юлында үҙҙәре һайлаған һөнәрҙәргә эйә булды, һәм улар әле лә туған мәктәптәренә, үҙҙәренә белем-тәрбиә биргән уҡытыусыларына рәхмәтле булып ҡала. Иманыбыҙ камил, ошо мәктәп киләсәктә лә Сипайлово биҫтәһендә йәшәүсе башҡорттар өсөн күҙ терәп торған абруйлы белем усағы булып ҡаласаҡ.

**Вәлиәхмәт БӘЗРЕТДИНОВ,**
**1994-1999 йылдарҙа лицей директоры урынбаҫары.**

ШАНДАУ



**"Үтескә алыу", "бурысҡа биреп тороу" - халҡыбыҙҙа борондан килгән, динебеҙ тарафынан да рөхсәт ителгән ғәмәлдәр. Туған йә таныштарҙың, күршеләрҙең үҙ-ара матур мөнәсәбәтенә лә булышлыҡ итеүсе, көнкүрешебеҙҙән айырып алып булмай торған ошо яҡшы төшөнсәләрҙе хәҙерге ваҡытта бөтә донъяны, илебеҙҙе баҫып алған "ипотека", "кредит" һымаҡыраҡ нәмәләр менән бутай күптәр. Шуға ҡағылышлы төрлө мәҡәләләрҙең гәзитебеҙ битендә йыш сығып тороуы - тигенгә түгел, сөнки был ифрат та киҫкен проблемаларҙың береһе.**



# АЯҒЫҢДЫ...

## юрғаныңа ҡарап һуҙ

Гәзитебеҙҙең 46-сы һанында баҫылған "Алырҙан алда биререндә уйла" исемле мәҡәләнә иғтибар менән уҡып сыҡтым. Ысынлап та, Бәҙри Әхмәтовтың "уйлыға-уй" бирерҙәй сығышында был мәсьәлә сираттағы мәртәбә күтәрелеп, һәр яҡлап тәнҡит утына тотола. Сөнки кредит һаҙлығына батып, Рәсәйҙә әллә күпме кешенең үҙ-үҙенә ҡул һалыуы хаҡында ла ишетеп-уҡып торабыҙ. Кредит, барыбыҙ ҙа аңлауынса, бурысҡа аҡса алып, күпмелер ваҡыттан уға ниндәйҙер процент өҫтәп кире ҡайтарыу. Изге Ҡөрьән теле менән әйткәндә, бындай нәмә "риба", тип атала (урыҫ телендә "ростовщичество" тип тә яңғырай ул). Шәриғәт ҡануынына ярашлы, процентҡа аҡса биргән генә түгел, ә алған кеше лә Аллаһ Тәғәлә алдында берҙәй гонаһлы.

Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм хәҙисенә ярашлы, рибаҫылыҡ гонаһы хатта зина ҡылыуға ҡарағанда 36 мәртәбәгә ауырыраҡ. Дин юлында булған, динебеҙ ҡанундарын өйрәнеп йөрөгән мосолмандар был хаҡта яҡшы белә, автомобиль һымаҡ ниндәйҙер бер ҙур нәмә һатып алған хәлдә лә улар үҙ "кеҫәһенә" ҡарап, арзаныраҡтан алырға тырыша. "Күлдең тәрәнлегенә ҡарап сум" тигән боронғолар. "Аяғыңды юрғаныңдың оҙонлоғона ҡарап һуҙ", тип тә әйтәләр. Кредитҡа ай һайын процентлап өҫтәп бирер урынға, бер аҙ сабырлыҡ ҡылып, аҡсаһын өйҙә йыйып, шунан ғына әйбер алған кеше отошта була. Бик тә бик ашығыс кәрәк була икән, бәгзеләр туғанынан бурысҡа ла алып тора. Әлбиттә, һәр кемдең "бай" туғаны булмауы ла мөмкин. Ике-өс, хатта дүртбиш йыллап та аҡса йыйып, Мәккә ҡалаһына хаж ҡыла мосолмандар. Ҡасандыр булған, тукһанынсы йылдар башындағы көн һайын шәпләп үҫеп барған, артынан ҡыуып етеп булмаған инфляция тигән нәмә хәҙер, әлхәмдулиллаһ, әллә ни беленмәй. Минеңсә, өйҙә "ойоҡ эсенә йыйған" аҡса күпкә отошлораҡ та.

Бер танышым бынан дүрт-биш йыл тирәһе элек Өфө ҡалаһында төҙөлөп бөтмәгән бер бүлмәлә фатир алып, ипотека бурысына баткайны. Тырышып эшләп, ахырҙа, күптән түгел ана шул һаҙлыҡтан сыҡты-сығыуға. Әммә... Бына шул ипотекаға түләгән аҡсаһын өйҙә йыйып барған хәлдә, шул уҡ суммаға бер түгел, ә ике-өс бүлмәле фатир алырға булыр ине. Бер ниндәй ҙә бурысҡа батмай ғына! Ул ғына ла түгел, көсәнеп бурыс ҡайтарыу дәүерендә ғаиләһендәге үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙә лә һәр төрлө аңлашылмаусанлыҡтар килеп сыға торҙо. Унан танышым: "Ошо һаҙлыҡтан имен-һау сығып алһам, башҡаса "кредит" тип ауыҙ ҙа асмаясаҡмын", - тине. Ошо фәһемле "дәрес" уға файҙаға булыр, тип ышанам.

Ҡөрьән-Кәрим рибасылыҡ хаҡында кешеләрҙе ныҡ иҫкәртә. Кем дә кем рибанан баш тартмай, Аллаһтың ул кешегә "һуғыш иғлан итеүе" тураһында Әл-Бәҡәрә сүрәһенең 278-279-ы аятында әйтелә. Шулай уҡ ошо аятта, кем дә кем тәүбәгә килә, уның төп малы һаҡланып ҡалыуы хаҡында ла әйтелә. Ипотека бурысын ваҡытында түләй алмайынса, кешеләрҙең һәр төрлө уңышһыҙлыҡтарға осрауын Рабббыбыҙҙың рибаны ҡәтғи тыйыуын үтәмәгәндәр өсөн булған язаһылыр, тип аңлап була. Бына ошо хаҡта белгән, дин ҡанундарын үтәп йәшәгән кешеләрҙең, әлбиттә, күңелдәре лә тыныс. Ундайҙар, бәлки, "текә" автомобилдәрҙә лә елдермәй, ябайыраҡтары менән ҡәнәғәт, әммә улар бурыс һаҙлығына төшмәй, төндәрен тыныс йоҡлай. Коллекторҙар ҙа уларҙың ишеген шаҡып бимазаламай...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

✔ **II Көнсығыш Төрки ҡағанаты (681-744 йй.) заманында төрки ҡәбиләләре араһында ҡыпсаҡтар ҙа булып, дөйөм төрки союзына ингән. Был VII быуатта уҡ ҡыпсаҡтарҙың "turk budun" берләшмә составында булыуына дәлил.**



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

**Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары төркөмөнә ҡараған ҡыпсаҡ ырыуының тарихы бик боронғо замандарға барып тоташа, ә яҙма сығанаҡтарҙа ошо этноним беҙҙең эраның VIII быуатынан да иртәрәк осрамай. Шул уҡ ваҡытта ҡыпсаҡ исеме аҫтында тарихҡа ингән этник берләшмә байтаҡ ҡына төрки халыҡтары этногенезында бик мөһим урын биләй: ошо ырыу кешеләренең хәҙерге вариҫтары башҡорт, ҡаҙаҡ, нуғай, ҡырғыҙ, ҡарағалпаҡ, үзбәк, алтай, ҡырым татарҙары составында ҙур урын биләй. Заманында Евразияла Иртыш йылғаһынан Дунайға тиклем йәйрәп ятҡан икһеҙ-сикһеҙ далалар иле Дәште-Ҡыпсаҡ (русса Дикое Поле йә иһә Поле Половецкое) исеме аҫтында билдәле була.**

# ДАЛА УЛДАРЫ - ҠЫПСАҠТАР БЕҘ!



Урта быуат ҡыпсаҡтарының ата-бабалары кем булған? Ошо ҡатмарлы һорауға объектив яуап табыу хәҙерге тарих белгестәре өсөн дә еңел түгел, ғилми әҙәбиәттә был мәсьәлә буйынса төрлө гипотезалар осрай.

Совет тарихсыһы А.Н. Бернштам ҡыпсаҡ атамаһының боронғо ҡытай телендә цзюеше (кюеше) рәүешендә булыуын ҡытай авторы Сым Цяндың (б.э. тиклем II-I бб.) "Шицзи" ("Тарихи яҙмалар") әҫәрենә таянып фаразлай. Ошо тарихсы беҙҙең эраға тиклем 209-174 йылдарҙа Хунну державаһы хакимы булған шаньюй Модэның ҡырғыҙҙар, динлиндар, синьлилар менән бер рәттән цзюеше ҡәбиләһен дә буйһондороуы хаҡында яҙа. Әммә абруйлы тарих белгестәренән һаналған С.Г. Кляшторный был фараздың фонетик яҡтан бер нисек тә дөрөҫләнә алмауын иҫбатланы.

Оҙаҡ ваҡыт дауамында ғәрәп авторы Ибн Хордадбехтың (IX быуат) "Китаб ал-масалик в-ал-мамалик" ("Юлдар һәм батшалыҡтар китабы") әҫәрендә ҡыпсаҡ (ғәрәпсәнән уҡылышы - хифшах) этнонимы тәү башлап иҫкә алына, тип иҫәпләнеп йөрөлдө. Был тарихсы VIII-IX быуаттарҙағы төрки мөхитендәге иң эре һәм абруйлы ҡәбиләләр исемлегенә туғыҙ уғыҙ, карлуҡ, ҡимаҡ, уғыҙ, чигиль, бәшәнәк, тюргеш, азкиш, ҡырғыҙ, ҡыпсаҡ халыҡтарын индергән, уларҙың иң ҙуры Туғыҙ уғыҙ иле, тип атала. Был Уйғыр (Туғыҙ уғыҙ) ҡағанаты (745-847 йй.) осорона тап килә.

С.Г. Кляшторный боронғо төрки руник яҙмаларында ла ҡыпсаҡ атамаһы булыуына иғтибар итә. 1909 йылда фин лингвисы Густав Рамстед Монголияның Селенга йылғаһы буйындағы Шине Усу тигән урында Уйғыр ҡағанатын нигеҙләүсе Элетмиш Билге ҡағанға (747-759 йй.) арналған таш яҙмалар таба. Унда төрк ҡыпсаҡ илле йыл хакимлыҡ итте тигән яҙыу ҙа була. Ошо стелалағы яҙмала хәрефтәр быуаттар дауамында юйыла биргәс, ҡыпсаҡ һүҙенең "...бчак" тигән аҙаҡҡы дүрт хәрефе генә асыҡ күренгәнлектән, тәүҙә ошо мәғлүмәткә ышанмайыраҡ ҡарайҙар. Әммә 1974-1975 йылдарҙағы махсус экспедиция юйылған хәрефтәрҙән ҡалған эҙҙәрҙе тикшереп, стеланың дөрөҫ уҡылыуын раҫлай. Тимәк, II Көнсығыш Төрки ҡағанаты (681-744 йй.) заманында төрки ҡәбиләләре араһында ҡыпсаҡтар ҙа булып, улар дөйөм төрки союзына ингән. Был VII быуатта уҡ ҡыпсаҡтарҙың "turk budun" (будун - ҡәбиләләр союзы) исеме аҫтында хакимлыҡ итеүсе берләшмә составында булыуына бер дәлил булып тора. Әммә ошо берләшмәнең хәрби һәм сәйәси етәксеһе булған Күлтегингә (684-731 йй.) арналған боронғо руник ҡомартҡыла ҡыпсаҡ атамаһы иҫкә алынмай. Ә бына тәүге өс төрки хакимының кәңәшсеһе булған Тоньюкукка (646 - 724 йй.) арналған яҙмала "turk sir budun" һүҙҙәре теркәлгән, ул төрк һәм сир берләшмәһен аңлата.

Ул замандарҙа сирҙар, тип ниндәй ҡәбиләне атауҙары мөмкин һуң? Г.С. Кляшторный ошо хаҡта былай тип яҙа: "Төрк илендә өҫтөнлөк итеүсе ҡәбиләләр союздары хаҡындағы руник ҡомартҡыларҙағы мәғлүмәттәрҙе берләштереп ҡарайыҡ: төркиҙәрҙең үҙ ҡомартҡылары хакимлыҡ итеүсе ҡәбиләләр төркөмөн "төрктәр һәм сирҙар", ә Шине Усу ерендәге уйғыр (уғыҙ) ҡомартҡыһы - "төрктәр һәм кыбчактар", тип атай." Ошо сағыштырыу нигеҙендә билдәле ғалим был ҡомартҡыларҙа сир һәм ҡыпсаҡ исемдәре аҫтында бер үк ҡәбилә хаҡында һүҙ барыуын фараз итә. Был ҡараш тарихсыларға ҡыпсаҡтарҙың VII быуаттан да алдараҡ булған тарихын ентеклерәк өйрәнә алыу юлын асты.

Сир һәм ҡыпсаҡ этнонимдарының бер иш булыуын ошо һүҙҙәрҙең этимологияһы аша ла асыҡлап була. С.Г. Кляшторный сир исеме урынына ҡыпсаҡ атамаһын ҡулланыу боронғо магик инаныуҙар менән бәйле, тип иҫәпләй. Тәүге этноним менән аталған Сир ҡағанатының 646 йылда тар-мар ителеп, һәләкәткә осрауы артабан ошо исем урынына буш, уңышһыҙ, бәхетһеҙ халыҡ тигәнде аңлатҡан "кывчак/кыбчак" атамаһы ҡулланыла башлай, тип һығымта яһай ғалим (йәнәһе, яңы атама хәтәр-хәүеф менән бәйле булған элекке исемдән магик ҡотолоу әмәлен бирә). Әммә был версияға тәнҡит күҙлегенән ҡараған тикшеренеүселәр ҙә бар. Заманында һуғышсанлығы һәм ғәйрәтле булыуы менән дан алған ҡәүем вариҫтарының бындай күрәләтә меҫкенлеккә төшөүенә ышаныуы ҡыйын. Тарихсы Ю.А. Зуев ошондай һығымтаның дәлилһеҙ булыуын күрһәтеп, билдәле лингвист-тюрколог А.Н. Кононовтың фекерен иғтибарға ала. Унында, "куман, ҡыпсаҡ һәм ҡумыҡ (генетик яҡтан бер-береһенә яҡын туғандаш берләшмәләр) этнонимдары бер тамыр һүҙҙән (qub) башланып, ошо тамырҙың фонетик-морфологик үҙгешенең айырым формалары булып тора." Икенсе бер билдәле төрки телдәре белгесе В.А Гордлевский бына нисек яҙа: "Шулай ҙа "половцы" тигәнебеҙ, боронғо мосолман тарихсылары алдаганса, "ҡыпсаҡ" һүҙенең тәржемәһе түгелме, ә "поле Половецкое" - "Дешт-и-Кыпчак" (ҡыпсаҡ ялан-далаһы) тигән урта быуаттарҙағы географик терминға тура килмәйме ни?" Ысынлап та, "половцы" һүҙе рус телендәге "половый" һүҙенән яһалған, ул аҡһыл, аҡһылһары тигән мәғәнәлә ҡулланылған. Ә төрки телдәрендәге quba һүҙе лә шул уҡ аҡһыл, һары, һорғолт көрән төҫтә белдерә. Әйткәндәй, телебеҙҙә ҡоба һыйыр, ҡоба тал, ҡоба туры айғыр кеүек боронғо һүҙҙәр һаҡланып ҡалған. Тимәк, ҡыпсаҡ ырыуы вәкилдәренең төҫбашы башҡа дала кешеләренекенән айырылып тороп, "кобчаҡ-ҡыбсаҡ" уларҙың үҙ атамаһы булмаған, ул экзоним - башҡалар биргән исем сифатында ҡулланылған.

Сирҙар хаҡында Рим империяһы заманында йәшәгән эллин авторҙары ла билдәле бер мәғлүмәт ҡалдырған. Астроном, математик һәм географ Клавдий Птолемей (II б.) төҙөгән картала Алыҫ Көнсығышта, Sina (Ҡытай) иленән төньяҡ-көнбайыштараҡ Serica тип исемләнгән ил дә күрһәтелгән. Ә унан да алдараҡ, Рим авторы Оло Плиний (I б.) яҙып ҡалдырған мәғлүмәттәргә ярашлы, император Клавдий дәүерендә (51-54 йй.) Римға Taprobana (Цейлон) илселәре килә, улар Эмод (Гималай) тауҙары артындағы илдә сер исемле халыҡ йәшәүе, уларҙың оҙон буйлы, ерән сәсле, зәңгәр күҙле булыуы хаҡында һөйләй. Тарихсы һәм географ Страбон (б.э. тиклем 63 й.-б.э. 24 й.) Грек-Бактрия батшалығы Евтидем I етәкселек иткәндә (б.э. тиклем 235-200 йй.) үҙенең сиктәрен сер һәм фрин ерҙәренә тиклем киңәйтеүе хаҡында яҙа. Тимәк, сер исемле ҡәүем беҙҙең эраға тиклем III быуатта уҡ Бактриянан (Төньяҡ Афғанстан) көнсығыштараҡ ятҡан ерҙәрҙә (хәҙерге Көнсығыш Төркөстан - Синьцзян территорияһы) көн иткән була. Географияла был ерҙәр Тарим бассейны тип атала, уның аша Ҡытайҙан Көнбайыш илдәренә алып барған Бөйөк ебәк юлы үтә. Күрәһең, заманында сер ҡәбиләһе ебәк менән һатыу иткәндер, юғиһә римлеләр ебәкте серикум, тип атамаҫ ине. Тарихсы Дж. О. Томсон серҙәр тураһында бына нисек яҙа: "Әммә хәҙер Тарим бассейнында ҡасандыр арий телендә һөйләшкән, арий сығышлы халыҡ йәшәгәнлеге асыҡланды. Хәҙер унда төркисә һөйләшәләр, шулай ҙа урындағы халыҡ араһында һаман да европеоид тибындағылар осрай." Тимәк, сер йә иһә сир атамаһының тәү мәғәнәһе һорғолт, ерән мәғәнәләрен аңлатыуы мөмкин. Ошо этноним сары, соро тигән төрки һүҙҙәренә лә тамырҙаш. Шулай итеп, сер, сир һәм ҡыпсаҡ атамаларының да мәғәнәләш булып, бер үк халыҡтың ике төрлө исемен белдереүенә шик ҡалмай.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!



# ТӘҮГЕ ГУБЕРНАТОР КЕМ?

**Киләһе йыл Башҡортостан Өфө губернаһының беренсе губернаторы Григорий Сергеевич Аксаковтың тыуыуына 200 йыл тулыуҙы тантаналы билдәләйәсәк. Республика Башлығы Радий Хәбиров ошо хаҡтағы Указға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, Хөкүмәттең вице-премьеры Фәнүр Йәғәфәров етәкселегендәге ойоштороу комитетына юбилей сараларының планын эшләргә һәм раҫларға ҡушылды.**

Шулай уҡ БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың сираттағы ултырышында республиканың дәүләт наградалары тураһындағы ҡануниәткә үҙгәрештәр индереүе һөҙөмтәһендә Башҡортостанда Григорий Аксаков исемендәге орден булдырылды. "Григорий Аксаков ордены менән дәүләт, йәмәғәт һәм хәйриә эшмәкәрлегендә һөҙөмтәле эшләүселәр бүләкләнәсәк, - тине парламент рәйесе. - Григорий Аксаковтың исеме край тарихына тап аҡыллы дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре булараҡ яҙылды".

Белемдә өйҙә алғандан һуң, 16 йәшендә ул Петербургтағы Хоҡуҡ белеме училищеһына уҡырға инә. "Гриша мәшһүр эшмәкәр һәм хоҡукиәтсе булыр, ул эшлекле тормош өсөн генә тыуған", - ти уның тураһында туғандарының береһе. Абсолют ғәҙеллеге, компромиссыҙлығы, фекерҙәренең ҡәтғилеге, хатта ярһыулығы арҡаһында уға был өлкәлә бик ҡыйынға тура киләсәге тураһында иҫкәртеүҙәренә ҡарамаҫтан, ул үҙен дәүләт чиновнигы хеҙмәтенә бағышларға ныҡлы ҡарар итә. Уҡыуын тамамлағандан һуң Григорий Аксаков төрлө ерҙәрҙә эшләй, 1861 йылда ул Европа һәм Азияның икһеҙ-сикһеҙ киңлектәрендә йәйрәп ятҡанлыҡтан идара итеүҙә ауырлыҡ тыуҙырған Ырымбур губернаһына граждан губернаторы булып ҡайта. 1865 йылда уны ике өлөшкә бүлергә ҡарәклегәнә инандыра һәм яңы булдырылған Өфө губернаһы губернаторы булып китә

Өфө тарихына Григорий Сергеевич ҡаланың яңы йөҙөн барлыҡҡа килтереүсе булараҡ матур эҙ ҡалдыра. Тап ул идара иткән осорҙа Үрге сауҙа һәм Собор майҙандары булдырыла, унда кафедраль собор (Башҡорт драма театры урынында), духовная семинария, ҡунаҡ йорто, архиерей йорто, губернатор йорто (Туҡай һәм Совет урамдары киҫелеше) һ.б. төҙөлә. Ул тәғәйенләнгәнгә тиклем биналар ҡыйыҡһыҙ тора, уларҙы ҡарағура баҫҡан, ҡайһы бер төҙөлөштәр емерелә башлаған була, ә аҡса оятһыҙ рәүештә урлана. Григорий Сергеевич һәр тин өсөн отчет талап итә. Уның тураһында замандаштары: "Изге күңелле кеше, үҙенең административ эшмәкәрлегендә законға таянып эшләне һәм ҡул аҫтындағыларҙан да шуны талап итте", - тип яҙа.

Губернаторҙың барлыҡ башланғыстарын тормош иптәше Софья Александровна хуплап, ярҙам итеп тора. Уның инициативаһы буйынса Өфөлә хәйриә аҡсаһына беренсе театр бинаһы төҙөлә, Туҡай урамында Софья аллеяһы тип аталған йүкә аллеяһы ла шул замандарҙан ҡалған. Уның инициативаһы менән ҡатын-ҡыҙҙар ҡаҙна училищеһы Мария ҡатын-ҡыҙҙар гимназияһына (3-сө гимназия) әйләндерелә. Юғары вазифалар биләүенә ҡарамаҫтан, Григорий Сергеевич халҡына тоғро ҡала, крәҫтиәндәрҙең хәл-торошон яҡшыртыу өсөн көрәшә һәм уларҙың хөрмәтенә лайыҡ була.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*✓ Өфө-2 ҡаласығында һаҡланған артефакттар һәм мәҙәни ер ҡатламдары - һәйкәлдең иң ҙур байлығы. Шуның өсөн беҙ 4 метрға яҡын ер ҡатламын мәңгеләштереүҙе үҙебеҙҙең маҡсатыбыҙ итеп ҡуйҙыҡ.*



# БОРОНҒО

## асыҡ һауалағы

**Күптән түгел Башҡортостан Башлығы Радий Фәрит улы Хәбиров билдәле башҡорт археологы Нияз Мәжитовтың Өфө-2 ҡаласығындағы тарихыбыҙҙың яңы биттәрен асыу буйынса башлаған мөһим эшен дауам итеү маҡсатында 2024 йылға тиклем Өфөлә этноүҙәк төҙөү тураһында белдерҙе. Ошо хаҡта ентекләберәк һөйләшеү өсөн редакцияға "Боронғо Өфө" Республика тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулыҡ дәүләт бюджет учреждениеһы директоры Гәүһәр БАТТАЛОВАны һәм археология бүлеге мөдире Марсель ШӘМСЕТДИНОВты саҡырҙыҡ.**

**"Ниһайәт!" тип ҡабул иткәндер, моғайын, һәр кем был ҡыуаныслы яңылыҡты, сөнки боронғо башҡорт ҡалаһы тураһында күптән һөйләйбеҙ, уның асыҡ һауалағы музейын булдырыу идеяһы ла күптән күтәрелә килә. Әммә уларҙы тормошҡа ашырыу ниндәйҙер кимәлдә тотҡарланып килде. Әлеге көндә ойошма ошо стратегик планда әйтелгән маҡсаттарҙы үтәүгә тотонорға әҙерме?**

**Г. Батталова:** Был идея менән күптән янып йәшәйбеҙ. Музейыбыҙ 2011 йылда ғына төҙөлөп, бер ярым штат, бюджеттан бүленгән 200 мең һум аҡса менән генә башлаған эштең бөгөн яңы кимәлгә күтәрелеүенә бик шатбыҙ. Аллаға шөкөр, әле штатта 16 кеше эшләйбеҙ һәм 8 йыл ғүмеребеҙ, тимәк, юҡҡа йәшәлмәгән. Шуны ла билдәләп китергә кәрәк: был республиканың 2024 йылға тиклемге стратегик планына өс проекты ингән берҙән-бер музей, берҙәнбер учреждение. Өфө-2 ҡаласығының ҡайҙа урынлашҡаны, уның ниндәй уникаль икәнлеге тураһында күп һөйләнек, халыҡ-ара симпозиумдар ҙа үткәрҙек, күргәҙмәләрҙә сығыш яһайбыҙ, китаптар, открыткалар сығарабыҙ. Ниһайәт, реаль, күҙгә күренгән эштәр эшләргә ваҡыт етте. Шуныһы бик тә ҡыуаныслы.

Бөгөнгә археология паркын төҙөү өсөн нимәләр эшләнгән: беренсенән, уның урыны билдәле. Әхмәтзәки Вәлиди - Салауат Юлаев проспекты - Пушкин - Яңы күпер урамдары менән сиктәш квадратта 0,8 гектар ер музей-ҡурсаулығына бирелгән. Ләкин, белеүегеҙсә, был ер федераль закон тарафынан һаҡлана, шуның өсөн унда ҙур күләмле музей комплекстары төҙөргә ярамай. Төрлөсә уйлап, Мәскәүгә барып, Кремль янындағы Иванов майҙанындағы Иванов археология тәҙрәһен ҡарап, нисек эшләгәндәрен өйрәнеп, кәңәшләшеп, үҙебеҙсә хәл иттек: Өфө-2 ҡаласығында һаҡланған артефакттар һәм мәҙәни ер ҡатламдары - һәйкәлдең иң ҙур байлығы. Шуның өсөн беҙ 4 метрға яҡын ер ҡатламын Иванов майҙанындағы тәҙрә рәүешендә мәңгеләштереүҙе үҙебеҙҙең маҡсатыбыҙ итеп ҡуйҙыҡ. Ул республика өсөн, әлбиттә, яңы күренеш буласаҡ. Шунан һуң, парк өсөн 0,8 гектар ғына етмәйәсәк һәм ҡаласыҡ территорияһында урынлашҡан икенсе 0,7 гектар майҙаны үҙебеҙгә теркәтеү буйынса эш алып барабыҙ. Исмаһам, 1,5 гектар ер булһа ла бик һәйбәт, тип уйлайбыҙ, сөнки археология паркы тигән ҙур, яңғырауыҡлы атама ҡуйғас, ул ысын мәғәнәһендә парк булырға, унда кешеләр килеп ял итергә тейеш. Төрлө саралар үткәреү өсөн амфитеатр ҙа эшләмәксебеҙ. Ғөмүмән, ул ябай ғына парк булмаясаҡ, күҙаллауыбыҙса, террасаларға бүленеп, ер ҡатламдары һымаҡ итеп эшләнәсәк. Идеяһы бик үҙенсәлекле һәм матур, ысынбарлыҡта күрергә яҙһын.

Шунан һуң, Сәғит Агиш урамында 3 гектарҙан ашыу еребеҙ бар. Унда "Атайсал - ата-олатайҙар ере" асыҡ һауалағы музей буласаҡ. Хыялыбыҙҙа был территорияла нимә генә төҙөмәнек инде! Егеттәр менән: "Беҙ хәҙер архитектура проекттарын эшләү һәм уйлап табыу буйынса беренселәр рәтендәбеҙҙер, моғайын", - тип үҙебеҙҙән көләбеҙ. Унда "Караванһарай"ҙы ла, "Самрау"ҙы ла, 2008-2010 йылда Өфөнөң тарихи йорттары һүтелгәндән һуң, уларҙы ошо ерҙә ҡабаттан төҙөүҙе лә тәҡдим иттек. Әле нимә тип уйлайбыҙ: туристар Өфөгә килә, ләкин улар барыһы ла башҡорттар күпләп нисек итеп киҫеп, юнып һалыуҙары ла айырыла. Мин үҙем төньяҡ-көнсығыштан, тамбурлы алъяпҡыстарыбыҙ, күлдәктәребеҙ, күҙ яуын алырлыҡ биҙәктәребеҙ шул тиклем оҡшай үҙемә! Ә баймаҡтарҙың кейеме бөтөнләй икенсе төрлө. Шуға, ошо майҙансыҡты бүлеп, республиканың дүрт төбәге халҡының көнкүрешен күрһәтмәксебеҙ. Шул уҡ ваҡытта уларҙы тағы ла тематик өлөштәргә бүләсәкбеҙ. Мәҫәлән, халҡыбыҙ умартасылыҡ менән данлы. Унда мотлаҡ рәүештә умарталар, солоҡ та, түмәрҙәр ҙә буласаҡ һәм шунда уҡ нисек итеп башҡорт балын алғанды күрһәтәсәкбеҙ. Тағы нимә күрһәтә алабыҙ?



Данлыҡлы башҡорт йылҡыларын! Ошонда нисек итеп ҡымыҙ бешеүҙе, нисек итеп йылҡы итенән ҡаҙы эшләүҙе күрергә мөмкин буласаҡ.

Өсөнсөһө - һөнәрселәр. Ниндәй генә оҫталар юҡ арабыҙҙа. Ул балсыҡтан көршәктәр эшләү булһынмы, ағас эшеме, күндән, йөндән әйберҙәрме һ.б.

Дүртенсеһе - һунарсы өйө. Һунарсы, балыҡсы, ҡошсолар - улар барыһы бергә бер урында буласаҡ.

*Өфө-2 ҡаласығына бағышланған ҙур түңәрәк ҡор ойоштороҙоҡ. Санкт-Петербургтан билдәле сәйәхәтсе, картограф Александр Юрченко килде. Ул Каталон атласын ныҡлап, ентекле өйрәнгән кеше. Уның фекеренсә, Өфө урынында Урта быуаттарҙа Башҡорт тигән ҡала булған һәм ул ошо Каталон атласында нимәләр төшөрөлгәнен, унда Башҡорт тигән ҡала ниндәй урын алып торғанын - барыһын да тәфсирләп яҙған. Александр Юрченконың материалдарын аҡса табып, китап итеп баҫтырып сығарырға теләк ҙур, әммә әлегә ундай мөмкинлегебеҙ юҡ.*

йәшәгән төбәктәргә - Бөрйәнгә, Баймаҡҡа, Хәйбуллаға һ.б. районҙарға барып етә алмай. Бының өсөн бик күп ваҡыт һәм сығымдар кәрәк. Беренсенән, йыраҡ, икенсенән, инфраструктура әҙер түгел, ҡунаҡхана мәсьәләһе лә хәл ителмәгән. Шуның өсөн, уйланыҡ-уйланыҡ та, ул идеяны күптән күңелебеҙҙә йөрөтә инек, Өфөнән сыҡмайынса, ошо урында ғына Башҡортостаныбыҙҙы тотошлай күрһәтәйек, тигән фекергә килдек. Үҙебеҙсә республика картаһын дүрт төбәккә бүлдек. Республиканың төрлө урындарында хатта йорттарҙы бер-береһенә оҡшамаған итеп, төрлөсә төҙөйҙәр: тәҙрә ҡапҡастары икенсе, бүрәнәләрҙә

Өфөнән бер ҡайҙа ситкә сыҡмайынса, башҡорт халҡының көнитмешен, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен - барыһын да бер урында күрһәтергә буласаҡ.

**М. Шәмсетдинов:** Өсөнсө проектыбыҙ - археология депозитарийы. Белеүебеҙсә, бөгөн республикала 3 меңдән ашыу археологик ҡомартҡы бар. Әлеге көндә уларҙы һаҡлау өсөн урын етешмәй. Республика музейҙарында ла ундай фондтар - һаҡлау урындары юҡ. Шуға күрә беҙгә ҙур депозитарий кәрәк. Ул саҡта барлыҡ ҡомартҡылар бер урында һаҡланасаҡ. Әгәр депозитарий Волга буйы федераль округының икенсе берәй төбәгендә төҙөлһә, беҙҙең археологик ҡомартҡыларыбыҙ унда сығарыласаҡ. Быға юл ҡуймаҫ, уларҙы үҙебеҙҙә һаҡлар өсөн ошо проектты тормошҡа ашырыу зарур. Был күргәҙмәләр үткәргәндә лә унайлы, сөнки экспонаттар ҡул аҫтында буласаҡ.

**Г. Батталова:** Ике йыл элек Рәсәйҙең Мәҙәниәт министрлығы 3 мең квадрат метрҙағы археологик депозитарий төҙөү тәҡдиме менән сыҡҡайны. Унан күренеүенсә, әгәр республика проект-тикшеренеү эштәрен үҙ өҫтөнә алһа, проект Федераль адреслы инвестиция программаһына индерелә һәм төҙөлөш өсөн аҡсаны Рәсәй Хөкүмәте фондынан алырға мөмкин буласаҡ. Яҡынса иҫәптәр менән беҙгә проект-тикшеренеү эштәре өсөн 5 миллион самаһы аҡса кәрәк, ә депозитарийҙы төҙөү өсөн - 90 миллион самаһы. Әгәр республика 5 миллион һалһа, Рәсәй 90 миллионын бирергә әҙер. Шуның өсөн, был йүнәлештә лә эш алып барабыҙ. Аллаға шөкөр, эшебеҙ күп, эштән бәхетебеҙ бар.

**Һеҙҙең "Атайсал" асыҡ һауалы музейға, бәлки, төрлө төбәктәрҙәге мәҙәни-археологик мираҫ исемлегендә булған тәбиғәт һәйкәлдәренең күсермәләрен дә ҡуйырға кәрәктер? Мәҫәлән, Шүлгәнташ, Иҙрис (Салауат), Аҫҡын мәмерйәләрен. Шулай уҡ, мөмкинлектән файҙаланып, шунда уҡ "Урал батыр" эпосы персонаждарын, Төньяҡ амурҙарын һынландырған һәйкәлдәр ҡуйылған аллеялар ҙа булдырылыр?**

**М. Шәмсетдинов:** Эйе, макеттарын, тарихын, виртуаль экскурсия экспозицияһын эшләргә мөмкин. Ысынлап та, күптәр Өфөгә килеп, райондар буйлап йөрөй алмай. Әгәр бында экспонаттар менән ниндәйҙер кимәлдә танышһалар, һуңынан уларҙың төп нөсхәһе барып күреү теләге тыуыуы ла бик ихтимал. Кемдер ҡайҙалыр китеп барышлай ғына инеп ҡарап сығыуы мөмкин. Әле беҙҙең музей комплексы юҡ, шулай булһа ла, кешеләр килеп, экспонаттарҙы ҡайҙа ҡарап була, улар менән ҡайҙа танышып була, тип һорай. Халыҡтың ҡыҙыҡһыныуы ҙур.

**Был музей, мәҫәлән, Мәскәүҙәге Иванов археология музейы һымаҡ, "тәҙрә-музей" рәүешендә буласаҡ, тинегеҙ. Тимәк, ул асыҡ һауала була, уны бер нәмә лә ҡапламай, бары тик экспонат быяла аҫтында һаҡлана һәм теләүселәр ер аҫтын быяла өҫтөнән йөрөп ҡарай аласаҡмы?**

**М. Шәмсетдинов:** Эйе, шулай буласаҡ, теләгән кеше быяла өҫтөнән йөрөп, аҫта боронғо ҡаласыҡтың төҙөлөшөн, урамдарын ҡараясаҡ, тупраҡтың мәҙәни ҡатламдары менән таныша аласаҡ. Был ҡаласыҡ - уникаль табыш, сөнки был төбәктә башҡаса ундай ҡаласыҡтар юҡ. Мин, археолог булараҡ, күпме ҡаласыҡтар күргәнем бар, әммә Өфө-2 кеүек полиэтник ҡаласыҡты осратманым. Бында урындағы халыҡ ҡына түгел, икенсе илдәрҙән икенсе милләттәр ҙә килеп йәшәгән. Шуның өсөн ул бик ҡыҙыҡлы һәм мөһим булып тора. Тарихи урынды һаҡларға кәрәк. Юҡҡа ғына ул ҡала Европа карталарына индерелмәгән. Ҡала сауҙа юлында, Ебәк юлының төньяҡ тармағында тора. Сауҙагәрҙәр юлдары бында инеп сыҡмайынса, артабан дауам итә алмаған.

**Нияз Мәжитов Өфө-2 ҡаласығының йәшен яҡынса 1500 йыл тип билдәләһә, башҡалар иһә кәмерәк тип раҫлап маташты. Бер ваҡыт хатта Нияз Абдулхаҡ улы ҡыҙы, кейәүе менән бергәләшеп сит илдә ниндәйҙер экспертиза ла эшләткәйне. Шул мәсьәләнең осона сығып ҡуйылдымы, әллә ул һаман асыҡ килеш ҡаламы?**

**М. Шәмсетдинов:** Эйе, күмер кисәктәре Австралияға ебәрелеп, радиоуглерод анализдары үткәрелгәйне. Уларҙың барлыҡҡа килеү ваҡыты I быуатҡа барып тоташа. Әлеге ваҡытта ла ҡаласыҡтың йәше буйынса бәхәстәр бара. Уның йәшен билдәләү өсөн бик күп сығанаҡтар бар бөгөн. Археологтар телендә шундай һүҙ бар: даталы табылдыҡтар (датирующие находки), йәғни табылған әйберҙең аналогияһы ҡайҙалыр икенсе ерҙә табылды икән, шуның буйынса уның нисәнсе быуатҡа ҡарағанлығын билдәләү. Бер ерҙә ул әйберҙәр менән иртәрәк ҡуллана башлауҙары мөмкин, икенсе ерҙә - һуңыраҡ. Бөгөнгөсә әйтһәк, мода ваҡыты менән килә: бер ерҙә башланып

***✓ Киләсәктә ҡаҙыныу эштәрен алып бармайынса ла, ер аҫтында ниндәй ҡомартҡылар ятҡанын белеп буласаҡ. Шуға күрә ҡаласыҡты тулыһынса ҡаҙып бөтөрөргә түгел, ә һаҡларға тейешбеҙ.***

# ӨФӨБӨҘГӘ...

## музей-тәҙрә аша баҡ!

китә лә, яйлап башҡа ерҙәргә тарала. Бөгөн генә ул мода тиҙ тарала, ә ул замандарҙа уның таралыуына бер быуат кәрәк була. Икенсе яҡтан, рус телендә Уфа-Өфө тигән һүҙ юҡ. Тимәк, ул бындағы, тап ошо ерлектәге топоним. Бәлки, төрки халыҡтарыныҡылыр, йә фин-уғыр халыҡтарына бәйлелер.

Бөгөн ҡаласыҡтың йәшен билдәләү өсөн бөтөнләй икенсе ҡарашты ҡулланырға - күсәгилешлекте табыуҙан башларға кәрәк, тип уйлайым. Шунан башлап ебәргәндә, һуңыраҡ, бәлки, берәй осо ла килеп сығыр. Заманында ҡапыл ғына уйлап, әйҙә, ошонда ҡала булһын, тип төҙөмәгәндәр бит уны. Һуңыраҡ ҡалға төҙөү өсөн урын һайлағанда ла бында электән ҡала булғанын белгәндәр. Ә ҡаланы бер ваҡытта ла буш урында төҙөмәгәндәр, ул төрлө йәһәттән стратегик әһәмиәткә эйә булырға тейеш. Икенсенән, урта быуатта Өфө-2 ҡаласығы ғына түгел, тирә-яҡта тағы бик күп ҡаласыҡтар булған. Өфө-2 - уларҙың ныҡытылған үҙәге генә, сөнки уның эргәһендә шул уҡ ваҡытҡа ҡараған Өфө-3 бар. Өҫтәрәк ҡурғандар, некрополь, Салауат Юлаев һәйкәле торған урында тағы ла бер ҡаласыҡ булған. Улар йылға буйында һәр сығып торған моронда урынлашҡан һәм бер-береһен күреп торған, йәғни төп цитаделде һаҡлау ролен башҡарған. Шуның өсөн Өфө-2-не генә түгел, ә тотош ҡаласыҡтарҙы бергә ҡарап, тарихтың күсәгилешлеген шуларҙан башлап алып китеп, Өфө-2 ҡаласығының йәшен асыҡлауға өлгәшергә тейешбеҙ.

**Г. Батталова:** Әлбиттә, беҙ Өфөнөң йәшен билдәләү буйынса эштәр алып барабыҙ. Былтыр тәүге тапҡыр Нияз Мәжитовтың тыуыуына 85 йыл тулыуға арнап халыҡ-ара ғилми симпозиум үткәрҙек. Унда Венгриянан, Ҡаҙағстандан, Мәскәүҙән, Санкт-Петербургтан - ҡайҙан ғына белгестәр саҡырманыҡ. Шунда Өфө-2 ҡаласығына бағышланған ҙур түңәрәк ҡор ойошторҙоҡ. Санкт-Петербургтан билдәле сәйәхәтсе, картограф Александр Юрченко килде. Ул Каталон атласын ныҡлап, ентекле өйрәнгән кеше. Уның фекеренсә, Өфө урынында Урта быуаттарҙа Башҡорт тигән ҡала булған һәм ул ошо Каталон атласында нимәләр төшөрөлгәнен, унда Башҡорт тигән ҡала ниндәй урын алып торғанын - барыһын да тәфсирләп яҙған. Александр Юрченконың материалдарын аҡса табып, китап итеп баҫтырып сығарырға теләк ҙур, әммә әлегә ундай мөмкинлегебеҙ юҡ.

Шулай уҡ Мәскәүҙә Археология институтында эшләүсе бик абруйлы ғалимдарыбыҙҙың береһе, тарих фәндәре докторы, профессор Игорь Кызласов та Өфө-2 ҡаласығының уникаллеген билдәләй.

Ләкин ҡаласыҡтың йәшен билдәләү музейҙың ғына эше түгел. Бының өсөн республиканың бар ғалимдары күмәкләшеп, бер маҡсат итеп ҡуйып эшләргә тейеш. Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, Рәсәй Фәндәр академияһының археология институты белгестәре лә, БДУ, БДПУ, Башҡортостандың милли музей тарихсылары ла - барыбыҙ ҙа бергә булғанда ғына эште атҡарып сығырға мөмкин. Әлбиттә, беҙ ул эш менән шөғөлләнәбеҙ, шөғөлләнәсәкбеҙ, ләкин ул бик күп ваҡытты талап итә. Күреп тораһығыҙ - беҙҙең бәләкәй генә музей өҫтөндә күпме бурыс ята. Нисек кенә тырышып эшләһәк тә, эшсе ҡулдар етешмәй. Шуға ҡарамаҫтан, ошо арала барлыҡ ғалимдарҙы йыйып, Өфө-2-нең нисәнсе быуатта барлыҡҡа килгәнен, боронғологон дәлилләүсе, уның ниндәй быуаттарға барып тоташыуын асыҡлаусы кәңәшмә үткәрергә ниәтләйбеҙ.

**Ысынлап та, ни өсөн мәсьәләгә комплекслы ҡарамаҫҡа, мәҫәлән, Боронғо Өфө ҡалаһы тураһында, бәлки, фольклор материалдарында, туранан-тура Өфө йәки Башҡорт ҡалаһы тиелмәһә лә, ниндәйҙер ишара барҙыр? Ни өсөн башҡа белгестәрҙе лә йәлеп итмәҫкә?**

**Г. Батталова:** Ул турала ла уйларға кәрәк. Райондарҙағы тарихи-мәҙәни объекттар менән бәйле ниндәйҙер фольклор ижады барҙыр, бәлки. Уларҙы шуға бәйләргә мөмкиндер. Өфөләге объект менән... Был да бит ниндәйҙер кимәлдә сығанаҡ булып тора.

**М. Шәмсетдинов:** Беҙ тәү сиратта топонимдарға иғтибар итәбеҙ. Әммә фольклор әле осрағаны юҡ. Әлбиттә, белгестәр был эште башлаһа, сығанаҡтар табылһа, яҡшы булыр ине. Нияз Абдулхаҡ улы ла гелән башҡорт халыҡ ижады китаптарын ҡараштырып, топонимдар, фольклорҙың башҡа өлгөләрен эҙләй ине.

**Ҡаласыҡ урынында ҡаҙыныу эштәре һаман да дауам итәме, әллә ул бөтөнләй туҡтатылдымы?**

**М. Шәмсетдинов:** Ҡаҙыныу эштәрен быйыл туҡтатып торҙоҡ, сөнки материалдар бик күп, уларҙы өйрәнергә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта ҡаласыҡты ла һаҡлау зарур. Эйе, беҙ табылған артефакттарҙы каталог итеп эшләйбеҙ, әммә сығанаҡ каталогтан нимәһе менән айырыла: каталогты, китап кеүек итеп, ҡабат-ҡабат асып ҡарарға, теләгән ваҡытта алып уҡырға була. Әммә ҡаласыҡ әле серҙәре асылмаған китап булһа ла, уны бары тик бер тапҡыр ғына өйрәнергә мөмкин. Уны нисек ҡаҙып бөттөң - ул башҡаса булмаясаҡ. Урыны ҡала, әммә ерҙең мәҙәни ҡатламдары юҡҡа сыға. Ғөмүмән, археологтар телендә ҡаҙыныу эштәре - археологик һәйкәлдәрҙе юҡҡа сығарыу (разрушение археологических памятников) тип йөрөтөлә. Шул күҙлектән ҡарағанда, ҡаҙыныу эштәрен туҡтатыу - дөрөҫ һәм урынлы.



**Г. Батталова:** Ҡаҙыныу эштәрен туҡтатып тороуҙы үҙ белдегебеҙ менән генә ҡабул итмәнек. Былтыр үткән симпозиумда ҡатнашҡан бөтә донъяға билдәле ғалимдар уны резолюцияға үҙҙәре тәҡдим итте. Ашыҡмай тороғоҙ, бик тәфсирләп кенә өйрәнергә тейешһегеҙ, тинеләр. 2006 йылда хәҙерге Өфө-2 урынында төҙөлөш эштәре башланғас, Нияз Мәжитов етәкселегендәге археологтар 200 квадрат метрлыҡ майҙанды тикшерә. Беҙ уны кәмитә килеп, үткән йылда ни бары 20 метрҙа ғына эшләнек, йәғни 10 тапҡырға кәметтек. Быны барлыҡ археологтар ҙа ҡуш ҡуллап ҡабул итте һәм позициябыҙҙың дөрөҫлөгөн хупланы. Ошо йылдар эсендә әллә күпме артефакттар йыйылған, улар БДУ-ла ине, хәҙер опись буйынса беҙгә бирҙеләр. Уларҙы тикшерергә, өйрәнергә кәрәк. Күршектәр генә лә турбаслы, кушнарен һ.б. мәҙәниәттәргә ҡарай. Бөгөнгә өйрәнелгән артефакттарҙың 8 меңгә яҡыны музей фондына индерелде. Белеүегеҙсә, музей фонды - ул Башҡортостандыҡы түгел, Рәсәйҙең хоҡуҡ ҡыры компетенцияһында.

**Ҡаҙыныу эштәре алып барыу территорияһын кәметтек, тинегеҙ, ә ошо ҡаҙылмаған урында ҡалған ҡомартҡылар тағы күпмелер ятып, бөтөнләй юҡҡа сығыу ихтимал түгелме?**

**М. Шәмсетдинов:** Әлеге көндә артефакттарҙың иң һәйбәт һаҡланыу урыны - ер. Беҙ ҡаласыҡта ағастан түшәлгән урамдар булған, тибеҙ. Беҙ уларҙы ҡаҙып сығарабыҙ, таҙартабыҙ - күп тигәндә бер көн генә күренәләр. Һуңынан кислород менән бәйләнешкә инеп, туҙанға әйләнеп, юҡҡа сығалар. Бағана соҡоро (столбовые ямки) аша өйҙәрҙең, башҡа ҡоролмаларҙың конструктив төҙөлөшөн белеп була. Уларҙы ла ҡаҙып сығарһаҡ, башҡаса бер ваҡытта ла күрмәйәсәкбеҙ һәм элек бында йәшәгән кешеләр кеүек эшләп, тергеҙеп булмаясаҡ. Әлбиттә, фотоға төшөрәбеҙ, планын эшләйбеҙ һәм беҙҙең ҡулда бары тик ошо фотодокументтар, уларҙың һүрәтләмәләре генә тороп ҡаласаҡ. Улар ни тиклем сифатлы булһа ла, барыбер төп нөсхә була алмай.

Бөгөн технологиялар бик ныҡ үҫешә. Археологтар хатта ҡайһы саҡта уларҙың артынан өлгөрмәй ҙә. Элек таҫмалы фотоаппаратҡа төшөрөп, отчеттарға фотолар йәбештереп эшләй инек. Хәҙер һәр бер нәмә электрон рәүештә башҡарыла. Элек планды нисек күрәбеҙ - шуны төшөргән булһаҡ, хәҙер аэрофотосъемка, квадрокоптерҙар, тахеометрҙар бар. Улар менән эшләү өсөн айырым белгестәр кәрәк. Ошо барлыҡ техниканы үҙләштергән археологтар Башҡортостанда ғына түгел, хатта Рәсәйҙә бик аҙ. Беҙ ҙә яңы технологияны үҙләштерергә тырышабыҙ. Ҡатмарлы геодезик ҡоралдарҙың иҫәпләүҙәре аныҡ. Теге йәки был объекттың нисек урынлашҡанын сантиметрына тиклем белергә була.

Ҡайһы бер ҡомартҡылар хәҙер күҙгә күренмәй. Улар ҡасандыр булған, әммә ер, бәлки, һөрөлгәндер, бәлки, башҡа агротехник эштәр башҡарылғандыр. Квадрокоптер менән аэрофотосъемка-фотогенометрия үткәргәндә, уттар менән уйнағанда ғына фотола күренәләр. Тағы ла электромагнит моделләштереү ҡоралы менән ер өҫтөнән үтәләр ҙә, ул ер аҫтында нимә булыуы мөмкин икәнен күрһәтә. Киләсәктә, минеңсә, ҡаҙыныу эштәрен алып бармайынса ла, ер аҫтында ниндәй ҡомартҡылар ятҡанын белеп буласаҡ. Шуға күрә ҡаласыҡты тулыһынса ҡаҙып бөтөрөргә түгел, ә һаҡларға тейешбеҙ. Ерҙә ҡалғанда, антропоген факторҙар йоғонто яһамаһа, ҡомартҡылар яҡшы һаҡлана.

***Ҡаҙыныу эштәрен быйыл туҡтатып торҙоҡ, сөнки материалдар бик күп, уларҙы өйрәнергә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта ҡаласыҡты ла һаҡлау зарур. Эйе, беҙ табылған артефакттарҙы каталог итеп эшләйбеҙ, әммә сығанаҡ каталогтан нимәһе менән айырыла: каталогты, китап кеүек итеп, ҡабат-ҡабат асып ҡарарға, теләгән ваҡытта алып уҡырға була. Әммә ҡаласыҡ әле серҙәре асылмаған китап булһа ла, уны бары тик бер тапҡыр ғына өйрәнергә мөмкин. Уны нисек ҡаҙып бөттөң - ул башҡаса булмаясаҡ.***

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй, яу ҡырында яңғыҙ яугир түгел, тиһәләр ҙә, бер ярым ғына штаттан башланған эш бөгөн ҡоласын киңәйтә бара. Әлбиттә, йәш, дәртле тарихсы-археологтар етешмәй һәм был мәсьәләне хәл итеү өсөн ойошма Башҡорт дәүләт университеты менән һөйләшеүҙәр алып бара. Киләсәктә төрлө телдәр белгән экскурсоводтар әҙерләүҙе лә күҙаллайҙар. Ике йыл элек музей ҡарамағында "Самрау" мәҙәни мираҫы һаҡлау фондын төҙөп, Рәсәй Президенты грантына дәғүә итеп, еңеп, төрлө проекттарҙы тормошҡа ашыралар. Аксаков паркында ике йыл рәттән тарихи фестиваль үткәрелә. Унда тимерселәр, көршәкселәр, кейеҙселәр үҙ оҫталығын күрһәтә, күн әйберҙәр, башҡорт милли биҙәнеү әйберҙәрен эшләүселәр һәм башҡа бик күп һөнәрселәр оҫталыҡ дәрестәре уҙғара. "Мин Өфө менән танышам" проекты ла, республика рәссамдары менән берлектә ойошторолған "Өфө менән берлектә" тип аталған пленэр (урам буйлап йөрөп, рәссамдар Өфөләге тарихи-мәҙәни объекттарҙы һүрәткә төшөрә) ҙа республика өсөн яңы күренеш була. "Беҙгә ябай ғына күргәҙмә үткәреү, ябай ғына рәсем төшөрөү ҡыҙыҡ түгел. Халыҡты ылыҡтырырлыҡ нимәләр булырға тейеш. Шуға коллектив менән йыйылып ултырабыҙ ҙа, тәҡдимдәребеҙ, фекерҙәребеҙ менән бүлешәбеҙ, яңы нимәләр уйлап табабыҙ, нисек итеп кешеләрҙе аптыратырға, шаҡ ҡатырырға, тип баш ватабыҙ", - ти әңгәмәселәрем. Тимәк, киләсәктә шаҡ ҡатырлыҡ эштәр көтә беҙҙе!**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

**✓ "Тәүҙә усаҡ бысҡып һүнер микән, әллә ирер микән боҙ тәүҙә?.." Бөйөк Шекспир персонажы Гамлет әйткән һүҙҙәргә тиң хәтәр һығымта! Юҡ, шағир бысҡып һүнмәне, үҙ усағында янды, әммә, ҡыҙғанысҡа, боҙҙо ла иретә алманы.**

*ЯҘЫУСЫ ҺҮҘЕ*

# ҺИН ЯНМАҺАҢ, МИН ЯНМАҺАМ...

Беҙ, биш егет, йәш талдан үрелгән ике кәрзингә турғай йомортҡаһы ҙурлығындағы таштар һалабыҙ. Ул кәрзиндәрҙең береһенә бер халыҡ шағирының исем-шәрифе, икенсеһенә "Рәйес Түләк" тип яҙылған. Таштарҙы икегә бүлеүҙең шарты шулай: һалыр алдынан һәр кем ике шағирҙың да үҙе аңлаған-белгәнсә ижадын баһалай. Берәүебеҙ "ултырыштың" сәркәтип вазифаһын үтәй - һалынған һәр ташты иҫәпләп, ҡағыҙға теркәп бара. Үҙебеҙсә ярым ысын, ярым шаярып, кемдең кем икәнен билдәләү буйынса ярыш ойоштorғанбыҙ инде.

Ниһайәт, биш кешенең биш номинацияға бүлгеләнгән етешәр ташы ла ике кәрзингә һалынып бөттө. Бер иптәшебеҙ һәммәбеҙҙең дә ҡыҙыҡһыныусан ҡараштары аҫтында тәүҙә бер, унан икенсе кәрзиндәге таштарҙы һанап, өҫтәлгә теҙә башлай. Һөҙөмтәлә Рәйес Түләктең таштары күберәк килеп сыҡты. Бер мәлгә аптырашып ҡалабыҙ. Барыбыҙ ҙа, юҡ, былай булыуы мөмкин түгел, ҡайҙалыр яңылышлыҡ китте, тип уйлай. Мин дә шулай уйлайым. Сөнки быны, ысынлап та, булыуы мөмкин түгел, уға юҡҡа халыҡ шағиры исеме биргәндәрме? Рәйес кем инде әлеге олпат һәм популяр шағир алдында?

Яңынан һанайыҡ, тине кемдер. Яңынан һанарға кереште иптәш - был юлы өҫтәлдәге таштарҙы һанап, кире кәрзингә һала барҙы. Барыбыҙҙың күҙе - уның ҡулдарында, йәнә хәрәмләшә күрмәһен, йәнәһе. Бына ғәжәп, был юлы ла Рәйестең таштары бишәүгә артыҡ сыҡты. Өсөнсө хисаплауҙа ла таштар халыҡ шағиры файҙаһына түгел ине. Тамам аптырашта ҡалдыҡ, бер-беребеҙҙең күҙенә ҡарарға ояльдыҡ, ә олуғ ижадсының күҙенә нисек ҡарарбыҙ? Беребеҙ уның ҡолағына (аранан хаин табылмаҫ тимә!) төшөрһә, бөттө бит!

Ошо йылдың ун өсөнсө октябренән ун дүртенә ҡараған төндә күргән төш был. Әлдә төш. Уяндым да бер килке тамам аптырап яттым. Төштәге һымаҡ ышанманым да, ғәжәпләндем дә, ниндәй һығымта яһарға, нисек юрарға ла белмәнем. Һаман да белмәйем.

...Рәйес Түләк, ниңәлер, гел үкенесле тойғолар менән иҫкә төшә. Бының сәбәбен үҙем дә аңлап төшөнөп етмәйем. Тәү сиратта, иртә, 47 генә йәшендә арабыҙҙан китеүенәндәр. Үҙендән йәшерәктәрҙең үҙендән алда гүргә инеүе - тормоштоң ҙур ғәҙелһеҙлектәренең береһе. Шуға ла күңелдә әсенеү тойғоһо менән бергә уның алдында уңайһыҙланыу тойғоһо ла бар... Уйлаһаң, әҙәбиәтебеҙгә күренеш булырҙай күпме аҫыл шиғыр, поэма, тәнҡит мәҡәләләре, публицистик әҫәрҙәр өҫтәй алыр ине. Уның холоҡ-фиғелен күпмелер дәрәжәлә белгәнгә, иң мөһиме, ижады менән таныш булғанға, шулай уйлайым: эсендәге ут-ялҡын, ҡыҙыл торомбаш менән оҙаҡ йәшәүе мөмкин дә булмағандыр, иртәме-һуңмы, һәр хәлдә 80-гә еткәнсе түгел, ул һине эстән яндырасаҡ. Талант эсендәге ана шул ут-ялҡынды һис һүндерә алмай, усаҡҡа, тимәк, үлеменә барған күбәләк һымаҡ талпынып осоуын белә. Бында уның хатаһы юҡ, бәләһе генә бар.



Холоҡ-фиғеле, үҙен тотошо менән ауан егет ине Рәйес. Дуҫ булдыҡ, тип әйтә алмайым, улай ҡәтғи раҫлау өсөн байтаҡ нәмә уртаҡлығы кәрәк, осрашыуҙар ҙа күберәк осраҡлы ине. Ул Сибайҙа йәшәне, Өфөгә килеп тә эшләп алды, әммә бындағы әҙәби мөхиткә инеп китә алманы, буғай (Өфө күҙ йәштәренә ышанмай), мәркәзебеҙҙә фатир табып, ғаиләһен күсереп төпләнеп йәшәргә, тигән ниәте лә бар ине. Шулай ҙа уның менән булған һәр осрашыу тигәндәй хәтергә уйылып ҡалған. Сөнки хәбәре, фекер йөрөтөүе, баһаһы, ҡыҙыҡһыныу даирәһе ғәҙәти түгел ине.

...Улым Илнур тәүге ике курсты Сибай институтында уҡыны. Шул арҡала йыш ҡына көҙөн уҡыуҙар башланыр, яҙын тамамланыр алдынан янына барғылап йөрөлдө - сезонлы кейем-һалым, фатирҙа йәшәгәнлектән, аҙыҡ-түлек илтелде. Деканатҡа, уҡыу-уҡытыу бүлегенә инеп, уҡыуы менән дә ҡыҙыҡһынам. Шундай барыуҙарҙың береһендә Рәйескә тап булып (уның унда башҡорт теленән уҡытып йөрөгән сағы) уҡытыусылар бүлмәһендә, дәрестәре бөткәс, урамда һөйләшеп торҙоҡ. Әллә шунда, әллә икенсе килеүемдә, фатирына ла алып ҡайтты. Хәбәребеҙ күпселектә әҙәбиәт, Өфөләге тормош, уртаҡ таныштар, кемдеңдер әҫәре тураһында булды. Һөйләшеүҙә шағирҙың әҙәбиәтте нескә аңлауы, юғары зауығы, фекерләү ҡеүәһе, үҙенең яҙғандарына ла, ҡәләмдәштәренең ижадына ла талапсанлығы күренеп тора - мәркәзебеҙҙән алыҫта көн итһә лә бар булмышы менән әҙәбиәтебеҙ эсендә ҡайнағаны һиҙелә. Ошондай бер нисә осрашыу нигеҙендә лә мин уның саф шағир ғына түгел, төплө ғалим да, һәләтле мөғәллим дә икәненә ышандым.

...Рәйестең шағирлығы ҡабул ителгән, ә бына тәнҡитсе булараҡ уны "асыуым" Талха Ғиниәтуллиндың "Баҙ" тигән хикәйәһенә эшләгән анализы булды. Мәҡәлә 1998 йыл "Шоңҡар" журналында баҫылып сыҡты. Үҙем тәржемәләгән ул хикәйәне Рәйес энәһенән ебенәсә тигәндәй тикшереп, мин күрмәгән, уйламаған нәмәләрҙе күреп, хикәйәнең һәр һүҙенә, деталенә, боролошона, геройҙарҙың һәр ҡылығына баһа-анализ яһағайны. Әҫәрҙе был тиклем дә тәфсирле, ентекле тикшергән кешене мин бик һирәк осратам. Уны тәнҡит мәҡәләһе тип тә әйтеп булмай, ә уҡыусыға, шул уҡ үҙенең студентына автор әйтергә теләгән фекерҙе аңлатыу, төшөндөрөү, баһалау ине ул. Һәм, ғәжәп, уның был мәҡәләһен уҡығас, әлеге хикәйә миңә тағы ла аңлайышлыраҡ, бейегерәк булып китте, үҫте...

Ысынлап та, күп тәнҡитселәребеҙ, ғөмүмән, әҙәбиәтселәребеҙ өсөн өлгө булырлыҡ ине Рәйес Түләктең күҙәтеүҙәре. Ҡараштары киң, күҙе үткер, ҡыйыуы бейек ине. Эйе, таштары күп ине... Үҙемә ҡалһа, тағы ла бер елле мәҡәлә яҙҙы Рәйес... Минең "Ҡытай-город" повесын уҡығас, "Үҙ әсәһен һатҡан булыр..." тигән хеҙмәт ижад итте ("Ватандаш", 2003 йыл, 1-се һан). Әҫәрҙә мин күтәреп маташҡан ер проблемаһын бер Башҡортостанға килгән йәки киләсәк афәт итеп түгел, алдағы йылдарҙа тотош Рәсәйгә янаясаҡ афәт икәнен күрһәтте. Бының ниндәйҙер айырым географик территория булараҡ аныҡ бер колхоз еренә генә түгел, халыҡҡа, милләткә, туған телгә, алдағы йылдарҙа беҙҙең балалар, ейәндәр өҫтөнә ятасаҡ ауыр йөк буласағын иҫбатланы. Түбән ҡарағыҙ, тормошобоҙ мин күрһәткәнсә, Рәйес иҫкәрткәнсә китеп бара түгелме һуң? Ерҙәр, урмандар һатыла, ер аҫты байлыҡтары, эре сәнәғәт предприятиелары, хатта ҙур магазиндар һатылып бөтөп бара. Бөтмәһә әле. Ҡайҙа барма, ҡайҙа ҡарама - "Ҡытай-город!" Ә беҙ һаман "Хуш киләһегеҙ, дуҫтар, рәхим итегеҙ!" тип ҡоластарҙы киң йәйеп, килмешәктәрҙең һәр ҡайһыһын икмәк-тоҙ, ҡурай моңо менән ҡаршылап торабыҙ...

...Шағир һуңғы китабын - "Мең дә икенсе кис..."ен ҡулына алып өлгөрә алманы. Үҙе үлгәндең иртәгәһенә үк тигәндәй сыҡты шекелле ул. Элек шиғыр, поэмалары менән өҙөк-һурыҡ ҡына тигәндәй танышып барғанлыҡтан, был китабын беренсе битенән аҙағынаса уҡып сыҡтым. Уның донъяһын аңлау, белеү өсөн махсус рәүештә һәр кис бер генә бөртөк шиғырын уҡыным (бер ҡыш Чеховтың хикәйәләрен шулай уҡығайным). Тетрәтте, һиҫкәндерҙе тупланмалағы әҫәрҙәр, аптыратты, һоҡландырҙы, үкендерҙе. Был тойғолар йомартлығы Рәйестең юҡлығынан түгел, хәйер, уныһы ла тәьҫир итмәй ҡалмағандыр, ә ярһыу күңеле, тынғыһыҙлығы, һәр нәмәгә асыҡ һәм аныҡ позицияла булыуы, милли үҙаң юғарылығы, тел тип, ил тип һыҙланыуы таң ҡалдырҙы. Саң ҡаға, иҫкәртә шағир, йөрәген баш осона күтәреп, үҙ ярынан милләтте эйәртергә ынтыла лабаһа! Бер буш юл, бер буш шиғыр юҡ, һәр ҡайһыһы фекерле, хис-тойғоно, ысын шиғриәттең аҫыл өлгөләре!

...Китапта "Яҙмыш" тигән шиғыр бар. Биш кенә строфанан торған был шиғыр - шағирҙың йәшәү һәм ижад кредоһы. Уның сәйәси, ижтимағи ҡараштарын, йөҙөн, позицияһын билдәләгән әҫәр. "Боҙ өҫтөндә янып аҡҡан ут мин. Бәүелә-һуғыла ике ярына..." Рәйес бар булмышын, холоҡ-фиғелен, йәшәү маҡсатын теркәгән дә ҡуйған бит был юлдарға. Уға, шағирға, ысынлап та, баҫҡан ере һәр саҡ боҙ булды, тормош уны һәр саҡ боҙға баҫтырҙы, ә үҙе һәр саҡ ут булып янды. Нишләп камил түгел һуң был донъя, халҡыма ниңә шулай бөтмәҫ-төкәнмәҫ ғазаптар килтерҙең, тигән һорауҙар менән ярҙан-ярға һуғылды, тарих биттәренән яуаптар эҙләне, батырҙар менән бергә язаланды, янды, каторгаға китте, дарға аҫылды. Шиғырҙың дүртенсе строфаһының һуңғы ике юлы былай: "Тәүҙә усаҡ бысҡып һүнер микән, әллә ирер микән боҙ тәүҙә?.." Бөйөк Шекспир персонажы Гамлет әйткән һүҙҙәргә тиң хәтәр һығымта! Юҡ, шағир бысҡып һүнмәне, үҙ усағында янды, әммә, ҡыҙғанысҡа, боҙҙо ла иретә алманы. Сөнки ул беҙҙе, йәғни системаны иретә алырлыҡ көскә эйә түгел, әммә ошо системаға оло ҡәнәғәтһеҙлек, хатта нәфрәт белдерә алды. Күпселек барыһына ла "йәрхәмбикәалла" тип торғанда был ҡылыҡ шулай уҡ батырлыҡҡа бәрәбәр. Бөйөк төрөк шағиры Нәзим Хикмәт әйткәнсә, "Мин янмаһам, һин янмаһаң, ул янмаһа, кем яныр?" тигән лозунг тотоп, ҡыйыу аҙым яһалды. Ә был һәр шағирҙың ҡулынан килә торған эш түгел...

...Әҙәбиәт - художестволы образ аша үҙендең тормошондо ҡороу ул. Ҡороу һәм үҙеңдең ошо донъяңды уҡыусы хөкөмөнә сығарыу. Рәйес Түләк шиғриәте тексы тормош материалын юғары художестволы бейеклеккә күтәргән ижад. Ул әҙәбиәт золом-ҡанундарын ныҡлы белеп-аңлап эш итте. Әммә береһенә лә һуҡырҙарса эйәрмәне, уның ҡоло булманы - тормош фактын художестволы әҙәбиәт фактына "әйләндереүҙең" үҙ юлдарын тапты. Милләт алдында, хатта айырым кеше алдында торған проблемаларҙы аңлайышлы итеп әйтә белде. Миңә ҡалһа, ул һәр ваҡыт йәмғиәт ҡанундары менән бәхәстә йәшәне. Был ябай ҡәнәғәтһеҙлек кенә түгел, ә дәғүә, ҡаршы сығыу, дуэлгә саҡырыу ине. Һүҙ уғы гел генә социаль ориентирлы, абстракт түгел, адреслы булды.

..."Яныу" поэмаһы шағирҙың иң һуңғы әҫәре булмаһа ла был фани донъянан үҙе китер алдынан беҙгә әйткән һуңғы һүҙе, васыяты булып яңғырай. Хәйер, һиҙгәндер, тойомлағандыр әмәле йыраҡ түгеллеген, шуға ла ҡабаланғандыр. Былай ҙа ҡырҡыу, көсөргәнешле, әрнеү, ярһыулыҡ менән һуғарылған, дөрөҫөрәге, шул тойғоларға мансылған әҫәр тыуҙырыу өсөн үҙендең яныуың кәрәк. Ҡәнәғәт күңел менән бындайҙы яҙып булмай. Поэма Рәшит Назаровтың "Ер аҫтынан һеҙгә хаттар яҙам..." тигән әҫәренә бик тә ауаздаш. Шул уҡ үрһәләнеү, транс, һуңғы һүҙенде әйтергә ынтылыу... Ғөмүмән, был әҫәр өлгөһөндә генә түгел, дөйөм ижад тоғон сағыштырғанда ла Рәйес Тү-

**✓ *Мине борондан кешеләр Буранай, тип йөрөтә. Ай башында яңы Ҡояш бураны, ай уртаһында Айыу бураны, ай аҙағында Көнсығыш бураны - минекеләр. Минең буран аттарым иркенләп саба.***



ләк ижады даһи Рәшит Назаров ижадына бик яҡын.

Поэма көтөүсенең ҡалала йәшәгән шағирға яҙған хаттары формаһында "төҙөлгән". Алда әйткәнемсә, хаттарҙы яҙыусы ла, алыусы ла Рәйес үҙе. Әммә поэмала шағир юҡ, ул сәхнә артында. Уның барлығын беҙ самалайбыҙ ғына, әммә үҙен күрмәйбеҙ һәм көтөүсенең хаттарын алғас, үткер социаль, юғары художестволы әҫәр яҙыуына ышанабыҙ. Автор ҡайһы бер тарихи һәм бөгөнгө тормош ситуациялары аша милләттең һарыҡ ише аңралығын ғына күрһәтеп ҡалмай, көтөү алдынан барған һарыҡтың, йәғни етәкселектең аңралығына лә йәнә эсей, уларҙы милләт өсөн янмаған, уның бөгөнгөһөн һәм киләсәген ҡайғыртмағаны (ә һарай ҡапҡаһын көтөү киткәнсе ябып йәки яптырып була бит!) өсөн ҡәһәрләй. Хәйер, халҡы ниндәй, батшаһы ла шулай инде - ул бит шул уҡ көтөү араһынан сыҡҡан, бер ҙә икенсе планетанан килмәгән. "Ил түрәһе белмәй микән ни һуң. Ни уйлайҙар икән башлыҡтар. Берәй әмәл табыр кәрәк ине. Бөтә бит һуң башҡорттар". Автор поэмала билдәләүенсә, башҡортто бөтөрөүҙең бер нисә юлы бар: әскелек, урыҫтан йотолоу йәғни телдең юғалыуы, ҡанлы юлдар менән яҙылған тарихыбыҙҙан һабаҡ ала белмәү. Милләтте үҙ артынан эйәртерлек лидерҙар юҡлығы... Бөтәһе лә дөрөҫ. Шағир акценттарҙы белеп ҡуя. Тирә-яғыбыҙға күҙебеҙҙе асыбыраҡ ҡараһаҡ, хәл-торошто тап шулай икәнен күрербеҙ ҙә...

...Рәйес Түләк шиғриәте сәйәси, ижтимағи, тарихи асыштары менән көслө, социаль яңғырашлы, шәхестең йәмғиәттәге урыны, йәмғиәттең шәхесенә ҡарата булған мөнәсәбәте - ижадының төп мотивтары. Уның лирик геройы гел генә бәхәстә, яғалашта, был бәхәс, яғалаш икәне көнкүреш ҡәнәғәтһеҙлеге генә түгел, ул йәмғиәт ҡоролошоноң, социаль-идеологик базистың нигеҙҙәренә барып тоташа. Бөгөнгө йәмғиәт камиллыҡтан алыҫ. Ошо камил булмаған йәмғиәттә үҙен һаҡлар, яҡлар өсөн кеше ни эшләргә тейеш? Бына ниндәй глобаль һорауҙар ҡуя шағир. Ә беҙ шул һорауҙарҙы күтәреп алырға әҙербеҙме? Йәмғиәт эволюцион юл менән үҫһен өсөн власть органдарының ғына эше түгел, йәмғиәттең һәр ағзаһының да һүҙе, тәҡдиме кәрәк бит.

XX быуат башҡорт әҙәбиәте хаҡында һүҙ алып барғанда беҙ иң беренселәрҙән булып Шәйехзада Бабич исемен атайбыҙ, ә XXI быуат башы еткәндә - Рәйес Түләктең исеме иң тәүгеләрҙән булып әйтеләсәк... Был - Әхмәр Үтәбай һүҙҙәре. Хаҡтыр Үтәбай, былдай оло һәм яуаплы һүҙ әйтергә башы ике түгел - ул юҡты һөйләмәҫ, бизмәнен ҡат-ҡат тикшереп үлсәгәндән һуң ғына әйткәндер. Ул да Рәйес "таштарының" күплеген белә ине...

**Әмир ӘМИНЕВ.**

*ЙОЛА СЦЕНАРИЙЫ*

# ҠЫШҠЫ СЕЛЛӘ - ҠЫРҠ КӨН

**(Өс күренештә)**

*Сәрүәр СУРИНА*



**Ҡатнашалар:**
**Һыйыр, Ғинуар, Декабрь, Февраль, Балалар**

## Беренсе күренеш

*Һыйыр бесән ашай. Балалар сыр-сыу килеп шаярышып инә.*

**Балалар:** Рәхәтләнеп уйнайбыҙ. Беҙ ҡурҡмайбыҙ һалҡындан.
**Һыйыр:** Бесән булһа алдымда, мин ҡурҡмайым бурандан!
**Балалар:** Килә һалҡын өс ҡышҡ(ы)ай - Аҡъюл, Буранай, Шаҡай!
**Һыйыр:** Бесән тәмле, хуш еҫле, һарай йылы, күңелле!
**Балалар:** Килер тағы яңы йыл, яңы уйын, яңы йыр!
**Һыйыр:** Күрәм, күңелле һеҙгә! Хәйерле юлдар һеҙгә!

*Балалар шаулап үтеп китә. Декабрь инә.*

**Һыйыр:** Эй, Декабрь, Декабрь, һин ниңә былай бойоҡ?
**Декабрь:** Мин төндән ҡурҡып йәшәйем. Көн ҡыҫҡара ла ҡыҫҡара, ә төн оҙая...
**Һыйыр:** Был хәлде һин туҡтата алмайһың. Төн батшаһын Ҡояш ҡына еңә. Ҡояшты саҡыр!
**Декабрь:** Ҡояш? Ҡояш! Бик алыҫ бит ул, ишетмәй...
**Һыйыр:** Һин боронғо исемдәреңде онотма. Элек һине Аҡъюлай, тигәндәр.
**Декабрь:** Беләм, мин - Аҡъюлай, ап-аҡ сана юлдары башлана.
**Һыйыр:** Исемеңә - есемең. Ҡояштың да боронғо исеме бар. Ул үҙенең боронғо исемен ишетә - Нар! Нар - туған, тигән һүҙ. Ҡояшҡа, Нар туған, тиергә кәрәк.
**Декабрь:** Нар! Нар туған!
**Һыйыр:** Бер үҙең генә түгел, күмәк халыҡ йыйылышып, Ҡояшты саҡырығыҙ! Ҡояш байрамы - Нардуған үткәрегеҙ!
**Декабрь:** Рәхмәт кәңәшеңә, Һыйыр! Ҡояш саҡырайыҡ, ул беҙҙе ишетер ҙә кире боролор.

*Музыка. Декабрь уртала.*

**Декабрь:**
Нар, Нар, Нардуған!
Нардуғанға бар, туған!

*Балалар инә.*

**Күмәк:**
Һимеҙ һарыҡ һуйырмын,
Майын һиңә ҡуйырмын.
**Декабрь:**
Нардуған ҡотло булһын,
Һыйырың һөтлө булһын.
**Күмәк:**
Иген-бесәндәр уңһын,
Мал менән кәртә тулһын.
**Декабрь:**
Нар, Нар, Нардуған,
Нардуғанға бар, туған!
**Күмәк:**
Нардуғанға мин барам,
Күңелле булыр байрам.

*Күмәк бейеү. Ҡояшҡа оҡшатып биҙәктәр яһала.*

**Декабрь:** Ҡояшты саҡырҙыҡ, ул үҙенең Нардуған тигән боронғо исемен бик ярата, Ҡояш кире боролдо, Төн батшаһы еңелдә, көндәр оҙая! Нардуған байрамы бик күңелле. Ләкин һалҡындар башланһа, һин нишләрһең икән, һәүкәшкәйем, йәлләйем...
**Һыйыр:** Тапҡанһың йәлләр нәмә, башҡа ҡайғың булмаһа, минең өсөн ҡайғырма! Бесән етерлек булһа, һалҡынға бирешмәйем, тирем дә ҡалын: ҡышҡылыҡҡа ҡуйы йөн үҫә. Бына мөгөҙөм генә тырпайып тора, ул туңһа, һынып төшөүе лә бар. Шуға ҡыш көнө һөҙөшмәйем. Мөгөҙ кәрәк булыр ул...
**Декабрь:** Ярай, мин яңы ҡояш нурында уйнаҡлаған буран елдәрен ҡарап киләйем, улар бик шашып китмәһен!...

*Декабрь сыға.*

## Икенсе күренеш

*Яңғыҙ торған Һыйыр эргәһенә Ғинуар инә.*

**Һыйыр:** Хуш киләһең, Ғинуар, Яңы йылды башлауҫы!
**Ғинуар:** Мине борондан кешеләр Буранай, тип йөрөтә. Ай башында яңы Ҡояш бураны, ай уртаһында Айыу бураны, ай аҙағында Көнсығыш бураны - минекеләр. Минең буран аттарым иркенләп саба.
**Һыйыр:** Тик... бәлә! Ауырыу-сир ағыуын сәсә торған Аждаһа тап ошо мәлдә яу аса.
**Ғинуар:** Оноттоңмо ни, ә мин 40 көнләк ҡышҡы селлә тунын кейеп алам. Селлә тунын ябынһам, ҡаты һыуыҡтар башлана ла, аждаһа тараҡҡан ауырыу-сирҙәрҙән донъя таҙара!
**Һыйыр:** Ә һин тиҙ бул, кей туныңды. О, ниндәй шәп селлә туны! Ҡотло булһын!
**Ғинуар** *(селлә тунын ябынып таҡмаҡлай)*:
Селлә килә - ҡырҡ көн.
Ҡырҡыһы ла ҡаты көн.
Ҡаты һалҡын менән ҡамап,
Аждаһаны ватыр көн!

*Балалар сыр-сыу килеп шаярышып инә. Грипп вирустарын хәтерләткән Аждаһа шәүләһен ҡыуалайҙар.*

**Күмәк:**
Беҙ һалҡындан ҡурҡмайбыҙ,
Рәхәтләнеп уйнайбыҙ.
**Ғинуар:**
Селлә килә - ҡырҡ көн,
Селлә - беҙгә шифа, бел!
**Күмәк:**
Селлә килһен - сир китер,
Селлә бөтөр - сир бөтөр.

*Ҡар бөреш, сана-саңғы шыуыу хәрәкәттәре менән күмәк бейеү. Аждаһа шәүләһе юғала.*

**Ғинуар:** Аждаһа ҡасты, һауалар сафланды. Селлә туны миңә оҙонораҡ - ун биш көнө Февралгә ҡалыр. Ҡышҡы селлә ҡырҡ көн - 5 ғинуарҙан 15 февралгә саҡлы иң ныҡ һалҡындар була, был - ҡышҡы селлә, был ваҡытта вирустар ҡотора алмаҫ. Ә кешеләр рәхәтләнеп саф һауала, һыуыҡта йөрөргә тырышһын.
**Балалар:** Рәхмәт һиңә, ҡышҡы селлә батшаһы, Буранай Ғинуар!

*Ғинуарҙы оҙатып китәләр.*

## Өсөнсө күренеш

*Февраль Һыйырҙы ҡыуып инә.*

**Февраль:** Һәш! Йылы һарайҙа ғына тораһың. Быҙауларға ла өлгәрәһең. Минән ҡурҡмайһың...
**Һыйыр:** Нишләп миңә бәйләнә ул? Ни хәл, Февраль, эштәр барамы?
**Февраль:** Минең боронғо исемем бар, мин Шаҡай! Шаҡай, тип әйт миңә! Бөтә донъя шаҡылдап туңған, бөтә донъя минең ҡулда.
**Һыйыр:** Эйе, бигерәк һыуыҡһың... Беҙҙең быҙауҙарға бик ҡыйын... Һиңә селлә тунын сисергә ваҡыт. Беҙ һыуыҡтан арыныҡ, Ҡояш йылыһын һағындыҡ.
**Февраль:** Селлә тунын бер ҡасан да һалмайым, һалмаясаҡмын. Мин Һыуыҡ батшаһы булып ҡалам. У-у, һине лә туңдырам! *(Һыйыр менән һөҙөш-көрәш башлана.)*
**Һыйыр:** Ай, ҡотҡарығыҙ! Һәләк булам!

*Декабрь менән Ғинуар инә.*

**Декабрь:** Туҡта, Шаҡай, саманды бел!
**Ғинуар:** Селлә тунын сис, Февраль!
**Һыйыр:** Ебәр, мөгөҙөмдө харап итәһең.
**Февраль:** Мин - һыуыҡ батшаһы! Мин - Шаҡай.
**Декабрь:** Юҡ, һинең көнөң бөттө.
**Февраль:** Нисек?
**Декабрь:** Иң ҡаты һыуыҡ көнөңдө мин алдым.
**Ғинуар:** Тағы бер көнөң миңә күсә. Үҙең гәйепле.
**Һыйыр:** Рәхмәт, ҡотҡарҙығыҙ!
**Февраль:** Мин бит шундай көслө инем. Тағы саҡ ҡына тырышһам, һыйыр мөгөҙөн һындыра инем, һыуыҡ батшаһы була инем. Эх, һеҙ!
**Һыйыр:** Ҡас! Ана, балалар килә! Улар Ҡояшты көтә!
**Күмәк:**
Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ.
Һалҡын еҙнә, кит, кит!
Ҡояш апай, кил, кил,
Майлы ҡоймаҡ бирермен.

*Күмәк бейеү. Һыйыр менән өс ай ҙа ҡатнаша.*

**Күмәк:**
Ҡояш, сыҡ, сыҡ, сыҡ!
Майлы ҡашыҡ бирермен.
Майлы таба бирермен,
Һимеҙ үгеҙ һуйырмын,
Майын һиңә ҡуйырмын.
Итен үҙем ашармын,
Һөйәген этҡә ташлармын,
Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ!

**Тамам.**

✓ *Эреләрен өсәүләп рәхәтләнеп ашағас, инә айыу ваҡ балыҡтарҙы тәпәйе менән ышырып кире һыуға ебәрә. Унан мурҙаны килештереп кенә кире урынына ҡуя ла, урманға инеп тә китәләр. Атайым менән ағайым хайран булалар.*



ИНТЕРНЕТТАН



# УТТЫ ҺҮНДЕРЕП...

■ Йоҡлаған саҡта мотлаҡ утты һүндереп йоҡлағыҙ, юғиһә, үҙегеҙ ҙә һиҙмәҫтән, тәнегеҙҙең ауырлығы артасаҡ, тип иҫкәртә Огайо университеты ғалимдары. Неврологтар әйтеүенсә, һүрән генә ут яндырып йоҡлау ҙа яйлап хроник депрессияға килтереүе ихтимал. Бәхтиһән, төндәге ут организмдағы матдәләрҙең химик балансына, хатта мейе структураһына йоғонто яһай.

■ Тель-Авив ғалимдары, коллективта хеҙмәткәрҙәр араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәт кешенең ғүмер оҙайлығына тәьҫир итә ала, тип раҫлай. 38-43 йәш арауығындағы хеҙмәткәрҙәр өсөн был бигерәк мөһим. Егерме йыл барған тикшеренеүҙәрҙә страховкалау, коммуналь хеҙмәттәр, һаулыҡ һаҡлау, финанстар өлкәһендә эшләгән 820 кеше ҡатнашҡан. Һөҙөмтәлә, хеҙмәттәштәр менән яҡшы мөнәсәбәт кешенең ғүмерен оҙайтыу һәләтенә эйә икәнлеге асыҡланған. Иң ҡыҙығы, етәксенең хеҙмәткәргә мөнәсәбәте насар булыуы ихтимал, иң мөһиме, социум уға терәк була икән, хеҙмәткәрҙең ҡандағы холестерин күләме лә, артериаль ҡан баҫымы ла, тән индексы массаһы ла нормала була.

■ Компьютер артында оҙаҡ эшләргә тура килһә, иң тәүҙә күҙҙәргә мөмкин тиклем әҙерәк зарар килтереүҙе хәстәрләргә кәрәк. Америка ғалимдары күҙҙәр өсөн иң зыянлыҙ компьютер шрифтын асыҡлаған. Эксперименттар күрһәтеүенсә, иң хәүефһеҙ шрифт тип Verdana асыҡланған. Хәрефтәрҙең иң оптималь варианты тип 10-12 пункт билдәләнгән. Белгестәр әйтеүенсә, Verdana шрифтында хәрефтәр аҫтан һәм өҫтән график штрихтар менән билдәләнмәй, шуға ла күҙҙәр аҙыраҡ арый. Табиптар шулай уҡ мониторға күҙҙәрҙе ҡыҫып ҡарамаҫҡа кәңәш итә.

■ Бөтөн донъя яман шеш тикшеренеүҙәре фонды белгестәре фекеренсә, йәйәү йөрөү яман шеш сирҙәрен булдырмау өсөн файҙалы. Көн һайын 45 минут физик әүҙемлек тә күптәрҙе был сирҙән ҡотҡара алыр ине, тип иҫәпләй табиптар. Медицина статистикаһы күрһәтеүенсә, даими әүҙемлек онкологик сирҙәрҙе булдырмауҙа мөһим урын биләй. Физик әүҙемлек матдәләр алышыныу һәм организмдың таҙарыныу процесын көсәйтә. Яман шештең күп төрҙәре менән тап физик күнекмәләр ярҙамында көрәшергә була, тип белдерә ғалимдар.

■ Британия ғалимдары электрон почта стресс факторы булып тора, тип хәбәр итә. Социологик тикшеренеүҙәр ваҡытында яуап биреүселәрҙең 57 проценты электрон почта йәшниген асҡан һайын стресс кисереүҙәрен белдергән. Бынан тыш, респонденттарҙың 40 проценты килгән хаттарға ваҡытында яуап бирмәһә, ҙур борсолоу кисерә, ә 30 процентына хаттар шул тиклем күп килә һәм улар бөтөнләй яуап биреп өлгөрмәй. Уртаса статистик британлының ике почта йәшнигe бар һәм ул уны көнөнә икеөс тапҡыр асып ҡарарға мәжбүр, ти ғалимдар.

■ Ҡулды йылы һауа ағымында киптергән саҡта тирелә микробтар тупланыуы тағы ла арта, тип белдерә Брэдфорд университеты тикшеренеүселәре. Тикшереү барышында белгестәр ҡулдарҙы йыуғандан һуң ҡоротмау ҙа микробтарҙың артыуына килтереүен асыҡлаған. Шуға ла эксперттар дөйөм ҡулланылыштағы урындарҙа ҡул йыуырға тура килһә, уларҙы бер тапҡыр ҡулланыла торған таҫтамал менән һөртөргә тәҡдим итә.

ШАҢДАУ



**Гәзиттең үткән һандарында Миләүшә Ҡаһармановaның "Тайыштабан тураһында ысынбарлыҡ" тигән мәҡәләһен уҡығас, үҙем шаһит булған, күҙәткән ҡыҙыҡлы һәм ҡыҙғаныс айыу мажаралары иҫкә төштө.**

# АЙЫУ ҠУРҠЫНЫСМЫ, КЕШЕМЕ?



## Балыҡсы ла икән

Атайым менән Зәки ағайым Ҡыҫыҡтау эргәһендә (унда хәҙер Йомағужа һыу һаҡлағысы) Иҙелгә талдан үрелгән мурҙа һалалар. Ике көн рәттән мурҙаларын ҡарайҙар - балыҡ юҡ. Берәйһе урлаймы икән әллә тип аңдыйҙар. Ҡояш сығыуға, урмандан ике балалы айыу килеп сыға. Ул мурҙаны һыуҙан тартып алып, айҙандырып тороп балыҡтарын ҡырсынға түгә. Эреләрен өсәүләп рәхәтләнеп ашағас, инә айыу ваҡ балыҡтарҙы тәпәйе менән ышырып кире һыуға ебәрә. Унан мурҙаны килештереп кенә кире урынына ҡуя ла, урманға инеп тә китәләр. Атайым менән ағайым был хәлдә күҙәтеп тороп, хайран булалар. Ҡайтып һөйләп беҙҙе көлдөрәләр. Унан атайым: "Әйҙә, ашаһындар. Улар ҙа йән эйәләре", - тип икенсе урынға яңы мурҙа һалды.

## Бал ятҡанын беләбеҙ

Ауылыбыҙҙа урыҫы ла, татары ла, мишәре лә булды, дуҫ йәшәнек. Бер көн күрше Алексей бабай килде лә: "Рәхимә, умартамдан йәштәр баллы рамды урлай. Ни эшләргә икән?" - тип әсәйем менән кәңәшләште. Әсәйем һаҡлап ятырға кәңәш бирҙе. Ике көндән теге бабай килде лә, көлә-көлә һөйләй: бәхтиһән, төнөн бер оло айыу килә лә, умартаның ҡапҡасын асып, иплләп кенә рамды һурып алып, ҡапҡасын кире ябып китә икән. Ҡорттарын үлтереү ниәте менәндер инде, рамды Иҙелгә алып барып сайҡатып ала ла, алпан-толпан баҫып, балды ялай-ялай китеп бара, ти. Был хәлде белгәс, Алексей бабай умарталарын өйөнә яҡынырак күсереп ҡуйҙы. Башҡаса уны айыу борсоманы...

## Үәт, башлы!

Йәй көндәре урманда утын әҙерләп, Иҙел буйлап һалда алып ҡайта инек. Бер саҡ төш еткәс яр буйында туҡтап, ашарға йөрөнөк, ҡаршы яҡ яр урманынан айыу елдерен килеп сыҡты ла, "шап-шоп" итеп был яҡҡа йөҙә башланы. Йөҙөп сыҡты ла шырлыҡҡа сапты. Ҡараһаҡ, артынан ҙур ҡара йылан ҡыуа икән. Йыландың ярға сыҡҡанын көтөп тороп, ағайымдар күсәк менән һуғып үлтерҙе. Беҙ йылан менән булған арала айыу килә һалып табаҡтағы итебеҙҙе сәлдереп киткән. Үәт, башлы айыу булды - йыландан да ҡотолдо, ит тә ашаны.

## Шаяра ла белә

Ауыл халҡы Һуҡыр уй тигән ергә тирмәнгә йөрөй. Тирә-яҡта шундай хозур тәбиғәт, ҡара урман, сылтыр шишмәләр, йәм-йәшел болондар. Тирмән юлында өләсәйҙәр йырлашып йөрөргә ҡуша. Кешеләрҙең йырлашып йөрөгәнен айыуҙар ҙа ярата, йәнәһе. Йырлашҡанды ишетһә, айыу ҙа шаярта, йә һайыҫҡан булып шыҡырлай, йә эт булып өрә, йә башҡа өндәр сығара, ти. Һәр хәлдә, минең урманға килдегеҙ тип асыуланмай инде. Халыҡта шулай "айыу менән шаярыу" була торғайны.

## Шәп көрәшсе

Мәрәүешле һырты тигән ерҙә колхозға бесән эшләп ятабыҙ. Йәштәр ҙә, тырмалап йөрөргә беҙҙең кеүек балаға ла бар. Шунда өс көн буйына Мәрәүешле сусҡаһы менән бер айыу бөтә ғәм алдында көрәште. Көн дә бер урында осрашалар ҙа, әләгешә лә китәләр. Сусҡаның ашаған ерелер инде, ә айыу махсус килә кеүек. Малайҙар айыу юлына икмәк, ит, силәк менән һыу ҡоялар. Уға көс өҫтәйҙәр инде. Теге шуларҙы ашап, һыу эсеп китә бит. Өсөнсө көн һуғышҡанда айыу еңеп, сусҡаны күтәреп алып китте. Беҙ "Ура" ҡысҡырҙыҡ. Шуныһы ғәжәп. Ятҡында ғына айыу йөрөгәнгә күбә тартҡан аттар ҙа ҡурмай ине. Беҙ ул айыуға зыян итмәнек, ул - беҙгә. Әгәр шунда берәйһе мылтыҡ күрһәтеп ҡурҡытһа йәки асыуландырһа, ул да, бәлки, яуызланыр ине. Ә былай ул беҙ ҡалдырғанды ашап, ситтән күҙәтеп тик йөрөнө.

## Һаҡсы инеме икән?

Беҙ бала саҡта ололарҙың барыһы ла ҡырҙа эштә йөрөнө, йәйҙәрен ауылда тик бала-саға ғына ҡала инек. Урамда 10 ғына өй, оло урам яғы менән мәктәптең ере бүлеп тора. Янғыҙ ҡарағай тауынан ике балалы айыу төшә лә, урамыбыҙға килә. Ҡапҡа һайын есҡәнеп йөрөп үтә. Беҙ ҡарап торабыҙ. Тикшереп йөрөп үтә лә, кире тауға китә. Оларға һөйләһәк, үсектермәгеҙ, өндәшмәгеҙ, теймәгеҙ, ти ҙә ҡуялар. Хәҙер уйлайым, әллә тик балалар ғына ҡалған ауылды үҙенсә һаҡлап йөрөнө микән? Булыр. Ҡырағай йәнлектәр донъяһы үҙе бер изге донъя бит ул.

## Күк бүреләр

Түбәнге ауылдан беҙҙең ауылға балалар йөрөп уҡыны. Шунда малайҙарға ун ике күк бүре осраған, былар әрем араһында боҫоп ҡалған. Беҙҙең яҡта ундай ҙур күк бүреләр булмаған, ололар сығып тикшергән. Күргәндәр. Ыҫынлап оло кәүҙәле күк бүреләр, берәһе өс аяҡлы ғына, ти. Йәлләгәндәр, теймәгәндәр. Ни сәбәп менәндер ситтән килгәндәрен аңлағандар. Ә, бәлки, һуғыш булған яҡтан да килгәндәрҙер әле, тип, уйлағандар. Хәҙер булһа, мотайын, һунарсылар саҡырта һалырҙар ине...

## Бүре өркөтөү

Бөгөн бүреләр күбәйгән, тибеҙ. Борон улар тағы ла күберәк ине. Көҙөн ауыл менән бүре өркөтөргә сығалар ине. Утлы суҡмарҙар тотоп. Тик мылтыҡ менән түгел. Күмәк кешенең ут менән урман ҡыҙырғанынан бүре ныҕыраҡ өркә, ул тирәгә килмәй оҙаҡ ҡына. Уларҙың хәтере яҡшы була. Атылған ергә бүре үсләшергә килеүсән, тиҙәр ине. Быны бит, кеше тәбиғәткә ҡарата ҡайһылай мәрхәмәтле булған.

## Еңмеш һыйыр

Һалмаш тигән ерҙә еҙнәм утарҙа ҡарауылсы булып итте. Шунда йәшәнеләр, мал көттөләр. Бер кис эргәләренән айыу үтеп барған. Кәртәлә торған һыйыр уны күргән дә, сабып барып төкөгән. Айыу уны сәпәп ебәргән. Юҡ, һыйыр ҡуймай икән. Сабып бара ла һөҙә, бара ла һөҙә, ти. Ахырҙа, айыу уның муйынын бороп, өҫтөнә ағас баҫырып һалып киткән. Шаһит булғандар һыйырҙың аңһыҙ ҡыйыулығына аптырап, күҙәтеп торған. Хатта еҙнәм дә: "Үҙе ғәйепле, аҡылы булһа, айыуға бәйләнмәҫ ине", - тип кенә ҡуйҙы. Апайымдар беҙҙең һөтлө кәзәне һауып эсеп торҙо аҙаҡ.

## Ҡушаматы…

Ауылда танылған һунарсылар икәү ине. Бүре-төлкөнө Ғибат бабай, айыуҙы Шәрәф ағай ауланы. Ғибат бабай бүрене етәкләп алып ҡайта, аҙна буйы ашата, шунан ғына һарайҙа быуып-тунап ала, тип һөйләйҙәр ине. Шәрәф ағай айыуҙы ҡышҡы өндә ала. Тиреһен өй ҡыйығы сөйөнә элеп ҡуя, уныһы ергә тиклем төшөп тора. Итен бөтә ауылға тараталар. Һурпаһы файҙалы тип эсә инек. Айыусы булған өсөн уның үҙен дә "Айыу Шәрәф" тип йөрөттөләр. Шәрәф ағай айыу тураһында күп мәҙәктәр, ғибрәттәр белә һәм һөйләй ине. Һәм һәр ваҡыт айыуҙы хөрмәт менән телгә алды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мин был ваҡиғаларҙы бөгөнгө көн, бөгөнгө әҙәм ҡылығы менән сағыштырып ҡарау өсөн яҙҙым. Хәҙер берәй ауыл тирәһендә айыу йә бүре күренһен, шундуҡ һунарсы саҡырталар, уларҙы юҡ итеү сараһын күрә башлайҙар. Күп осраҡта ул януарҙарҙан зыян да юҡ бит. Улар ҡайһы саҡта беҙ аңлаған (аҙыҡ артынандыр инде) һәм аңламаған сәбәптәр арҡаһында кешеләр йәшәгән урындарға ла яҡынаялар. Ә беҙ уларҙы асыу-агрессия менән ҡаршы алабыҙ, кешеләрҙә, элекке кеүек, тәбиғәт менән берҙәмлек, тәбиғәт донъяһы ҡанундарын аңлау тигән нәмә юҡҡа сыға бара. Шулай түгелме ни?**

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.
Әбйәлил районы.

✓ *"Әҙәм балаһы өсөн иң ауыры - насар уй, көнләшеү һәм шомланыуҙыр. Һеҙгә уларҙан сығыу юлын өйрәтәм: насар уйҙа икәнһегеҙ - уны бойомға ашырмағыҙ, көнләшәһегеҙ - ҡанығыҙҙы ҡайнатмағыҙ, шомланһағыҙ - уны үткәреп ебәрегеҙ".*



ҒАИЛӘ ҺАБАҠТАРЫ

# ҺӘР ХЫЯНАТ ХЫЯНАТМЫ,

## йәки сафлыҡты таныр өсөн хаслыҡты белеү яҡшыраҡ түгелме?

**Гәзиттең бер һанында Психолог менән Ҡатындың ирҙәр хыянаты тураһындағы диалогы баҫылғайны. Ҡатын ролендә сығыш яһаусы үҙен борсолоуҙар менән йәшәргә мәжбүр иткән хәлдәрҙе мөмкин тиклем йәшермәй әйтә, күңелен асып бирә алһа, Психолог бар йәһәттән уны тынысландырырға тырыша, тормоштағы ысынбарлыҡты нисек бар, шул килеш ҡабул итергә өндәй. Бик хуп. Киләсәктә лә ошондай йүнәлештәге асыҡтан-асыҡ һөйләшеүҙәр дауам итер тип ышанып, әңгәмәне уҡығандан һуң тыуған ҡайһы бер фекерҙәремде яҙып китмәксемен.**



### Күңелең ни ти һуң?

Ҡатын менән Психолог араһында барған әңгәмәнең юл аҫтындағы фекере, әйтелмәгән өлөшө, минеңсә, ир-ат хыянаты. Һөйләшеүҙә был хаҡта ишара ғына бар, әммә уларҙы ошондай асыҡтан-асыҡ әңгәмә ҡорорға мәжбүр иткән сәбәп шулдыр. Ҡатын барыбер ҙә эстән генә "Ирем миңә башҡа кеше менән хыянат итә, шуға күрә ваҡытында өйгә ҡайтмай", тип шикләнә һәм шул шиген Психологҡа башҡа һүҙҙәр менән аңлатырға, ысын шиген йәшерергә маташа. Ислам дине буйынса бары тик дүрт кешенең шаһитлығында ғына иҫбат ителгән ғәйеп "хыянат" тип атала. Тимәк, әгәр ҙә кемдеңдер үҙенә ҡарата хыянатын раҫлауҙа һинең дүрт шаһитың юҡ икән, тик шикләнеүең арҡаһында ғына уны хыянатта ғәйепләйһең икән, үҙең үк гонаһҡа батаһың булып сыға. Тимәк, әгәр ҙә әлеге Ҡатын ваҡытында йорт асҡысын килтереп еткермәгәне өсөн генә ирен үҙен яратыу-яратмауҙа ғәйепләй икән, тимәк, ул уны ғәйепһеҙгә рәнйетә, тип кенә баһалап булалыр.

Икенсенән, хатта ки Ҡатындың иренең үҙенә хыянат итеүе хаҡында дүрт шаһиты булған хәлдә лә, был, ысынлап та, хыянатмы һуң? Минеңсә, һәр бер хыянат - хыянат түгел. Ни өсөн тигәндә, бары тик сит ҡатындарҙың наҙын татып ҡарағандан һуң ғына үҙ ҡатынымды ысынлап яратырға өйрәндем, тип әйтеүсе ирҙәрҙе күп осратҡаным бар. Сафлыҡты таныр өсөн - хаслыҡты белеү, бөйөклөктө күрер өсөн түбәнлекте тойоу фарыҙ, тигән аңлау ҙа бар.

Минеңсә, ысын хыянат - ул күңелең менән хыянат итеү, хатта ки енси яҡынлыҡ булып та, ундай мөнәсәбәткә инеүсе кеше менән күңел уртаҡлығың булмаһа, был хыянат түгел, бары хәшәрәтлек һәм хаслыҡ ҡылыныр. Шул уҡ ваҡытта, енси яҡынлығың булмаһа ла, күңелең менән икенсе кешегә бирелеү - был хыянаттың хыянатылыр. Кем нисек уйлайҙыр, минеңсә, ысын хыянат - күңел хыянаты...

### Хаслыҡ

Әҙәм менән Һауа алманы өҙгәне, йәғни тыйылған гәмәлде башҡарғаны өсөн Аллаһы Тәғәлә уларҙы Ергә һөрә. Кем белә, бәлки, шуның өсөн дә ул емеште алма (йәғни, ҡағылма, теймә) тип атағандарҙыр. Ергә һөргөнгә китеүселәрҙең артынан Иблисте лә өйәртеп ебәрә Аллаһы Тәғәлә. Юҡҡа ғына түгел: уларҙы һәр ваҡыт ғибрәт һәм хаслыҡ менән һынар, аҙып китмәһендәр өсөн иҫкәртеп тороу маҡсатында шулай итә. Ошоларҙан сығып ҡарағанда, Әҙәм балаһының Аллаһы Тәғәләне, дөрөҫ йәшәү ҡанундарын онотоп, тыйылған алмаға үрелә башлауын хаслыҡ һәм хәшәрәтлек ҡылыу тип тә аңлатып була бит.

Тимәк, хөрмәтле Ҡатын, ирегеҙҙең Иблис шауҡымына бирелеп, хайуан инстинктына бәрәбәр хаслығын һәм хәшәрәтлеген һеҙҙең менән уртаҡлашмайынса, икенсе бер ҡатын менән бүлешеүен һеҙҙе бының менән бысратырға теләмәүе тип баһалағыҙ. Ирегеҙ был хаҡта уйламаһа ла, бындай аңлау уның ҡанында һәм түбәнге аңында йәшәй тип аңларға кәрәк. Ул бит ошо юл менән һеҙҙе һаҡлай ғына. Ул үҙенең сафлығын һеҙгә генә биргән, хаслығын ғына башҡаларға өләшә. Ошо күҙлектән ҡарағанда, һәр бер хыянат хыянатмы икән? Ирегеҙҙең был осраҡта Иблискә илтифат итеүе, иң тәүҙә, Аллаһы Тәғәлә алдында хыянат итеүе ул. Һеҙ был осраҡта бары ошо хыянаттың һөҙөмтәһен генә күрәһегеҙ. Шулай түгелме ни?

### Дөрөҫ аңлатма

Беҙ күп осраҡта хыянат ише хәлдәргә тарыйбыҙ ҙа, тормошобоҙ емерелде, яҙмышыбыҙ селпәрәмә килде, барыһы ла бөттө, тип күңел төшөнкөлөгөнә бирелергә әҙер генә торабыҙ. Ошондай ауыр саҡтарҙа Ҡөрьән сүрәләрен, хәҙистәрҙе уҡырға тәҡдим итер инем. "Әҙәм балаһы өсөн иң ауыры - насар уй, көнләшеү һәм шомланыуҙыр. Һеҙгә уларҙан сығыу юлын өйрәтәм: насар уйҙа икәнһегеҙ - уны бойомға ашырмағыҙ, көнләшәһегеҙ икән - ҡанығыҙҙы ҡайнатмағыҙ, шомланаһағыҙ икән - уны үткәреп ебәрегеҙ" тип әйтелә бер хәҙистә. Минеңсә, ошонда ғына ла юғарыла килтерелгән барлыҡ дәлилдәргә етди ишара бар. Иң мөһиме, күңеленә Иблис ултыртҡан шигеңде үрсетмәҫкә генә кәрәктер. Икенсенән, бар нәмә теге йәки был хәлгә, ваҡиғаға дөрөҫ итеп аңлатма, баһа биреүҙән дә тора бит. Хатта ки, ирегеҙҙең йәки ҡатынығыҙҙың һеҙгә хыянаты уның күңел кимәлендә булһа ла, быны хыянат тип баһаламаҫҡа мөмкин. Нисек итепме? Ошолай уйлап:

- уның сафлығы барыбер миндә, ярай әле хаслығын башҡаға бирә;
- тойғоһо - миндә, хайуан инстинкты, хәшәрәтлеге - башҡала;
- ул минең ҡәҙеремде башҡанан ҡәҙерһеҙлек, хаслыҡ, золом тойғас ҡына аңлаясаҡ;
- дүрт яғы ҡибла, ул миңә түгел, үҙ-үҙенә хыянат итте, Аллаһы Тәғәлә алдында гонаһ ҡылды;
- мин уны юғалтманым, ул үҙе мине юғалтты һ.б.

**Хөрмәт ИБРАҺИМОВ.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ҺҮҘЕҢ - ҮҘЕҢӘ,

## үҙең һүҙеңә килешһә...

Тоғролоҡ - һүҙҙәребеҙҙә, эштәребеҙҙә һәм хәрәкәттәребеҙҙә дөрөҫ булыу, тигәнде аңлаталыр. Тоғро кеше ялған һөйләмәҫ, бер кемде лә алдамаҫ, башҡаларға ҡарата хәйлә ҡормаҫ. Тоғролоҡто Алла мосолмандары тоғро ҡылған. Бик күп аят һәм хәҙистәрҙә тоғролоҡтоң әһәмиәте аңлатылған. Ҡөрьәндә былай тиелә: "Әй, мөьминдәр, Алланан ҡурҡығыҙ һәм тоғролар менән бергә булығыҙ".

Мосолман - һүҙе үҙенә, үҙе һүҙенә килешкән кешелер. Мосолман күренгән кеүек булыр, булғаны кеүек күренер. Мосолман ҡулы һәм теле менән башҡаларға зарар итмәҫ. Үҙе өсөн теләгән нәмәне мосолман ҡәрҙәше өсөн дә теләр. Мосолман хәләл малына һәм асҡысына хөрмәт ҡатыштырмаҫ. Ғаиләһенә һәм балаларына харам ризыҡ ашатмаҫ. Бәйғәмбәребеҙ бер хәҙисендә былай тиғән: "Мосолманға зарар иткән һәм уны алдаған кеше беҙҙеке түгел".

Ҡөрьәндә былай тиелә: "Кәметеп үлсәй торған үлсәү ҡулланғандарға ҡаты ғазап барҙыр. Улар кешеләрҙән һатып алғанда теүәл иттереп үлсәтеп алыр, ләкин һатҡанда кәм үлсәп һатыр". Кеше белмәҫ, һиҙмәҫ, тип, бындай эштәрҙе эшләргә һис ярамай. Сөнки эшләгән эштәребеҙҙе Алла һәр ваҡыт күреп тора. Кирамән Кәтибин фәрештәләре гонаһ һәм сауаптарыбыҙҙы яҙып бара. Кешеләрҙе алдаһаҡ та, Алланы алдау мөмкин түгеллекте иҫтән сығарырға ярамай.

Ысын һәм эскерһеҙ мосолман үҙенең тоғролоғо һәм эскерһеҙлеге менән айырылып тора. Ул кешеләр менән аралашҡанда төрлө ауырлыҡтар һәм уңайһыҙлыҡтар менән осрашыуға ҡарамаҫтан, хәйләләмәй, аңлашылмаған һәм ялған һүҙҙәр һөйләмәй.

Йөрәгенә Ислам тәрбиәһе һеңгән ысын мосолман үҙ вазифаһына тоғролоҡло һәм биргән вәғәҙәләрен үтәүсе була. Был сифаттар уның йәмғиәттәге урынын билдәләүсе иң мөһим үҙенсәлек булып тора. Был үҙенсәлек уны тағы ла дәрәжәлерәк итә. Бындай сифатҡа эйә булыу мосолмандың хаҡ динле булыуын күрһәтә.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

### Оҙаҡ йәшәү ҡанундары

2010 йылда Б.Б. Надеждин инглиз теленән "Нисек йәш булып ҡалырға" тип аталған трактатҡа тупланған 10 мөһим ҡанунды тәржемә итә.

**Мөһим булмаған һандарҙы иғтибарға алма.** Уларға йәш, ауырлыҡ һәм буй инә. Әйҙә, был хаҡта докторҙар борсолһон. Һин уларға шуның өсөн түләйһең.

**Шат дуҫтар йый.** Шатлана белмәүселәр һине асыуландыра ғына.

**Ғүмер буйы белем эстә.** Компьютерҙар, самолеттар, баҡсасылыҡ һ.б. тураһында күберәк белергә тырыш. Бер ваҡытта ла мейеңә эшһеҙ тороу мөмкинлеген бирмә. "Буш аҡыл - шайтан гәмәле" икәнлеген онотма. Был шайтандың исеме - Альцгеймер.

**Ябай ғына нәмәләрҙән дә ҡәнәғәтлек ал.**

**Йыш, оҙаҡ һәм ҡысҡырып көл.** Тын алыуы ауырлаша башлағансы көл.

**Асыуың ҡабарыр.** Түҙ, көй һәм алға атла. Ғүмер буйы һинең менән булған бер генә кеше бар - ул һин үҙең. Тере сағыңда йәшәп ҡал.

**Үҙеңде яратҡан нәмәләрең менән уратып ал.** Ғаиләң булһынмы ул, йорт хайуандарымы, иҫтәлекле бүләктәрме, музыкамы, үҫемлектәрме, йорт буйынса яратҡан эшме һ.б. Һинең йортоң - һинең ҡәлғәң.

**Сәләмәтлегеңә хәстәрлекле бул.** Ул яҡшы икән, һаҡла. Бигүк шәптән булмаһа - яҡшырт. Әгәр яҡшыртыу сигенән сыҡҡан икән - ярҙам һорап мөрәжәғәт ит.

**Үҙеңде ғәйепле тойған урындарға йөрөмә.** Киреһенсә, хатта өйөңдән алыҫ булһа ла аллея буйлап йөрө, сит илгә сығып кил. Әммә бер ҡасан да үҙеңде ғәйепле тойған ергә барма.

**Уңайы сыҡҡан һайын кешеләргә уларҙы яратыуыңды белдер.** Һәм һәр саҡ иҫеңдә тот: тормош беҙ һулаған һауа иҫәбе менән иҫәпләнмәй, ул беҙҙең һоҡланыуҙан тын ала алмай ҡалған мәлдәребеҙ менән иҫәпләнә.

**Йәшегеҙҙе ҡабул итегеҙ.** Үлемдән ҡурҡыу йәмғиәттә киң таралған. Танатофобияның сәбәбе лә билдәле: тере йәндә йәшәү теләге шул тиклем көслө, хатта аң бер көн килеп үлергә тейешлекте ҡабул итергә теләмәй. Икенсе социаль ҡурҡыу - геронтофобия, йәғни ҡартлыҡтан ҡурҡыу. Халыҡтың бер өлөшө ҡартлыҡты ауыр ҡабул итә, хатта ололарҙы яратмай, сөнки улар һәр ҡайһыбыҙың киләсәген иҫкәртеп тора.

Күпселек ҡартлыҡҡа лайыҡлы, яңы тормош ритмына көйләнеп, йәмғиәттең ихтирамын һаҡлап инә.

Нисек итеп ҡартлыҡтан ҡурҡмаҫҡа, исмаһам, уның мотлаҡ килеүе менән килешергә? Бары тик һуңғы һулыштарынаса айыҡ аҡыл һәм тормош активлығын һаҡлап ҡалған һәм оҙон ғүмерле булыуҙары рәсми рәүештә теркәлгән кешеләр кеүек үк тулы ҡанлы һәм ҡәнәғәтлек алып йәшәргә генә кәрәк.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



### 9 ДЕКАБРЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 2.05, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.25 Т/с Премьера. "Тест на беременность". Новый сезон. [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Познер. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Тайны следствия-19". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Личное дело". [16+]
03.50 Т/с "По горячим следам". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм.**
**9.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Метод Фрейда-2". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.[12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Ради добра. [6+]**
**18.15, 20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**21.00 Бизнес-обзор. [12+]**
**21.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.30 Күстәнәс. [12+]**
**0.00 Х/ф "Клоуны". Новости (на баш. яз.). [12+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Цыпленок из букваря". [12+]**
**4.45 Д/ф "Величие простоты". [12+]**
**5.15 Орнамент. [6+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**

### 10 ДЕКАБРЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 2.05, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.30 Т/с Премьера. "Тест на беременность". Новый сезон. [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
23.55 Премьера. "Право на справедливость". [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Тайны следствия-19". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Личное дело". [16+]
03.50 Т/с "По горячим следам". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**9.00, 11.45, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Метод Фрейда-2". [16+]**
**11.00 Послание Главы Республики Башкортостан Р.Ф. Хабирова Государственному Собранию - Курултаю Республики Башкортостан**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Тайм-аут. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.45 Полезные новости. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 "Детей много не бывает". [0+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Рудольф Нуриев. Рудик". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Счастье с неба". [12+]**
**4.15 Йөрәк һүҙе. [12+]**
**4.30 Ете егет. [12+]**
**5.15 Орнамент. [6+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**

### 11 ДЕКАБРЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 2.05, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.25 Т/с Премьера. "Тест на беременность". Новый сезон. [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Д/ф Премьера. "Борис Щербаков. Мужчина особого обаяния". [12+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Тайны следствия-19". [16+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Личное дело". [16+]
03.50 Т/с "По горячим следам". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Метод Фрейда-2". [16+]**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.[12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бала-саға. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Ты можешь! [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00, 6.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**23.45 Земляки. [12+]**
**0.00 Х/ф "Трудно быть Мачо". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Любишь - не любишь?" [12+]**
**4.45 Д/ф "Ни с кем не сравнимая". [12+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**

### 12 ДЕКАБРЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 2.20, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.25 Т/с Премьера. "Тест на беременность". Новый сезон. [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Кубок Первого канала по хоккею-2019. Сборная России - сборная Швеции. [0+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Тайны следствия-19". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Личное дело". [16+]
03.50 Т/с "По горячим следам". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Метод Фрейда-2". [16+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.[12+]**
**14.30 Земляки. [12+]**
**14.45 Ради добра. [6+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Юристы-2019. Альма-матер-70. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 Республика Live. #Дома. [12+]**
**23.00 "Песня года". [12+]**
**23.30 Д/ф "Шумят дубравы". [12+]**
**0.15 Х/ф "Убийство в дачный сезон". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Дальше тишина..." [12+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**

### 13 ДЕКАБРЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.20 Д/ф Премьера. "Дэвид Боуи: На пути к славе". [16+]
2.10 На самом деле. [16+]
3.10 Про любовь. [16+]
3.55 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 "Юморина". [16+]
23.50 Торжественная церемония вручения Российской национальной музыкальной премии "Виктория".
02.00 Х/ф "Чёрная метка". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/ф "Выбор доктора Гааза". [12+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00, 22.00 Точка Z. [12+]**
**12.30, 21.00 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 Йөрәк һүҙе. [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью.[12+]**
**15.15 Алтын тирмә. [0+]**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 "Детей много не бывает". [0+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры" представляет... [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Квартирник. [12+]**
**0.15 Х/ф "Охотники за облаками". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.30 Спектакль "Одолжи мне жеребца". [12+]**
**4.30 100 имен Башкортостана. [12+]**
**5.00 Х/ф "Охотники за облаками". [16+]**

### 14 ДЕКАБРЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.05 Премьера. "Открытие Китая" с Евгением Колесовым. [12+]
11.10 Д/с "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 Д/ф "Геннадий Хазанов. Без антракта". [16+]
14.30 Д/с "Романовы". [12+]
15.25 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
16.55 Кубок Первого канала по хоккею-2019. Сборная России - сборная Чехии. Прямой эфир.
19.25, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
23.30 Х/ф Премьера. "Лучше дома места нет". [16+]
1.30 Х/ф "Давай займемся любовью". [12+]
3.45 Про любовь. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00 Утро России. Суббота.
08.15 По секрету всему свету.
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
09.20 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
13.50 Х/ф "Хочу быть счастливой". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Моя идеальная мама". [12+]
01.00 Х/ф "Фродя". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.45, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.00, 11.00, 14.00, 15.00 День башкирского языка. Телемарафон.**
**12.00 Азбука. [0+]**
**12.15 Х/ф "Тел асҡысы".**
**12.45 "Дарю песню". [12+]**
**16.30, 19.00 "Йөрәк һүҙе-2019". [12+]**
**20.45 Вопрос+Ответ=Портрет. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.00 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры" представляет... [12+]**
**0.00 Х/ф "Соврешь - умрешь". [16+]**
**2.45 Спектакль "Салават". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.45 Д/ф "Выбор доктора Гааза". [12+]**

### 15 ДЕКАБРЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Х/ф "Три дня до весны". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 Часовой. [12+]
8.15 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.20 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Д/с "Романовы". [12+]
15.00 Премьера. "Три аккорда". Большой праздничный концерт. [16+]
17.55 Кубок Первого канала по хоккею-2019. Сборная России - сборная Финляндии. Прямой эфир.
20.25 Время.
21.10 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр. [16+]
22.20 Большая игра. [16+]
0.05 Х/ф "Одаренная". [12+]
2.00 Про любовь. [16+]
2.45 Наедине со всеми. [16+]
4.25 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1

04.35 Сам себе режиссёр.
05.15, 01.30 Х/ф "Не в парнях счастье". [12+]
07.20 Семейные каникулы.
07.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.00 Утренняя почта.
08.40 Местное время. Воскресенье.
09.20 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 "Смеяться разрешается".
14.00 Х/ф "Сердечные раны". [12+]
18.20 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Йөрәк һүҙе. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТек?!" [6+]**
**10.30 "Детей много не бывает". [0+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 Гора новостей. [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Юбилейный вечер, посвященный 75-летию БРГИ им. Р.Гарипова. [12+]**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15 Ты можешь! [12+]**
**19.45 Әлләсе... [12+]**
**20.30 Теге өсәү! [12+]**
**21.00, 22.30 Республика Live. #Дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**22.45 "Красная кнопка". [16+]**
**23.30 "Байык" представляет... [12+]**
**0.30 Х/ф "Это случилось на лестнице". [16+]**
**2.00 Спектакль "Касатка". [12+]**
**4.00 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.00 Д/ф "Поет Геннадий Родионов". [12+]**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# "БАЙЫҠ" КОНКУРСЫ БАҺАЛАМА АҒЗАЛАРЫ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**48-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Бәхет. Сәйетов. Хисамова. Әнис. Мәсет. Клуб. Әлифба. Ураҙ. Ирекмән. Герб. Трал. Нужа. Ләмәҙе. Барби. Етер. Кама. Йүкә. Әрме. Кәмә.

**Вертикаль буйынса:** Маликова. Хөсәйенов. Тирмәнсе. Сама. Терһәк. Мәке. Әрйә. Абруй. Урт. Үтек. Аҡбур. Раёк. Тромб. Әҙәм. Әхмәҙуллина. Гамак. Скиф. Буранбаева.

КӨНАУАЗ

# ШАУЛАЙ-ГӨРЛӘЙ ЙӘРМИНКӘЛӘР



**(Башы 5-се биттә).**

Шулай уҡ республикала яңы индустриаль парктар төҙөү ауыл хужалығы продукцияһын етештереүселәрҙең хәлен еңеләйтеүҙе маҡсат итеп ҡуя ла инде. Әлеге ваҡытта шундай 10 парк бар, Благовещендағы һәм Нефтекамалағыһы проектлау стадияһында. Быларға өҫтәп, тағы ла Салауат районында, федераль трассаға яҡын булған Ишембай ауылы эргәһендә лә майҙансыҡтар төҙөү планлаштырыла. Бындай парктарҙа ауыл хужалығы продукцияһын һаҡлау, беренсел эшкәртеү, ҡабул итеү, ҡаптарға тултырыу һәм һатыу өсөн шарттар булдырыла. 10 мең тонна һыйҙырышлы йәшелсә һаҡлағыс буласаҡ, шулай уҡ башҡа талап ителгән биналар төҙөү күҙаллана. Бынан тыш, резидент, йәғни фермер, кооператив вәкиле парк территорияһында ер участкаһы алып, үҙенә кәрәкле объект төҙөй ала. Барлыҡ биналар һәм инвестиция майҙансыҡтар эшләү өсөн талап ителгән инфраструктура менән тәьмин ителәсәк. Резиденттарға бары тик ҡорамалдар ҡуйырға, производство башларға, эшмәкәрлек алып барырға һәм ер өсөн ҡуртым хаҡын түләргә генә кәрәк. Барыһы ла шулай ҡағыҙҙа яҙылғанса ыңғай ғына барһа, ауыл хужалығы етештереүселәренең хыялы тормошҡа ашасаҡ! Был предприятиеға ауылдарҙан йөрөп йәки ауыл халҡы үҙе артыҡ продукцияһын килтереп тапшырып, аҡсаһын алһа, ә ошонда тупланған продукция йәйләп ҡалаларҙа үткәрелгән йәрминкәләргә сығарылып һатылһа - тағы ла шәберәк буласаҡ. Ә инде әгәр ауыл кешеһе үҙе килеп һатып торорға мәжбүр булһа, был уның өсөн бигүк ҡулай түгел. Ул барлыҡ сығымдарын иҫәпләп ҡарай ҙа, алыпһатарҙарға биреп ебәреү отошлораҡ, тип, малын, баҡсаһында үҫтереп алған йәшелсә-емешен тоттора ла ебәрә.

Эйе, ауылдарҙа эш юҡ, тип зарланыусыларға, әйҙә, мал ҡарап, баҡса үҫтереп һатып аҡса эшләп тик ят, тиергә лә мөмкин булыр ине. Ләкин ул үҫтергән мал-тыуарыңды, йәшелсә-емешеңде осһоҙ ғына хаҡҡа һатып ебәреүе лә файҙаға түгел бит әле. Уйлап ҡараһаң, бер эре малды үҫтереп, унан 40-50 мең килем алыу өсөн ике йыл ваҡыт кәрәк. Тимәк, ауыл халҡына үҙе етештергән продукцияны һатыу өсөн бөтөн шарттар тыуҙырылыуы тураһында яҙылған документтар, ҡағыҙҙар ғәмәлдә эшләргә тейеш. Ә халыҡ үҙе был турала ни уйлай?

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Декабрь (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 9 (12) дүшәмбе | 7:59 | 9:29 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 10 (13) шишәмбе | 8:00 | 9:30 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 11 (14) шаршамбы | 8:01 | 9:31 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 12 (15) кесе йома | 8:02 | 9:32 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 13 (16) йома | 8:03 | 9:33 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 14 (17) шәмбе | 8:04 | 9:34 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 15 (18) йәкшәмбе | 8:05 | 9:35 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**12 декабрь "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), драма. 18.00. 16+

**13 декабрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Калдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+

**14 декабрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 18.00 12+

**15 декабрь "Мин һинең кәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**14 декабрь "Башҡорт туйы"** (М. Буранғолов, әҙәби яҡтан эшкәртеү З. Бураҡаева), романтик драма. 12.00 12+

**15 декабрь "Я считаю до пяти"** (М. Бартенев), әкиәт. 12.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**14 декабрь "Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен), спектакль башҡорт телендә. 12.00 0+

**"Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен) 14.00, 16. 0+

**15 декабрь Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен) 12.00, 14.00, 16.00 0+

*Һинең нимә һөйләгәнең, айырыуса икенсе бер кеше тураһында нимәләр әйткәнең үҙең хаҡында ла бик күпте һөйләй.*

*(Поль Валери).*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ӨЛГӨЛӨ ҒАИЛӘЛӘР...

## ошолай була



**(Башы 1-се биттә).**

"Йәш ғаилә-2019" ҡала конкурсы ҡатнашыусы ғаиләләрҙең үҙҙәре менән таныштырыу ниәтендә ҡыҫҡа ғына видеояҙмалар күрһәтеү менән башланып китте. Калинин районынан Альбина һәм Илназ Вальтиндар ғаиләһендә Илдар менән Асҡар исемле ике шуҡ малай үҫеп килә, ә бына Дим районынан Инна һәм Айрат Ғабдрахмановтар Мира менән Риана исемле һылыу ҡыҙҙар тәрбиәләй. Совет районы намыҫын яҡлау хоҡуғы алған Ливиза һәм Наил Нәбиуллиндар балаларға туған телдәренә һәм мәҙәниәтенә ҡарата һөйөү тәрбиәләп үҫтереүҙең мөһимлеген аңлаған ғаилә һәм улар Азалия, Сәлим һәм Әмилә өсөн иң яҡшы атай-әсәй. Орджоникидзе районынан Евгения һәм Игорь Лоплаухиндар ғаиләһендә ике бала үҫә: улдары Илназ һигеҙенсе синыфта уҡый, ә ҡыҙҙары Злата мәктәп йәшенә етмәгән әле. Ленин районынан Эллина һәм Варис Тимерхановтар Самира менән Азалия исемле ҡыҙҙар, ә Октябрь районынан Лилиә һәм Илшат Хайбрахмановтар Аделина менән Арина исемле һылыуҙар үҫтерә. Киров районынан Маргарита һәм Рәмис Шафиҡовтар ғаиләһендә Дарина менән Тамерлан исемле сәнғәт һәм спорт һөйөүсе балалар тәрбиәләнә. Видеояҙмаларҙа һәр ғаиләнең тарихы һәм замандаш йәштәрҙең донъя ҡороуға, балалар тәрбиәләүгә, киләсәктәрен нисек итеп күҙаллауҙарына ҡарата булған ҡараштары ла асыҡ сағылды. Мәҫәлән, Ливиза һәм Наил Нәбиуллиндар был ярышҡа үҙ тиҫтерҙәренә ғаилә ҡороп йәшәүҙең ыңғай яҡтарын күрһәтеү һәм үҙ милләтеңдең һанын арттырыу мөһимлеген аңлатыу маҡсаты менән килгән. "Беҙҙең кейемдәрҙә девизыбыҙ яҙылған: "Тормошта иң мөһиме - ғаилә!" Йәштәр яңғыҙ йәшәмәһен, ғаилә ҡороп, илебеҙгә күберәк аҡыллы, иманлы, көслө рухлы балалар үҫтереп, ныҡлы нигеҙ төҙөһөндәр. Балалар тәрбиәһендә, иң мөһиме, атай-әсәй үҙе яҡшы өлгө күрһәтергә тейеш. Шуға татыу, сәләмәт һәм актив тормош алып барырға, туғандар менән аралашып йәшәргә кәрәк", - тигән фекерҙә Нәбиуллиндарҙың ғаилә башлығы. Әйткәндәй, уларҙың балалары баш ҡаланың 166-сы Башҡорт балалар баҡсаһына йөрөй һәм туған телендә матур һөйләшә, йырбейеүгә маһирҙар.

Конкурстың икенсе өлөшөндә ғаиләләргә "Квиз, плиз!" тип аталған үҙенсәлекле уйын тәкдим ителде. Улар ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә төрлө өлкәләрҙән алынған викторина һорауҙарына яуап бирҙе. Интернет селтәрҙәре аша танылыу яулаған блогер, дауаханала ҡайһы бармаҡтан ҡан алалар, Америка фильмдарының популяр геройҙары һәм артистары кеүек темаларҙан тыш, Башҡортостанға ҡағылышлылары ла яңғыраны. Бында күберәк атай-әсәйҙәр тырышлыҡ һалһа, балалар конкурстың һуңғы һынауы - "Өфө ун йыл үткәс" тигән һүрәт төшөрөүҙә әүҙемлек күрһәтте. Бөтә ғаиләләре менән бергәләп баш ҡалабыҙҙың һәм үҙҙәренең дә киләсәген һүрәтләне конкурсанттар.

Бына ошо тәү ҡарамаҡҡа ябай тойолған, әммә ижади ҡараш талап иткән һынауҙарҙы үтеп, Өфөнөң Дим районынан Шафиҡовтар ғаиләһе еңеү яуланы. Бөтә ғаиләләрҙе лә баш ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин һәм үҙенең исеменән уның урынбаҫары Рөстәм Ғәзизов тәбрикләне һәм рәхмәт хаттары менән бергә ҡиммәтле бүләктәр тапшырҙы. "Беҙ һигеҙ йыл бергә, һәм бәхетле ғаилә нигеҙендә сабырлыҡ, хеҙмәт, аңлашып йәшәү һәм бер-береңә терәк-таяныс булыу ята, тип иҫәпләйбеҙ, - тине әңгәмәләшкәндә Рәмис Шафиҡов. - Эш беҙҙең ғаиләлә бик мөһим урын алып тора: ҡатыным Маргарита Башҡорт Опера һәм балет театры балеринаһы, бик йыш ҡына гастролдәрҙә йөрөй, ә мин һөнәрем буйынса проектлаусы инженер булып эшләйем. Ҡыҙыбыҙ Дарина ла ике йәш ярым сағынан алып балет менән шөғөлләнә, әсәһе менән "Анюта" спектаклендә бейей. Улыбыҙ Тамерлан каратэға йөрөй, һүрәт төшөрөргә, конструкторҙар төҙөргә, компьютер уйындарын ярата. Ә беҙҙе актив ял итеү төрҙәренә һөйөү берләштерә: ҡышын сана-саңғыла, йәйен велосипедтарҙа йөрөргә яратабыҙ".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Йәш ғаилә-2019" конкурсы барышында балаларының киләсәген хәстәрләп йәшәгән маҡсатлы Өфө атай-әсәйҙәренә икенсе күҙлектән баҡтыҡ. Иңдәренә ҙур яуаплылыҡ алып икешәр-өсәр бала тәрбиәләгән, карьера һәм ғаилә араһында алтын урталыҡты һаҡлап ҡалырға ынтылған, еңел булмаған ҡала шарттарында үҙ урындарын тапҡан һәм тырышып донъя көткән йәштәребеҙгә ошо йөктө тартырға ярҙам итер саралар ҙа күрелергә тейешлеге көн кеүек асыҡ. Сөнки беҙҙең бөгөнгөбөҙ һәм киләсәгебеҙ улар ҡулында.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

# БИШ БЕШЕРЕМ,

## балдый...

Һеркәһе һыу күтәрмәй, тиҙ генә үсегеп барыусы кеше хаҡында беҙҙең ауылда "ауыҙы биш бешерем" тиҙәр. Өҫтәүенә ундай кеше иркә һәм башҡаларға һалынырға ератһа, "балдый ул" тип тә өҫтәп ебәрәләр. "Ауыҙы биш бешерем" тигәне еңел аңлашыла. Үсеккән кеше турһайған саҡта үҙ-үҙен ҡулға ала алмаһа, ул, ғәҙәттә, үсегеүе бөткәнсе ирендәрен бүлтәйтеп йөрөй. Бында "биш" һаны "бешерем"дең "беш"енә рифмалаш булғаны өсөн алынған. "Балдый"ға килгәндә инде, урыҫтарҙың ябай телмәрендә ҡулланылған "балдеть" тигән һүҙгә лә ишара бар. Шулай ҙа башҡаларға һалынырға, күберәк кәйеф-сафа ҡорорға яратыусыны "балда-майҙа йөҙә" тип тә әйтәләр.

Ҡармаҡҡа эләгеп, ялтырап килеп сыҡҡаны өсөн сабаҡты беҙҙең яҡта "ялтырҡас" тиҙәр. "Ялтырҡас, ялтырҡас, селәүемде алып ҡас...", тигән һамағы ла бар. Ысынлап та, шулай әйтеүең була, сабаҡ килеп тә ҡаба. Ә ваҡ селберәй балыҡтарҙы "йотҡалас" тибеҙ. Бала саҡта һыу ситендә мыжғып йөрөүсе йотҡаластарҙы усҡа алып йота торғайныҡ. Ырымы ла бар, йәнәһе, ваҡ балыҡтарҙы йотоусы кеше шәп йөҙә, моряк була, имеш. Сабаҡтарҙың һырты күк булғандарын "күкен" тип тә әйтәбеҙ. Ә ташбаш балыҡҡа килгәндә, беҙҙең ауылда был әрһеҙ балыҡты, ниңәлер, "ташый" тибеҙ.

Һеҙҙең яҡта бындай һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр бармы, булһа, улар ниндәйерәк мәғәнәлә йөрөй?

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# УЙЛАМАЙЫНСА БАШЛАМА,

## башлаһаң, ташлама

Үлем илауһыҙ, туй үпкәһеҙ, ер ташһыҙ, ил яуһыҙ булмаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әгәр ҙә һин кемдәндер бер башҡа бейегерәкһең икән, был һинең башыңдың ҡаҙанышы, тигәнде аңлатмай.

**(Веслав Брудзиньский).**

Уҡытыусыларға миһырбанлы бул. Улар һинең хөрмәтеңә мохтаж булмаһалар ҙа, йәлләүеңә мохтаж.

**(Эшли Брильянт).**

Бер кешегә ҡарағанда бер төркөм кешене алдауы еңелерәк.

**(Кароль Бунш).**

Һинең нимә һөйләгәнең, айырыуса икенсе бер кеше тураһында нимәләр әйткәнең үҙең хаҡында ла бик күпте һөйләй.

**(Поль Валери).**

Үҙең турала насар һөйләмә - кешеләр шаяртыуҙы аңламай.

**(Януш Васильковский).**

Шаңдау менән һүҙ көрәштермә: һуңғы һүҙ барыбер уныҡы буласаҡ.

**(Рамон Гомес).**

Белемле кеше - ул оҡшашлыҡтар таба белгән кеше. Ахмаҡтар өсөн һәр нәмә - өр-яңы.

**(Зигмунд Графф).**

Бөтә нәмәгә лә эйә булыу мөмкин түгел. Шуға ла мин иң әҙенән - аҡсанан башлаясаҡмын.

**(Януш Васильковский).**

Ҡартлыҡтың аҙығы - аҡыл, шуның өсөн йәшлегеңдә ҡартлыҡта аҙыҡһыҙ ҡалмаҫыңды хәстәрлә.

**(Леонардо да Винчи).**

Кеше яңғыҙы ғына яңылышмай. Яңылышып, ул үҙ хатаһын тирә-яҡтағыларға тарата.

**(Сенека).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Таксист ҡалалағы билдәле миллионерҙы өйө алдына килтереп төшөрә. Тегеһе тейешле сумманан артыҡ түләмәй.**

**- Кисә һеҙҙең улығыҙҙы алып килгәйнем, ул миңә 100 долларға артыҡ бирҙе аҡсаны, - тигән таксист.**

**- Ни эшләтәһең, уның атаһы миллионер, ә мин етеммен, - тигән миллионер.**

**Тик үҙ көсө менән аҡса тапҡан кеше генә уның ҡәҙерен белә шул... "**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Сәриә ҒАРИПОВА, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир 253-25-44**
**Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24**
**Матбуғат таратыу 246-03-23**

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 6 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3707
Заказ - 2433/12

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.